ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

11-17 апрель (алағарай)

2020

№ 15 (901)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 1 апрелдән 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 694 һум 34 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, бүләккә китаптар, календарҙар алыу мөмкинлеге тураһында ла онотмағыҙ. Почта хеҙмәткәрҙәре өсөн дә матур бүләктәр әҙерләнә. Бергә булайыҡ!

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ырыуыбыҙ ҡырғыҙ,

үҙебеҙ - башҡорт

7

Аҫыл ирҙәр…

үҙем тип түгел, халҡым тип яныр

8–9

Музейҙа, китапта…

дөрөҫ өлгөләр етерлек

11

Үҙебеҙгә үҙебеҙ…

ғәҙәлһеҙлек ҡылмайыҡ!

12

ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Коронавирус миллионлаған кешене гигиена ҡағиҙәләрен утәргә һәм йәмғиәттә үҙен тоторға өйрәтте, тиҙ менән килешәһегеҙме?

Дамир ВӘЛИШИН, медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, инфекционист: Эйе, кемдәрҙәлер элек бик һанға һуғып бармаған ҡайһы бер гигиена ҡағиҙәләрен хәҙер даими рәүештә үтәргә һәм иҫтә тоторға тура киләсәк. Уларҙың был күнегелмәгән талаптарҙы ҡыйынһынып башҡарыуы ла ихтимал, ләкин хәҙер шундай тәртипкә өйрәнергә кәрәк, был бит уларҙың үҙ мәнфәғәттәрендә. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең арала һәр төрлө бысраҡтан сикәнеп барыусы, микроб һәм бактерияларҙан ҡурҡып һәм һаҡланып йәшәүсе кешеләр ҙә бар. Быға ундайҙар өсөн бөгөнгө ҡәтғи ҡағиҙәләргә үҙҙәрен мәжбүри өйрәтеү ҙә кәрәкмәй, сөнки был улар өсөн нормаға әйләнгән. Бөгөнгө мәкерле был вирус үҙенә ҡарата етди булмаған еңел мөнәсәбәтте һәм ҡайһы берәүҙәрҙең уға төкөрөп ҡарауын ғәфү итмәйәсәк. Әлеге ваҡытта коронавирустың бер нисә төрө билдәле. Әлегеһе - COVID-19 атамаһын алғаны - етенсе типҡа ҡарай, яңы өйрәнелә генә башланы, шуға күрә уның тәбиғәтен алдан күҙаллау мөмкин түгел. 2002-2003 йылдарҙа булып алған шундай вирустың бер төрө менән беҙ таныш, ләкин уның үҙенсәлектәре башҡараҡ ине. Мәҫәлән, уның тик һулар һауа аша ғына йоғоуы мөмкин булһа һәм ул тирә-яҡ мөхиттә оҙаҡ һаҡланмаһа, COVID-19 вирусы һулар һауа аша ла, ҡулдар һәм ҡулланылған әйберҙәр аша ла йоға. Шул уҡ ваҡытта ҡояш нуры аҫтында ул бер-нисә сәғәттә юҡ була һәм ябай зарарһыҙландырыусы саралар - шыйыҡса, спирт, хлор кеүек антисептиктарға ла бирешеүсәнлеге билдәле булды. Төп һаҡланыу сараһы шуның өсөн дә уның тиҙ арала таралыуына юл ҡуймау. Бөгөнгө хәлдә сит илдәргә сығыу тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Икенсенән, кеше күп тупланған урындарҙа булмаҫҡа кәрәк. Өсөнсөнән, ябай гигиена ҡағиҙәләрен үтәү: үҙегеҙ йәшәгән, эшләгән бүлмәне йыш елләтеү, зарарһыҙландырыусы шыйыҡса йә хлор иретмәһендә сылатылған еүеш сепрәк менән телефон, компьютер кеүек үҙегеҙ файҙаланған әйберҙәрҙе даими һөртөп алырға, бөҙрәфтән сыҡҡас йә булмаһа, магазин, аптека, транспортта булғандан һуң ҡулдарҙы кер һабыны менән 20-40 секунд буйы күпертеп йыуырға, йә башҡа антисептик саралар менән эшкәртергә. Бик кәрәк булған осраҡтарҙа өйҙән сығырға тура килә икән, мотлаҡ битлек кейергә, тик ҡайһыларының микробтарҙан һаҡлау ваҡыты 2-3 сәғәт кенә икәнен дә онотмаҫҡа кәрәк. Өйгә ҡайтып ингәс, өҫ кейемен щетка менән таҙартырға, йә булмаһа антисептик һалынған пульверизаторҙан һиптерергә. Һаҡланыу саралары хәҙер һәр кемгә яҡшы билдәле, тип уйлайым, сөнки был турала даими рәүештә телевизорҙан да, социаль селтәрҙәр аша ла иҫкәртелеп тора. Иң мөһиме - кешеләрҙең был хәүефле сиргә еңел ҡарамауы, ә уны бөтөн етдилегендә ҡабул итеп, тейешле һығымта яһауы.

(Дауамы 2-се биттә).

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

ТАЖЛЫ БУЛҺА НИ…

Әллә ниҙәй күреп шуны
Юғары күтәрмәйек,
Таж кейгән был вирус тиеп
Түрҙәргә үткәрмәйек.
Лимон, һарымһаҡ аша ла,
Эс һин ҡайнар сәйеңде,
Баланын һәм ҡоротон ҡуш,
Сәйгә һал үләнеңде.
Түҙеп кенә өйҙә ултыр,
Үтер, тажлы булһа ла,
Башҡорттоң милли ризығы
Үҙе дауа лабаһа!

Фәүзиә ҠОТЛОГИЛДИНА.

ӨЙҘӘ ҮЛТЫРАЙЫҠ!

12+

✓ *Бына шундай яуапһыҙҙарға вирус: "Туҡтағыҙ! Үҙегеҙҙең ни ҡыланыуығыҙ, ни өсөн йәшәүегеҙ хаҡында уйланығыҙ!" - тип әйтә төҫлө. Шундайҙар барҙа йоғошло сир баҫылыу урынына тағы ла күберәк тарала.*

БЫНАҒАЙЫШ!

ТӘҘРӘ АША НИ КҮРЕНӘ?

Көн дә иртән тороу менән тәҙрәнән тышҡа күҙ һалам. Анда-һанда ала-ҡола булып ятҡан ҡар ҙа кәмей барып, ireп юғалды, ниһайәт. Уның ҡарауы, ҡар аҫтынан сыҡҡан сүп-сар, ҡый-һай күҙгә күренеп ята башланы. Йыл да йыйылышып, тирә-йүнде таҙартыу өсөн өмәгә сығыу ғәҙәтен дә иҫкә алыусы юҡ быйыл, әлегә ярамай ҙа: өйҙәребеҙгә бикләнгәнбеҙ.

Ана-а-ау туғыҙ ҡатлы күрше йорттоң был башынан арғы сигенә тиклем һуҙылған газонды тырматып, таҙартып йөрөүсе бер ҡатын ғына күренә. Шул тирә участка өсөн яуаплы урам һепереүсе булып сыҡты ул. Ҡыш буйы балконға сығып тәмәке көйрәтеүселәрҙең өҫтән ырғытылған тау-тау төпсөктәрен һоҫко-һоҫко һепереп алып тоҡҡа тултырып йөрөй. Ни эшләйһең - әҙәп, тәртип белмәгән әҙәмдәрҙең үҙҙәрен ошо эшкә ҡуша торған закон ғына юҡ шул. Ғәҙәттәге көндәрҙә был ваҡытта йорт алды буш була ине, әле теҙелеп киткән машиналар рәте күпселек халыҡтың өйҙә булыуы хаҡында һөйләй. Бынан беҙҙең йорт алдын бағыусы урам һепереүсе ҡатынға бер ҙә генә рәхәт түгел. Бына ул сүп-сар тулы контейнерҙы көскә өҫтөрәп, әлеге машиналар араһынан сығырға юл эҙләй, сәғәт 10-дарға сүп-сар йыйыусы машина килеп туҡтаясаҡ, контейнерҙы юл ситенә сығарып ҡуйырға кәрәк. Әгәр шунда берәйһенең машинаһына контейнер бәрелә-нитә ҡалһа, бәләһенән башаяҡ. Үҙҙәрен ғәйепләмәҫтәр бер ҙә. Шундай ваҡытта ла тырышып эшләп йөрөгән меҫкен ҡатынға бәлә яғырҙар. Подъезд юлын ҡаплап ултырғас, машиналар араһында кәмендә сүп һауыты һыйырлыҡ ара ҡалырға тейешлеген белмәйме ни машина хужалары? Дөрөҫөрәге, улар был хаҡта уйлап та бирмәй. Әлеге лә баяғы аң һәм әҙәп самалығы.

Был көндәр буйы тәҙрәнән ҡарап тора икән, тип уйлай күрмәгеҙ тағы. Биш-алты минут торғанда ла бик күп ғибрәтле күренештәр шаһиты булырға тура килә. Ә инде ҡарашты тәҙрәнән интернет киңлегенә күсерһәң, унда ла хас беҙҙең йорт алдындағы кеүек төрлө хәлдәргә тап булаһың: кемдер донъяны вирустан таҙартыу өсөн алғы һыҙыҡта көрәшә, үҙ ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйып, көн-төн ауырыуҙар янында, ә кемдер интернет селтәрҙәрен юҡ-бар, сүп-сар хәбәрҙәр менән ҡыйлай, агрессияһын сәсә, ризаһыҙлыҡ белдерә. Ундайҙарҙың һәр төрлө комментарийҙарын уҡый башлаһаң, сәстәрең үрә торор. Туҙға яҙмаған ниндәй генә буш хәбәр, властарҙы әрләү, негатив юҡ унда! Йәнәһе лә, үҙизоляция халыҡты төп проблемаларҙан ситләштереп, өйҙә ултыртып ҡуйыу өсөн махсус эшләнә, имеш. Был асылда юҡ-бар уйҙырма менән кеше башын бутарға маташыусыларҙың мәкерле эше. Йә булмаһа, бәлә һала кемдер: өйҙә ултырған өсөн үҙенә түләү талап итә. Ә бит был турала, эш хаҡы һаҡланасаҡ, тип айырым-асыҡ әйтелде. Бәләкәй эшҡыуарҙар, бизнесмендар ҙа үҙ файҙаһын ҡайыра. Эшҡыуарлыҡҡа ярҙам йөҙөнән бүленгән аҡса әҙ тойола уларға. Ошондай ҡатмарлы заманда йүнле бизнес хужалары, киреһенсә, ҡарт-ҡороға, ихтыяжы булған башҡа кешеләргә мәрхәмәтлек акцияһы ойоштора, табиптарҙы бушлай туҡландыра, хатта уларға сәскә гөлләмәләре тарата. Бына был ысын бизнесмендарса, исмаһам, ә кеҫә яйын ҡайғыртып шыңшыу түгел. Бөгөн аҡса бөтәһенә лә кәрәк, бигерәк тә иртәгәһе көндө хәстәрләп, беҙҙе икмәк менән тәьмин итеү өсөн сәсеүгә сыҡҡан баҫыу батырҙарына ла, шул уҡ фиҙакәр табиптарға ла. Шуны иҫтә тотайыҡ: ил өҫтөнә килгән һынауҙы бергә һәм берҙәм, бер-беребеҙгә ярҙамлашып, ниндәй хәлдә лә кешелек сифатын юғалтмай ғына үткәреп ебәрәйек. Ил ни күрһә, шуны күрәйек.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Коронавирус миллионлаған кешене гигиена ҡағиҙәләрен үтәргә һәм йәмғиәттә үҙен тоторға өйрәтте, тиҙ менән килешәһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

Айгөл ИҘӘНБАЕВА, менеджер: Эпидемия башланғандан алып беҙҙе нисек дөрөҫ итеп ҡул йыуырға, урамдан эштән ҡайтҡан өҫ кейемдәрен, магазиндан һатып алынған аҙыҡ-түлекте, йәшәгән йортобоҙ эсен һәр төрлө бактериянан таҙартырға өйрәтәләр. Үҙемдең был йәһәттән сикәнә торған ғәҙәтем булғас, былай ҙа микробтар менән шулайыраҡ "көрәшеп" йәшәй инем инде, тик хәҙер уғата тырыша башланым: ишек тотҡаһы йә телефонға тотонған һайын ҡул йыуа торғас, нервылар ҙа ҡуҙғый төштө һымаҡ. Элек был хаҡта ҡайғырмаған дуҫ һәм таныштарым да шулай эшләй. Кемдәрҙең ошоға тиклем ураған һайын ҡул йыуыу ғәҙәте булмаған, эпидемиянан һуң да ҡәтғи гигиена ҡағиҙәләре ҡандарына һеңеп ҡалыр, моғайын, һәм унан бер зыян да булмаясаҡ. Илдәге миллионлаған кешенең бөтәһе лә гигиена ҡағиҙәләрен үтәйме-юҡмы - белмәйем, шулай ҙа ҡайһы берәүҙәрҙең әлеге ваҡыт өсөн ғәҙәл булған власть талабын үтәмәйенсә, өйҙә эшләп ултырыу урынына иркенләп урамға, баҙар һәм магазиндарға сығып китеп, башҡаларға хәүеф тыуҙырып йөрөүенә ҡарағанда, ил халҡының бөтәһе лә тәртипкә күнер, тип өмөт итеүе икеле. Өйҙә эшләү өсөн ҡайтарып ебәрелгән кешеләрҙең парктарға сығып, шешлек ҡыҙҙырып, ашап-эсеп, күңел асып, ял итеп йөрөүе әхлаҡһыҙлыҡтың тап үҙе булды ла инде. Йәнә бер миҫал. Танышымдың бер подъезда йәшәгән күршеләре Таиландтан ҡайтып төшкән, ләкин был турала ләм-мим: ҡайҙалыр хәбәр итеү ҙә, тикшерелергә барыу ҙа юҡ; бер ни булмағандай, башҡалар менән аралашып йәшәп ятырға йыйынһалар, бер аҙнанан температуралары күтәрелеп, сирләп тә киткәндәр. Ошо ваҡыт эсендә күпме кешегә сир йоҡтороп өлгөргәндер улар... Бындай миҫалдар бик күп, алыҫ йөрөргә лә түгел. Мин үҙем эшләгән компания хужаһы ҡатыны һәм дуҫтары менән (улар ҙа беҙҙә эшләй) сит илгә барып ҡайттылар һәм икенсе көнөнә үк эшкә сығып, компанияның утыҙлаған хеҙмәткәрен йыйып, кәңәшмә үткәреп ташлағандар. Бер-ике көндән сәйәхәтселәрҙең беребеһен юғары температура менән тиҙ ярҙам машинаһы алып киткән. Бына шундай яуапһыҙҙар, битарафтар һәм наҙандарға вирус: "Туҡтағыҙ! Үҙегеҙҙең ни ҡыланыуығыҙ, ни өсөн йәшәүегеҙ хаҡында уйланығыҙ!" - тип әйтә төҫлө. Шундайҙар барҙа йоғошло сир баҫылыу урынына тағы ла күберәк тарала, эпидемия оҙаҡҡа һуҙыласаҡ бит, ниңә шуны аңламайҙар икән? Уртаҡ бәлә, хәүеф кешеләрҙе мәрхәмәтлерәк итә, уйландыра тигәндәренә шунан нисек ышанырға? Белекһеҙҙәрҙе әлеге кеүек афәт тә үҙгәртә алмаясаҡ, шуныһы йәл. Уларҙы тик бик дөрөҫ һәм ваҡытлы ҡабул ителгән штраф һәм енәйәт яуаплылығы кеүек яза саралары ҡулланыу ғына аҡылға ултыртыр, бәлки.

Фәрзәнә ИШКИЛДИНА, хеҙмәт ветераны: Эйе, был коронавирус тигәндәре бик күптәрҙе аҡылға ултыртырға уйлай, тик йоҡторған хәлдә унан һауығып, аяҡҡа баҫыу ғына шарт. Үлемесле хәүеф менән янаһа ла, бер профессор, иҫән-һау ҡалһаҡ, был вирусҡа рәхмәт әйтербеҙ әле, тигәнгә бик нык аптыраһам, был һүҙҙәрен ул артабан шулай аңлатты: "Әҙәм балаларының күбеһе шашыныуынан туҡтап, үҙ асылына ҡайтыр ине, бәлки. Аңлаған кешегә ул тормош ҡәҙерен белергә ярҙам итәсәк". Уйлап ҡараһаң, ысынлап та, ошоға тиклем беҙҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырған ҡайһы бер мәсьәләләр хәҙер ваҡ-төйәк кенә булып күренә. Ҡыйынлыҡтарға ҡарамай, ошо эпидемияға тиклемге тормошобоҙҙа ҡәнәғәт кенә йәшәп ятһаҡ ине лә бит... Дөрөҫ, башбаштаҡланыу, хаттин ашыу күренештәре лә күбәйгәйне шул. Ана шундайҙарҙы иманға күндереү юлылыр был, тигән фекер менән килешмәй ҙә булмай. Юғары даирәләр әһелдәре берҙәнбер маҡсат итеп байығыуҙы ҡуйған заманда, урлашыуҙар, әхлаҡһыҙлыҡ, хаяһыҙлыҡ күренештәренә ҡарата бер ниндәй яза ла булмағас, иланы көс шулай ҡон ҡайтарта, күрәһең. Тәрбиәһеҙлек көсәйгәндән-көсәйә бара бит. Был ябай ғына миҫалдарҙан да күренә. Йәмәғәт транспортында күп йөрөргә тура килә. Бына шул ҡыҫыҡ ҡына автобус салондарында аяуһыҙ көрәш бара: этеш-төртөш, әр һәм ireш, бер-береһен мыҫҡыллау һәм кәмһетеүҙәр... Быға сыҙарға ла булыр ине, ләкин күптәрҙең өйөндәге кеүек һис тартынмай тығыҙ салонда кеше йөҙөнә ҡарап йүткереү-бышҡырыуҙары сығырҙан сығара. Тыйнаҡ кеше, ғәҙәттә, ҡулъяулыҡ йә салфетка менән йөҙөн ҡаплай һала, ә башҡаларҙың былай эшләргә башына ла килмәй. Хәҙер бындай ҡағиҙә тәртип белмәгәндәрҙән дә талап ителәсәк. Тик белекһеҙҙәрҙе әҙәпкә өйрәтеүе ауыр эш инде ул. Шуға ла иң тәүҙә ундайҙарҙың "аң гигиенаһы" өҫтөндә эш алып барыу кәрәктер. Уйы, маҡсаты, ғәмәле таҙа кеше, ғәҙәттә, әҙәпле лә була, сөнки был уның ҡанында. Ә инде көнсөл, мәкерле, битараф әҙәмде әллә ниндәй вирус та әҙәпкә өйрәтә алмаясаҡ, тип уйлайым.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓10 апрелгә ҡарата мәғлүмәттәр буйынса Башҡортостанда 40 кешелә коронавирус инфекцияһы раҫланған, алты кеше дауахананан сығарылған. Ауырыусылар араһында Өфө, Дүртөйлө, Күмертау, Бәләбәй, Белорет, Бөрө, Сибай, Октябрьск, Әлшәй, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Ейәнсура райондары кешеләре, шулай уҡ Республика клиник дауаханаһы ауырыуҙары бар. 142 кеше медицина күҙәтеүе аҫтында. 9 апрелгә барлығы 13652 кеше лаборатор тикшереүе үткән.

✓Федераль почта хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә һәм ҙур тораҡ пункттарҙа урынлашҡан почта бүлексәләре шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә клиенттар өсөн ябыла. Эш көндәрендә лә клиенттар өсөн килеү ваҡыты ҡыҫҡартыла. Почтальондар пенсия, пособие һәм хаттарҙы үҙгәрешһеҙ илтеп бирә. Ләкин үҙгәрештәр аҙнаһына өстән биш көнгә тиклем эшләгән ауыл һәм ҙур булмаған ҡала элемтә бүлексәләренә ҡағылмай. Был - республикала урынлашҡан почта бүлексәләренең төп өлөшө. Улар элекке режимда эшләй.

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығының коронавирус инфекцияһы пандемияһына арналған брифингында Башҡортостандың тулыһынса йәки өлөшләтә карантинға ябылған дауаханалары аталды. Октябрьский ҡалаһының 1-се дауаханаһы - ике бүлексә ябыҡ, Бәләбәй үҙәк дауаханаһы, Бөрө дауаханаһы - хирургия һәм терапия корпусы ябыҡ. Өфөлә Республика клиник дауаханаһы карантинда.

✓Башҡортостан коронавирусҡа ҡаршы көрәшеү өсөн федераль бюджеттан 1,23 млрд һум алды. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры һүҙҙәренсә, Рәсәй Хөкүмәте бойороғо буйынса, аҡса яңы шарттарҙа эшләү өсөн дауалау селтәрен әҙерләүгә йүнәлтелә. Шулай уҡ тейешле ҡорамалдар һатып алына, кислородҡа тоташтырылған койкалар һанын арттырыу буйынса эштәр финанслана.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Инстаграмда яҙылыусылар һаны буйынса Рәсәй төбәктәренең өс губернаторы иҫәбенә инде. Ошо көндәрҙә социаль селтәрҙә республика етәксеһенең тормошон күҙәтеп барыусылар 500 меңдән ашты. Чечен Республикаһы башлығы Рамзан Ҡадировтың (1 миллион 58 мең) һәм Мәскәү мәры Сергей Собяниндың (784 мең) ғына яҙылыусылары Хәбировҡа ҡарағанда күберәк.

✓ *Ошо көндәрҙә ысынлап та был ғүмерҙең бер мәл генә һәм шул мәлдең иң матур, бәхетле өлөшө ошо яҡындарың менән үткәргән осор икәнде тойҙоҡ. Был донъяның яһалма ялтырағына ышанып-таянып булмауына төшөндөк.*

УЙЛЫҒА -УЙ

АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘ АЛДЫНДА...

барыбыҙ ҙа бер тигеҙ

Ғәҙәти булмаған ситуацияла кеше үҙгәрә. Сөнки бындай хәлдә эмоциялар урғып сыға һәм психологик көсөргәнеш тыуа. Хатта иң тыныс һәм бошмаҫтар ҙа, иң ҡыйыу һәм шәһит рухлылар ҙа хис-тойғолар солғанышын, уйҙар баҫымын кисерә һәм ошо торош уны эске яҡтан үҙгәртә.

Һәр кемдең реакцияһы үҙенсә һәм төрлө була. Ҡайһы берҙәрҙең бөтөн тереклек итеү ресурстары ҡәтғи генә тәртипкә теҙелә һәм улар үҙҙәрен ҡулға алып, тейешле булғанды талапсан үтәп, яҡындарын ҡурсырға ынтыла. Бындай кешеләрҙең йәшәү теләге, көсө юғары. Икенселәр бәлтерәп төшә, паникаға бирелә, бер нимә лә хәл итә алмаҫ булып ҡала. Бындайҙар үҙен генә түгел, эргә-тирәһендәгеләрҙе лә ҡурҡыта, шом һалыр һүҙҙәр һөйләп, бәлә көтөп йөрөген бөтөрә. Ике миҫалдағы ҡыланыштар ҙа беҙҙең холоҡ һыҙаттарынан, тәрбиәнән, организмдың индивидуаль үҙенсәлектәренән, мораль сыныҡҡан булыу-булмауҙан, психик тороштан, мәғлүмәтлелектән килә.

Ғәҙәти булмаған хәлдәрҙә, ниндәйҙер афәт ҡурҡынысы тыуғанда кеше ҡурҡып ҡала икән - был ғәйеп түгел. Әҙәмгә үҙ йәнен һаҡлау төшөнсәһе һалынған. Һаҡланыу - ул шул йән өсөн ҡурҡыу, хафаланыу, ҡурҡыныстан ҡасырға, йәшенергә теләү теләге. Әммә был торошто беҙ контролдә тота алырға тейеш. Ҡурҡыуҙы аҡыл, яуаплылыҡ кеүек йәшәүгә ынтылдырыусы ыңғай тойғолар еңә алһын. Ошо тәңгәлдә беҙҙең аңда күптән онотола барған батырлыҡ, ҡыйыулыҡ кеүек сифаттар ҙа уянһын ине. Һәм улар күптәрҙә уяна ла. Сөнки, башта әйткәнсә, ғәҙәти булмаған киҫкен ситуацияларҙа кешенең йоҡлап яткан, бығаса үҙен белдермәгән йәки кәрәге тойолмаған яҡтары ла асылып китә. Шул ваҡыттарҙа батырҙар тыуа, шәһитлектәр ҡылына, һатлыҡтар хасил була, намыҫ юғала йәки, киреһенсә, намыҫ һәм тоғролоҡ еңеп сыға. Төрлө була хәлдәр һәм кешеләр үҙ эске донъяһына ярашлы бер-береһенән айырмалығын, өҫтөнлөгөн йәки түбәнлеген күрһәтә.

Бөгөнгө көсөргәнешле торошта беҙ ҙә үҙгәрҙек. Күп нәмәне аңланыҡ, тойҙоҡ һәм уйҙарҙы, аңды тәртипкә һалдыҡ. Кешелек ҡиммәттәре ҡапыл ғына алмашынды. Кисәге ҡыҙыҡ һәм кәрәк булғандар мәгәнәһен юғалтты. Кисәге мөһим нәмәләр баштан сығып осто. Үткән аҙнала ғына беҙгә ниндәйҙер кәңәшмәләр, ултырыштар, отчеттар, түрәләр, командировкалар, саралар донъя тотҡаһы ҡымаҡ булһа, бөгөн беҙ уларҙың бөтөнләйе менән әҙәм ғүмере өсөн кәрәкле булмауын белдек. Беҙ бәлә килгәнен тойғанда бер ҙә эшебеҙҙе йәки идеяларыбыҙҙы яҡларға, уларҙы ҡоткарып ҡалырға ынтылманыҡ. Беҙ иң беренсе сиратта үҙ йәнебеҙ һәм балаларыбыҙ, яҡындарыбыҙ өсөн борсолдоҡ. Шуларҙы һаҡлап-ҡурсып ҡалыуға ташландыҡ. Быны бит ул Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте! Ошо аҙ ғына ваҡыт эсендә донъя халыҡтары аңындағы ысын хистәрҙе уята һәм рухи таҙарыныу кисертә алыуы.

Мин дә ғәзиз балаларымды ҡанат аҫтыма алып ултырҙым. Бығаса уларға бер ҙә генә ваҡыт етмәй, күргәндә күреп ҡалам, күрмәгәндә телефондан ғына аралашабыҙ. Әле быны хатта телевизор ҙа тоҡандырмайбыҙ, оҙаҡ итеп һөйләшеп ултырабыҙ, сәй эсәбеҙ, бала саҡ иҫтәлектәре менән бүлешәбеҙ, төрлө тарихтарҙы хәтерләйбеҙ, фотоальбомдар ҡарайбыҙ, олатай-өләсәйҙәрҙе, уҡыған китаптарҙы һөйләйбеҙ. Үлем һәм йән тураһында ла һөйләшәбеҙ. Сөнки ул да беҙҙең йәнәшәлә йөрөгән ысынбарлыҡ. Бер-беребеҙгә иғтибарлыбыҙ, йомшаҡбыҙ, миһырбанлыбыҙ.

Ошо көндәрҙә ысынлап та был ғүмерҙең бер мәл генә һәм шул мәлдең иң матур, бәхетле өлөшө ошо яҡындарың менән үткәргән осор икәнде тойҙоҡ. Был донъяның яһалма ялтырағына, уйлап сығарылған идеяларына, туҡтауһыҙ үҙгәреүсән сәйәсәтенә һәм хатта беҙҙе бәйләп тотҡан иҡтисадына ла ышанып-таянып булмауына төшөндөк. Артабан, киләсәктә, яҡын көндәрҙә йәки айҙарҙа, бәлә ҡурҡынысы сигенгәс (мин бының шулай булырына ышанам), беҙ тағы ла өйрәнгән ҡуласа эсенә инеп баҫырбыҙ. Шулай уҡ эш-көш тип сабырбыҙ, нимәләрҙер хәл итербеҙ, янырбыҙ-көйөрбөҙ. Әммә әлеге хәл-ваҡиғалар беҙҙең аңда үҙ эҙен ҡалдырыр. Аллаһы Тәғәлә алдында яланғас һәм ярҙамһыҙ, көсһеҙ һәм ҡөҙрәтһеҙ, байлыҡһыҙ һәм даныһыҙ булып килеп баҫҡан һәм бары уның ғына ярлыҡауына өмөт иткән мәлебеҙҙе онота алмабыҙ, моғайын...

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.

КИЛЕШМӘЙЕМ...

ТАБИПТАРҘЫ ХӨРМӘТЛӘЙЕК!

Бөгөнгө бәлә менән хеҙмәте буйынса иң беренсе кемдәр йөҙмә-йөҙ осраша? Эйе, табиптар. Италия халҡы табиптары алдында баш эйерлек, гимн йырларлыҡ булды. Ә беҙ? Ҡасан уларҙың беҙҙе һаҡлау, һауыҡтырыу өсөн ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыуын аңларлыҡ булырбыҙ? Меңәрләп ҡырыла башлағас ҡынамы?

Йәш кенә педиатр ҡыҙ пациенттарын эҙләп, адрестан-адресҡа саба. Бының сәбәбе - сит илдә булып ҡайтҡан, ауырыуҙар янында йөрөгән балаларын ата-әсәләре табипҡа алып килеп тикшертеүҙе һаман кисектерә икән. Улар, күрәһең, балаға сир йоҡмағандыр тип уйлай. Йәки үҙаллы һауыҡтырырына ышана. Ундай кешеләрҙең ҡайһылары табипҡа ишек асмай. Педиатр көс структураһы хеҙмәткәрҙәрен эйәртеп йөрөргә һәм... ауырыу менән бәйләнештә булған балалар йәшәгән йорттарҙың ишектәрен емертеп астырырға мәжбүр. Ул ауырыуы асыҡланғанмы, юҡмы икәнде лә белмәйенсә, пациентты тикшерергә, беренсе осмотрҙарҙы үткәрергә бурыслы. Терапевтар ҙа шул уҡ эште башҡара. Тикшерелергә килгән ауырыуҙы беренсе булып ҡабул итеп, диагноз иҫбатланғанға тиклем хәүеф эсендә һаман да поста була... Табиптар ҙа тимерҙән түгел, ауырыуҙарҙың беренсе тулҡынын ҡабул иткән педиатрҙар һәм терапевтар үҙҙәре лә тикшерелеүгә, профилактикаға һәм дауаланыуға ябыласаҡ. Аҡ халатлылар ҡурҡыныс аҫтында булыуын белгәндә лә, һөнәренә тоғро ҡалып, һаман да ҡабул итеүҙәр алып бара. Был батырлыҡ түгелме ни?

Һуңғы йылдарҙа табип һөнәренә үтә лә ихтирамһыҙлыҡ сәскә атты йәмғиәттә. Халыҡ врачтарҙы хеҙмәтләндереүсе итеп кенә ҡабул итә башланы. Нисек итеп табип хеҙмәтләндереүсе генә булһын инде? Ул кеше сәләмәтлеген ҡайғыртыусы белгес, күп осраҡта хатта ғүмерен ҡоткарып ҡалыусы ла. Ә бит үҙебеҙ саҡ ҡына берәй нәмә булһа, поликлиникаға, дауаханаға йүгерәбеҙ. Табиптың күҙенә мөлдөрәп ҡарап ярҙам көтәбеҙ. Үҙебеҙҙең һаулыҡты ҡайғырта белмәйбеҙ, сәләмәт тормош алып бармайбыҙ, ваҡытында тикшерелмәйбеҙ, хатта тейешле медосмотрҙы ла ҡуйҙырып ҡына алып сығырға теләйбеҙ, ә бер нәмә булһа - табип ғәйепле. Эсәбеҙ, тартабыҙ, күп ашайбыҙ, аҙ ҡыбырлайбыҙ, ярамаған ризыҡты ҡулланабыҙ һәм шул уҡ ваҡытта врачтарҙан нимәләрҙер талап итәбеҙ. Әлбиттә, икенсе осраҡтар ҙа була, тик башлыса беҙ үҙебеҙ яһаған, һатып алған, шул хәлгә еткергән ауырыуҙарҙы һаулыҡ һаҡсыларына яп̂арабыҙ...

Вирус бәләһе бер айҙа ғына бөтмәйәсәк әле. Бәлки, оҙаҡҡа ла һуҙылыр, белеп булмай. Беренсе тулҡынды ҡабул иткән дауалау бүлеге табиптарын кардиолог, офтальмолог, уролог кеүек тар йүнәлеш докторҙары алмаштырасаҡ. Унан был посҡа медсестралар ҙа баҫмаҫ тимә... Ҡурҡытыу итеп ҡабул итмәгеҙ, әммә аҡ халатлыларҙың ниндәй осраҡта ла халыҡты ҡабул итәсәген һәм дауалаясағын онотмағыҙ. Бөгөн дауаханаларҙа, лазареттарҙа, өйҙәргә йөрөп тишереүселәр араһында медицина училищеһы һәм университеты студенттары ла бихисап. Күптәре волонтер булып китте. Улар ҙа кемдәрҙеңдер гәзиз балалары, уларҙың да йәшәгеһе килә, әммә улар иң беренсе урынға үҙҙәренең һөнәри яуаплылығын ҡуйған һәм хеҙмәттәрен намыҫ менән башҡара. Әлеге көндәрҙә табиптар фронттың алғы һыҙығындағы һалдаттар һымаҡ уҡ. Быларҙы аңлайыҡ, күрәйек һәм баһалай беләйек. Һаулыҡ хәүеф аҫтында булғанда беҙгә иң кәрәкле һәм ҡиммәтле кешеләр - улар врачтар, медицина хеҙмәткәрҙәре.

Ошо көндәрҙәге хәлдәрҙе күҙәтә барып, төрлө ябырылыуҙар менән килешмәйенсә, табиптарҙы яҡлап һүҙ әйтмәйенсә булдыра алманым...

Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостан Республикаһына Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына торлаҡ һатып алыу өсөн 14,86 миллион һум аҡса бүлде. Бойороҡҡа ярашлы, ил субъекттары Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын, һәләк булған (үлгән) һуғыш инвалидтары һәм яугирҙарының ғаилә ағзаларын торлаҡ менән тәъмин итергә тейеш. Башҡортостан бүленгән суммалар күләме буйынса биш төбәк иҫәбенә инде.

✓7 апрелдә Башҡортостанда нотариустар физик һәм юридик берәмектәрҙе ҡабул итә башланы. Документтар "дежур нотариаль конторалар"ҙа ҡабул ителә. Уларҙың исемлеген Башҡортостан Республикаһының Нотариаль палатаһы сайтында табырға йәки ҡыҙыу бәйләнеш телефоны буйынса белергә мөмкин: 8 (347) 200-82-92.

✓Өйҙәренә ҡайта алмау сәбәпле сит илдә ҡалған рәсәйҙәргә социаль ярҙам күрһәтелә. Тәүлегенә өлкәндәргә - 2400 һум, 14 йәшкәсә балаларға - 1600 һум. Рәсәй гражданд̂арына ярҙам күрһәтеү тәртибен Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте билдәләгән. Ярҙам алыу өсөн Рәсәй гражданы берҙәм дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр порталында электрон ғариза тултырырға тейеш.

✓Башҡортостандың күп функциялы үҙәк офистары 6 апрелдән 30-ына тиклем алдан яҙылыу буйынса эшләй. Дүшәмбе-йома көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан 6-ға хәтлем документтар тапшырырға һәм алырға мөмкин. Бәйләнеш үҙәгенең +7 (347) 246-55-33; +7 (927) 3333 100 телефондары; күп функциялы үҙәктең рәсми сайтында шәхси кабинет аша; дәүләт хеҙмәттәре порталында яҙылырға була.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров кесаҙналағы кәңәшмәлә хәбәр итеүенсә, республикала 65 йәштән өлкәндәр һәм балалар өсөн комендант сәғәте индерелә. Балаларға 18 сәғәттән 13 сәғәткә тиклем йәмәғәт урындарында булыу тыйыла. Радий Фәрит улы өлкән кешеләрҙе тағы ике аҙна шулай уҡ өйҙә ултырырға саҡырҙы.

✓Сибай ҡалаһында яңы коронавирус инфекцияһы йоҡтороуҙың беренсе осраҡы теркәлгән. Ҡала мәры Рөстәм Афзалов һүҙҙәренсә, Сибай кешеһенең яңы коронавирус йоҡтороу осраҡының Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл районындағы хәл менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Ауырыуҙың ғаилә ағзалары ла карантинда. Хәҙерге көндә ҡалала 76 кеше табиптар күҙәтеүендә.

✓ *Шулай уҡ 10 апрелдән киске сәғәт 4-тән алып баҡсаға, дачаға йәки ҡаланан ситтә булған шәхси йорттарға барыу ҙа рөхсәт ителә. Әммә шәхси транспортта хәрәкәт итеү тәүлегенә 90 минуттан артмаҫҡа тейеш.*

ҠЫҺҠАСА

ПЕНСИЯҒА ӨҺТӘМӘ

✓ **1 апрелдән социаль пенсиялар 6,1 процентҡа арттырылды.** Ошо ваҡыттан хәрбиҙәрҙең инвалидлыҡ буйынса дәүләт пенсиялары, ҡараусыһын юғалтыу осрағы буйынса пенсиялар (һәләк булған хәрбиҙәрҙең ата-әсәләренә, тол ҡатындарына), Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарының һәм яугирҙарының инвалидлыҡ буйынса пенсиялары, радиация йәки техноген һәләкәттәр һөҙөмтәһендә зыян күргән граждандарҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларының ҡартлыҡ буйынса пенсиялары ла арттырылды. Бынан тыш, күләме социаль пенсияларҙың артыуына бәйле башҡа түләүҙәр ҙә арта. Шулай уҡ 1 апрелдән Рәсәй Федерацияһы Геройҙарына, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына, Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт Геройҙарына, Дан ордены, I дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены менән бүләкләнгән граждандарға өҫтәмә айлыҡ матди тәьминәт күләме индексацияланды. "Республикала 98 500 пенсионер, шул иҫәптән социаль пенсия алған 92 600 кеше арттырылған пенсия ала башлай", - тине Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров.

✓ **Башҡортостанда йыл башынан 25 кеше спиртлы эсемлектәрҙән ағыуланып үлгән. Уҙған йылдың ошо уҡ осоронда 53 үлем осрағы теркәлгән.** Спиртлы эсемлектәр менән ағыуланыусылар иҫәбендә 9 бала бар, был осраҡтар Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Дүртөйлө районында теркәлгән. Токсикологик мониторинг мәғлүмәттәре буйынса, 2020 йылдың ғинуар-февралендә республикала 478 химик этиологиялы киҫкен ағыуланыу осрағы күҙәтелгән. Улар иҫәбендә -117 дарыуҙар менән ағыуланыу осрағы. Шуның 51-ендә медикаменттар һәм биологик матдәләр суицид маҡсатында файҙаланылған. Ун бер кеше наркотик матдәләр менән ағыуланған, һигеҙе үлгән. 43 кеше углерод әсемәһе менән ағыуланған, 33-ө иҫән ҡалмаған. Бәшмәк менән ағыуланыуҙың бер осрағы теркәлгән.

✓ **Башҡортостанда икенсе йыл рәттән туберкулез менән сирләүселәрҙең артыуы күҙәтелә.** Роспотребнадзорҙың республика идаралығы матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, 2019 йылда туберкулез менән ауырыу кимәле 100 мең кешегә 43,8 осраҡ тәшкил иткән. Был 2018 йылға ҡарағанда 10 процентҡа юғарыраҡ - 39,8 осраҡ. 2017 йылда күрһәткестәр 100 мең кешегә 40,9 осраҡтан саҡ ҡына юғарыраҡ булған. Башҡортостанда ауырыуҙың уртаса күрһәткестәре лә Рәсәй һәм Волга буйы федераль округы менән сағыштырғанда 13,4 процентҡа һәм 15,8 процентҡа юғарыраҡ булған (2018 йылда - 5,3 процент һәм 1,3 процент). Сирледәрҙең күбеһе Белорет (96,3), Иглин (90,7), Салауат (84,9) райондарында теркәлгән. Шуның менән бергә ведомствола балалар арағында туберкулез менән ауырыуҙың сағыштырмаса ыңғай яҡҡа үҙгәреүен билдәләнеләр. Уҙған йылда ул 4,8 процентҡа кәмеп, 100 мең балаға 4,5 тәшкил иткән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

МАШИНАЛА МӨМКИН

Башҡортостандың Цифрлы үҫеш министрлығы яңы doroga02.ru сервисын асып, үҙизоляция режимы ваҡытында шәхси автомобилдә йөрөү мөмкинлеген булдырҙы.

Уға ярашлы, яҡын туғандарыңдың балаһы тыуғанда; даими йәшәгән урыныңа ҡайтҡанда; яҡын туғандарығыҙға аҙыҡ-түлек, дарыу, көндәлек көнкүреш әйберҙәре алып барғанда; ауыр сирле йәки стационарҙа ятҡан яҡын туғандарығыҙҙы тәрбиәләгәндә; алдан яҙылыу буйынса планлы медицина ярҙамы алыу өсөн дауалау учреждениеларына мөрәжәғәт иткәндә йәки йүнәлтмә буйынса госпитализацияланғанда; бәйләнеш, финанс ойошмалары, МФЦ-ға мөрәжәғәт иткәндә; яҡын туғаның вафат булғанда; үҙең етештергән продукцияны һатҡанда ошо сервиста теркәлеү үтергә кәрәк. Шулай уҡ 10 апрелдән киске сәғәт 4-тән алып баҡсаға, дачаға йәки ҡаланан ситтә булған шәхси йорттарға барыу ҙа рөхсәт ителә. Әммә шәхси транспортта хәрәкәт итеү тәүлегенә 90 минуттан, ә баҡсаға йәки дачаға барғанда ике яҡҡа киткән юл ваҡыты 1 сәғәттән артмаҫҡа тейеш. Ғаиләнән бер кеше теркәлеү үтһә, пассажир итеп башҡа ғаилә ағзаларын да алырға мөмкин, әммә уларҙың үҙҙәре менән шәхес таныҡлығы булырға тейеш. Ҡайҙалыр юлланғанда инструкция буйынса теркәү үтеп, уны наҡлағандан һуң барлыҡҡа килгән мәғлүмәтте юлда туҡтатҡан осраҡта ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренә күрһәтергә кәрәк буласаҡ. Бының өсөн https://doroga02.ru/ сервисының Баш битендәге "Поездки" тигән бүлегенә күсергә, артабан "Список поездок" пунктына баҫырға һәм үҙегеҙҙең маршрутығыҙҙы табып, уны инспекторға күрһәтергә генә кәрәк.

БАЛАЛЫЛАРҒА...

Рәсәй Президенты Владимир Путин алдағы өс айҙа, апрелдән башлап, әсәлек капиталына хоҡуҡлы бөтә ғаиләләрҙәге өс йәшкә тиклемге һәр балаға ай һайын 5 мең һум өҫтәп түләргә тәҡдим итте.

"Балалы ғаиләләргә булышлыҡ итергә кәрәк, - тип белдерҙе Путин рәсәйҙәргә мөрәжәғәтендә. - Бындай ярҙам әлеге ваҡытта балаһы яслегә йәки баҡсаға йөрөмәгән ғаиләләр, сирләгән йәки бала тәрбиәләү буйынса отпускыла булған ата-әсәләр өсөн бик мөһим".

2020 йылда әсәлек капиталы түбәндәгесә буласаҡ:

- 2020 йылдың 1 ғинуарынан беренсе бала тыуған (уллыҡҡа алынған) осраҡта 466 617 һум;
- 2019 йылдың 31 декабренә тиклем икенсе йәки артабанғы бала тыуғанда (уллыҡҡа алынғанда) 466 617 һум;
- әгәр беренсе бала 2019 йылдың 31 декабренә хәтлем тыуған икән, 2020 йылдың 1 ғинуарынан икенсе бала донъяға килгәндә (уллыҡҡа алынғанда) 616 617 һум;
- әгәр быға тиклем әсәлек капиталына хоҡуҡ булмаһа, йәғни тәүге ике бала 2007 йылдың 1 ғинуарына тиклем тыуһа, 2020 йылдың 1 ғинуарынан һуң донъяға килгән өсөнсө йәки артабанғы балаға 616 617 һум.

Әйткәндәй, Әсәлек капиталына сертификат тапшырыу Рәсәйҙә автоматик рәүештә күрһәтелгән тәүге социаль дәүләт хеҙмәтен тәшкил итәсәк. Саралар 15 апрелдә көсөнә инә. Пенсия фонды бала тыуғандан һуң кәрәкле мәғлүмәттәрҙе бала һәм уның ата-әсәһе тураһында барлыҡ мәғлүмәттәр тупланған Берҙәм гражданлыҡ хәле актларын теркәү реестрынан алырға тейеш. Унда сертификат биреүгә ҡаршылыҡ тыуҙырған сикләүҙәр тураһында мәғлүмәт тикшерелә. Әгәр бындай сикләүҙәр асыҡланмаһа, документ теркәлә, ә уның хаҡында мәғлүмәт сертификат хужаһына ебәрелә. Сертификат тапшырыу тураһында белдереү ҙә әсәнең дәүләт хеҙмәттәре порталында теркәлгән шәхси кабинетына һәм порталда күрһәтелгән номерына ебәрелә. Әгәр дәүләт хеҙмәттәре порталында теркәү йәки берҙәм реестрҙа бала тураһында мәғлүмәттәр булмаһа, ғаризаны Рәсәйҙең Пенсия фонды бүлексәләрендә һәм күп функциялы үҙәктә бирергә мөмкин. Бындай осраҡтарҙа Әсәлек капиталы сертификатын алыу ваҡыты 15-тән 5 эш көнөнә тиклем ҡыҫҡартыла, ә уның әҙер булыуы тураһында Пенсия фондының берҙәм бәйләнеш үҙәге хеҙмәткәрҙәре хәбәр итә.

ТӘБИҒИ МИРАҪТЫ ҺАҠЛАЙЫҠ!

Экологик хәүефһеҙлек, Башҡортостан кеүек төрлө тәбиғәт үҙенсәлектәренә бай төбәктә тәбиғәт ресурстарын рациональ файҙаланыу өлкәһендәге дәүләт сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һәр яҡлы анализ һәм уйланылған ҡараш талап итеүен аңлап, экология, тәбиғи күп төрлөлөктө һаҡлау мәсьәләләренең битараф булмаған граждандарҙы һәм ғалимдарҙы борсоуын иҫәпкә алып, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағында экологик хәүефһеҙлек мәсьәләләре һәм тәбиғи мираҫты һаҡлау буйынса эш төркөмө ойошторолдо.

Эш төркөмөндә Марс Сәфәров, Азат Ҡотлөхмәтов, Лариса Абрамова, Лариса Белан, Рәсих Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Руфина Шаһапова һәм Башҡортостан буйынса Бөтә Рәсәй халыҡ фронты төбәк штабы ағзаһы Мурад Шафиҡов кеүек билдәле шәхестәр бар. Етәксеһе - биология фәндәре докторы, Көньяҡ Урал төбәгендәге үҫемлектәр донъяһын, уның классификацияһын өйрәнеү, үҫешен асыҡлау, биологик күп төрлөлөктө һаҡлау өлкәһендәге алдынғы белгес Василий Мартыненко.

- Төркөм эшмәкәрлеге, нигеҙҙә, ике мөһим бурысты маҡсатлы хәл итеүгә йүнәлтеләсәк. Беренсенән, ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуғанда тиҙ арала ҡарар ҡабул итеү. Икенсенән, төрлө объекттар буйынса теге йәки был ҡарар ҡабул итеүҙең эҙемтәләрен һәм хәүефен ентекле өйрәнеү, шулай уҡ тирә-яҡ мөхиткә һәм халыҡҡа кире йоғонтоһон кәметеү буйынса саралар планы эшләү. Быға миҫал итеп Сибайҙағы хәл-торошто, Ҡуштауҙы эшкәртеү мәсьәләһен, солоҡ ҡортсолоғон һәм Шүлгәнташтағы палеолит осорондағы һүрәттәрҙе һаҡлауҙы һ.б. килтерергә мөмкин. Шулай уҡ эш төркөмө бурыстарының береһе - киң мәғлүмәт саралары аша халыҡҡа экологик хәүефһеҙлек һәм тәбиғи мираҫты һаҡлау буйынса асыҡ, профессиональ һәм дөрөҫ мәғлүмәт еткереү, - тип билдәләне В. Мартыненко.

Эш төркөмө ағзалары республикала экологик хәүефһеҙлек буйынса алып барылған дәүләт сәйәсәтен анализлау менән шөғөлләнәсәк, теге йәки был процестарҙы оптималләштереү, шул иҫәптән ер аҫты байлыҡтарын өйрәнеү һәм территорияларҙы үҫтереү буйынса тәҡдимдәр индерәсәк.

- Минеңсә, был төркөм экология һәм тәбиғи мираҫты һаҡлау мәсьәләләре буйынса рациональ ҡарарҙар эшләү, республика халҡы менән бәйләнештә булыу һәм улар күҙгә-күҙ осрашҡан экологик проблемаларҙы власть даирәләренә еткереү өсөн файҙалы. Төркөмгә төрлө йүнәлештәге ғалимдарҙы индереү ҙә ыңғай күренеш. Был экология һәм тәбиғи мираҫты һаҡлау проблемаларын төрлө яҡлап анализлау мөмкинлеге бирәсәк. Эш төркөмөнә Ҡуштауҙы эшкәртеүгә ҡаршы фекер белдергән ғалимдарҙың индерелеүе лә иғтибарға лайыҡ. Был республика етәксеһенең альтернатив ҡараштарҙы ла иҫәпкә алырға теләүе хаҡында һөйләй, тип уйлайым, - ти эш төркөмө ағзаһы, геология-минералогия фәндәре кандидаты Исхаҡ Фәрхетдинов.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә көн дә 40 процент подъездарҙы һәм 60 процент лифттарҙы дезенфекциялайҙар. Уға тиклем барлыҡ балалар майҙансыҡтары эшкәртелгәйне, хәҙер улар ябылды. Торлаҡ йорттарҙа йәшәүселәр идара итеүсе компаниянан подъездарҙы эшкәртеү графигын һорай ала.

✓Өфө хакимиәте Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре идаралығына Орджоникидзе районының Яңы Александровка ҡасабаһында Париж Коммунаһы урамынан көньяҡтараҡ урынлашҡан 17,8 гектарҙан ашыу ерҙе крематорий өсөн файҙаланырға рөхсәт бирҙе. Өфөлә бер нисә йыл инде крематорий төҙөү мәсьәләһе тикшерелә. Ҡала зыраттарында урындар юҡ, хәҙер Төньяҡ зыратҡа ғына ерләйҙәр.

✓Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә ҡарағанда Башҡортостанда ҡарабойҙай ныҡыраҡ, 13,8 процентҡа ҡиммәтләнгән. Алтай крайында ла шундай уҡ хәл. Бынан тыш, илдең барлыҡ субъекттарында ла шәкәр ҡиммәтләнгән. Шулай уҡ тауыҡ ите, он һәм макарон, ыйыр ите, сусҡа ите, балыҡ, консервалар, тоҙ, борсаҡ, фасоль һәм һоло ярмаһы ҡыйбатланған. Миҙгелгә бәйле помидорға, кишергә, һарымһаҡҡа, лимонға хаҡтар күтәрелгән. Ҡыяр һәм әфлисундар арзанайған.

✓Рәсәйҙәргә 2020 йылдың 9 майында "Үлемһеҙ полк" акцияһын өйҙән үткәрергә тәҡдим иттеләр. Бының өсөн социаль селтәрҙә #Үлемһеҙполкөйҙә һәм #минеңполкымөйҙә хәштегтары менән атай-олатайҙар, әсәй-өләсәйҙәр тарихы тураһында яҙырға мөмкин.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә билдәләүҙәренсә, февралдә граждандарҙың торлаҡ-коммуналь түләүҙәр буйынса бурыстары 2,5 миллиард һумға еткән. Шул сәбәпле Өфөнөң идара итеүсе компаниялары хеҙмәткәрҙәре волонтерҙар менән бергә торлаҡ-коммуналь түләүҙәрен интернет аша ситтән тороп түләй алмаусыларҙың өйҙәренә үҙҙәре килә алыуы тураһында хәбәр итә.

✓Республикалағы 1 марттан эшһеҙ тип танылған граждандар эшһеҙлек буйынса иң юғары кимәлдәге пособие (13 мең 949 һум) аласаҡ. Бынан тыш, эшһеҙҙең ғаиләһендәге балиғ булмаған балаларҙың һәр береһенә 3-әр мең һум өҫтәп түләнәсәк.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ *Бөгөн Өфөлә 23 предприятиеның эше туҡтатылһа, 69 эре һәм урта предприятие эшмәкәрлеген дауам итә. Тотош Башҡортостанда бындай пердприятиелар исемлеген тағы ла 974 берәмеккә арттырырға ҡарар ителде.*

КӨНАУАЗ

Был аҙнала мәктәп уҡыусылары ситтән тороп белем ала башланы. Уның нисек ойошторолоуы һәм ниндәй проблемалар килеп тыуыуы хаҡында ҡала хакимиәтендә видеоконференция бәйләнешендә үткән оператив кәңәшмәлә Өфөнөң Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова сығыш яһаны.

СИТТӘН ТОРОП УҠЫЙБЫҘ



Мәктәптәрҙә белем биреү процесын сифатлы алып барыу өсөн барлыҡ техник шарттар булдырылған. 7 апрелгә ҡарата уҡыусыларҙың 99 проценты дистанцион белем алырға техник яҡтан әҙер була. Видеодәрестәр Skype, YouTube, Zoom платформалары буйынса алып барыла, шулай уҡ "Якласс", "Учи.ру", "Виртуальная школа Сбербанка" платформалары аша автоматлаштырылған "Мәғариф" мәғлүмәт системаһындағы электрон журнал аша эштәр бирелә. "Российская электронная школа", "Яндекс.Учебник" цифрлы ресурстарҙа һәр тема буйынса теоретик, күнекмә, өйгә эш, тикшереү материалдары бар. Платформалар уҡытыусыға электрон кейстар ҡулланыу мөмкинлеге бирә. Улар уҡыусының электрон почтаһына һалына һәм яуаптарҙы уҡыусы уҡытыусының почтаһына ебәрә йәки электрон журналға беркетә. Дәрескә йөрөү һәм баһалау журналда билдәләнеп бара. Бер процент уҡыусының (1280 бала) онлайн уҡыу мөмкинлеге юҡ. Тап улар өсөн электрон кейстар ҡулланыу урынлы, сөнки эштәр ата-әсәнең телефонына йәки ватсаптағы төркөмгә ебәрелә

Әлбиттә, ситтән тороп белем алыу өсөн ҡорамалдарҙың төҙөк булыуы һәм өйҙә балаларға уңайлы шарттар тыуҙырыу, уларҙың ял һәм уҡыу режимын күҙәтеү мөһим. Бында, әлбиттә, ата-әсәләргә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә.

Ә ата-әсәләр үҙҙәре был хаҡта нимә уйлай икән?

Ләлә БӘШИРОВА, Өфө ҡалаһы: Ҡыҙым 5-се синыфта уҡый. Дистанцион белем алыуҙың беренсе көнөндә генә дәрестәр онлайн рәүешендә үтте, хәҙер электрон кейстар аша уҡыйбыҙ. Бында инде күберәген баланың үҙенә уҡырға йәки үҙемә уҡытыусы булырға тура килә. Онлайн дәрестәр булһа, яҡшыраҡ булыр ине тип уйлайым, сөнки унда бит һәр предмет буйынса махсус белемле уҡытыусы үҙе, методика буйынса аңлата. Ә ата-әсәләр - үҙе нисек аңлай, шулай аңлатырға тырыша. Онлайн дәрестәрҙең булмауы, моғайын да, провайдерҙың бындай көсөргәнеште күтәрә алмауындалыр, тип уйлайым.

Айгөл РӘШИТОВА, Өфө ҡалаһы, 4 уҡыусы әсәһе: Мин хәҙер әсәй генә түгел, уҡытыусы ла. Хатта әсәйемә аҙыҡ-түлек алып барырға ла ваҡытым юҡ. Әле мин беренсе синыфта уҡыусы балам менән генә шөғөлләнәм, ололары үҙаллы уҡый. Шулай ҙа беренсе синыфтағы баланы дистанцион уҡытыу - ул 8 сәғәтлек кенә эш түгел. Ярай әле уҡыуҙы телевизор аша күрһәтеүҙе ойошторҙолар, был бик уңайлы, дәрестәр асылмаҫ, тауыш юғалыр тип ҡурҡаһы түгел. Балалар дәрестә ата-әсәйҙең ярҙамынан тыш та ҡарай ала.

Шулай ҙа видеодәрестәрҙең сифатына, уларҙы эҙмә-эҙлекле һәм методик йәһәттән ойошҡан, балаларға - стресты, ә уҡытыусыларға һәм Мәғариф министрлығына дәғүәләрҙе кәметергә ярҙам иткән бер нисә фекерем менән бүлешергә теләйем. Беренсенән, һәр дәрес алдынан уны нисек башҡарыу тураһында аңлатып үтеү кәрәк. Уҡыусы уны тыңларға, яҙып алырға, шунда уҡ үтәргә йәки дәрестә тулыһынса тыңлап бөткәс эшләргә тейешме? Юҡһа, уҡыусы эште эшләй башлай, әммә бының өсөн ваҡыт бирелмәй, икенсе эш ҡушыла. Уҡыусы беренсе эште эшләп бөтмәгән, ә уҡытыусы өсөнсө эшкә күсә. Уҡыусы артабан инде дәрестә тыңламай башлай. Икенсенән, уҡытыусы таҡтанан күрһәтеп һөйләгәндә оператор уны түгел, таҡтаны ҙур планда төшөрһөн ине. Өсөнсөнән, дәрес һуңында уны ҡайҙа ҡабатлап ҡарап була, социаль селтәрҙәрҙәме, икәне тураһында мәғлүмәт булһын ине. Дистанцион белем биреүҙең икенсе көнө, минеңсә, яҡшыраҡ үтте. Әммә уҡытыусы өҫтәмә дәрестәр ебәрә, уларҙы яҙҙырғансы, ҡарап сыҡҡансы тағы әллә күпме ваҡыт китә.

Шәүрә ҒӘББӘСОВА, Өфө районы Шамонино ауылы: Әлеге ваҡытта өйҙә 3 уҡыусы. Нисек бөтәһенә лә аппаратура еткерергә тип аптырап ултыра торғас, Рәмил менән икебеҙ ҙә "удаленка"ға күстек! Эштән компьютерҙарҙы алып ҡайтып, балалар менән бүлештек. Иртәнсәк улар уҡый, уларҙан һуң беҙ, атай-әсәйҙәр, эшләй башлайбыҙ. Шулайтып, бер улыма ғына кеҙә телефоны алып бирергә тура килде. Балалар үҙҙәре уҡый. Ҡайһы бер фәндән өйгә эште генә бергә эшләйбеҙ. Уҡыусылар "дәрестә булғанда" башҡалар аш бүлмәһенә күсә. Мин бында тәрбиәсе ролен үҙ өҫтөмә алам: телевизор ҡарайбыҙ йәки китап уҡыйбыҙ, һүрәт төшөрәбеҙ. Үҙизоляцияға күскәс, алай ҙа ауылда йәшәйбеҙ, тип ҡыуанабыҙ. Беҙҙең актив балалар менән фатирҙа йонсор инек, ә былай үҙебеҙҙең ишек алдында уйнайҙар. Дүрт бала менән бешеренеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойошторов, әҙерәк энергияларын тыйып алдым. Башҡорт милли кухняһы тәмлекәстәрен үҙҙәре эшләп, үҙҙәре тамаҡ туйҙыра алалар. Һалмаһын, икмәген, бауырһағын, ҡыҙыл эремсеген дә эшләп, бешереп өйрәнделәр.

Земфира ХӘБИРОВА.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

ТОРМОШ ДАУАМ ИТӘ!

Ҡала хакимиәтендә видеоконференция бәйләнеше форматында үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау менән бер рәттән, башҡа мәсьәләләр ҙә ҡаралды.

Бөгөн ҡалала яңы вирус инфекцияһы менән сирләүгә юл ҡуймау маҡсатында 193 мобиль төркөм булдырылған, сит илдәрҙән ҡайтҡан 6384 граждан тикшерелгән, эш графигына сикләү индерелгән 972 предприятие һәм ойошма етәкселеге менән әңгәмә үткәрелгән һәм улар иҫкәртелгән.

Ҡаланың йәмәғәт урындарын, балалар, спорт майҙансыҡтарын һ.б. тикшереү өсөн 289 патруль төркөмө ойошторолған. Ҡурсаланыу мөҙҙәте индерелгәндән алып 7742 граждан менән әңгәмә үткәрелгән, шул иҫәптән уларҙың 3113-ө - оло йәштәгеләр.

Хроник сирҙәре булған 65 йәштән олораҡтарға ярҙам күрһәтеү маҡсатында ирекмәндәр төркөмдәре ойошторолған. 31 марттан алып уларға 363 мөрәжәғәт килгән һәм ярҙам күрһәтелгән, әле лә дауам итә.

Шул уҡ ваҡытта баш ҡалала иҡтисадтың эшен ваҡытлыса ла туҡтатып тороу мөмкин булмаған тармаҡтары бар. Бөгөн Өфөлә 23 предприятиеның эше туҡтатылһа, 69 эре һәм урта предприятие эшмәкәрлеген дауам итә. Мәғлүм булыуынса, тотош Башҡортостанда бындай пердприятиелар исемлеген тағы ла 974 берәмеккә, шул иҫәптән яҙғы сәсеү мәлен күҙ уңында тотоп, ауыл хужалығы предприятиелары өлкәһендә эшләүсе ойошмаларҙы ла индереп, арттырырға ҡарар ителде. Әммә был, һаҡланыу сараларын үтәмәҫкә лә була, тигәнде аңлатмай - талаптарға күҙ йомолған осраҡта, бындай ойошма-предприятиеларҙың эшмәкәрлеге туҡтатыласаҡ.

Шул уҡ ваҡытта предприятиеларға дәүләт ярҙамы ҡарала: кәсе һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары тейешле шарттарҙы үтәгән осраҡта 2020 йылға ер һалымын аванслата түләүҙән азат ителә; һалымдар буйынса ла коррекциялаусы коэффициент күләмен түбәнәйтеү планлаштырыла; муниципаль милекте ҡуртымға алыусылар өсөн вирус таралыуы осоронда ҡуртым түләүҙәренән азат итеү күҙаллана.

Нисек кенә булмаһын, властар халыҡҡа уңайлылыҡ тыуҙырырға тырыша. Күптәрҙең баҡсалары булыуын иҫәпкә алып, республика етәкселеге 10 апрелдән билдәле шарттарҙы үтәгәндә унда барырға рөхсәт бирһә, ҡаланың "Йылға аша сығыу хеҙмәте" МБУ-һының баҡсасыларҙы ташыуға әҙерлеге лә ҡаралды.

Шулай уҡ ҡала хакимиәте юлдарҙы ремонтлау буйынса эштәрҙе лә туҡтатмай. Өфө райондарын төҙөкләндереү буйынса муниципаль бюджет ойошмалары көсө менән тәүлек әйләнәһенә юлдарҙағы соҡорҙар ямала.

Шулай уҡ "Дорога 02" мобиль ҡушымтаһы буйынса Өфөнөң урам-юл селтәрен цифрлаштырыу эше лә алып барыла.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Иммунитетты хәстәрләп

❖ Тибет рецебына ярашлы ләмдән яҡшылап таҙартып йыуылған һыутәңкәне (ряска) киптерәләр, онтаҡҡа әйләндерәләр һәм балға бутап ҡамыр эшләйҙәр. Ҙур ғына борсаҡ бөртөгөләй итеп әүәләп, киптереп алырға. Көнөнә 2 тапҡыр 1-2 борсаҡ дауаны ашарға.

❖ 2 грамм мумиёны 10 ҡалаҡ ҡайнатып алынған йылы һыуға иҙеп, 10 көн дауамында иртәнсәк ас ҡарынға эсергә. 5 көн дауаланыуҙы туҡтатып торорға, әммә уның урынына йоҡлар алдынан шыйыҡ бал ашарға. Хәл яҡшырғансы ошолай дауаланыуҙы дауам итергә.

❖ 250 грамм һуғанды ваҡлап турап, 250 грамм шәкәр һәм ярты литр һыу ҡушып, талғын утта һуған бешкәнсе ҡайнатырға. Иләктән үткәреп, 2 ҡалаҡ бал ҡушырға. Килеп сыҡҡан ҡатышманы көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда берешәр ҡалаҡ ҡабул итергә.

Һуғандан тағы ла икенсе төрлө дауа әҙерләргә була. Уның өсөн 3-4 баш һуғанды (250 грамм) ваҡлап турап, 200 мл бал ҡушып болғарға һәм ашау ваҡытына ҡармайынса көнөнә 3-5 тапҡыр берешәр ҡалаҡ ашарға.

❖ Сөгөлдөр һәм ҡарағат һуттарын 3:1 нисбәтендә ҡушып, ике аҙна дауамында ашарҙан 15 минут алда ярты стакан эсергә. Һөҙөмтәһе яҡшы.

❖ Ҡарағай ылыҫы, гөлйемеш, һуған ҡабығы ярҙамында иммунитетты нығытыу һөҙөмтәле һәм бигерәк тә химиотерапия үткәндән һуң ярҙам итә. 5 ҡалаҡ ҡарағай ылыҫы, 3 ҡалаҡ ваҡланған гөлйемеш емештәре, бер семтем һуған ҡабығы, ҙур булмаған татлы тамыр (солодка) өлөшөн төнгөлөккә термосҡа һалып, 700 мл һыу ҡойоп ултыртырға. Көнөнә 1,5 литр төнәтмә эсергә, дауаланыуҙы 4 ай дауам итергә.

❖ Лимон, мандарин һәм апельсин ҡабыҡтарын киптереп, ҡәһүә тартҡыста онтап, сәйгә бер балғалаҡ ҡушып эсеү ҙә иммунитетты нығытыу өсөн файҙалы.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

✓ *Ололарға ҡала фатирында ауырыраҡ бирелә үҙизоляция. Ҡараған, тыңлаған нәмәләре - телевизор. Һуңғыһы иһә шунса үлем, шундай ҙур бинаны морг өсөн биргәндәр, фәлән-фәсмәтән тип тылҡыуҙан башҡаны артыҡ күрһәтмәй.*

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Башҡортостан Республикаһының Милли музейында һаҡланған XX быуаттың икенсе яртыһында тегелгән аҡ сәкмән ҡаралы-ҡыҙыллы киҫ ҡаймаһы буйлатып бер ҡат ҡыҙыл кәзәмәгөҙ менән ҡайылған һәм төрлө төҫтәге ептәр менән салғый остарына хисаплы ҡайыу ярҙамында арҡыры нағыш һалынған. Дүртмөйөштәрҙән торған ваҡ ҡына биҙәк сатраш оя биҙәккә берләшкән, сәйләп ҡушып сигеүҙе хәтерләтә.

Хисаплы шыма нағыш һәм биҙәкләү йөйҙәре менән ҡайылған ирҙәр сәкмәне. БР ММ. Т.К. Сурина фотоһы.

Белорет һәм Әбйәлил райондарында һатып алынған йоҡа йәшел йәки ҡыҙыл буҫтауҙан тегелгән сәкмәндәр кейгәндәр. Уларҙы шулай уҡ ҡайылған йәки аппликация биҙәктәре менән семәрләгәндәр, уҡа һәм көмөш тәңкә, орнамент һуғылған көмбәҙҙәр аралаштырып теккәндәр.

XX быуатта ҡатын-ҡыҙҙарҙың байрам кейемдәре араһында бай биҙәкле өҫ кейемдәре урынын яйлап еңһеҙ камзулдар яулай башлай. Камзулдарҙы нағышлағанда ла ҡәҙимге биҙәү әйберҙәре ҡулланылған: уҡа, металл һәм сәйләп һыҙаттары, мәрүәт төймәләр, декоратив йөй, тамбур һәм ҡуш элмә техникаһында башҡарылған ҡусҡар биҙәктәр ҡайыу. 1909 йылда Әбйәлил районы Тупаҡ ауылында Д. Месарош тарафынан һатып алынған ошондай камзул Венгр этнография музейында һаҡлана (кол. 83371). XX быуат уртаһы камзулдарынан айырмалы рәүештә, унда металл аҙ ҡулланылған: итәгенең сите буйлап үткән нәҙек уҡа өҫтөндә өсөшәр ваҡ тәңкәләр баҫылған, өс айырым ҙур тәңкә ҡабырғаларындағы арҡыры йөй буйына тегелгән. Ҡултыҡ аҫтындағы ялғау нигеҙенә сигелгән кәзәмәгөҙҙәр һәм ярым айға оҡшатып уйып яһалған кеҫәһе буйлатып үткәрелгән төҫлө кәкерсәк йөй был камзулдың төп биҙәге булып тора.



Нағышлы камзул. ВЭМ. XX быуат башы.

Светлана ШИТОВА.
"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.

ӘЙТӘГҮР!

Миҙал ике яҡлы булған кеүек, һәр нәмәнең ыңғай һәм кире яҡтары була. Барыбыҙҙы ла өйҙәргә ҡыуалап индергән коронавирус тигән зәхмәт тә ниндәйҙер кимәлдә тәрбиәүи роль уйнайҙыр, моғайын, сөнки ошо ваҡытта кеше бер аҙ тәртипкә ултыра, нәфсеһен бер аҙ тыйып тора һәм иң мөһиме - ҡиммәттәре, ҡибләһы үҙгәрә. Ә бына гәзит уҡыусылар ниндәй фекерҙә икән, тип, уларға: "Үҙизоляция осоронда ваҡытты нисек үткәрәһегеҙ, нимәләр менән шөғөлләнәһегеҙ?" - тигән һорау менән мөрәжәғәт итеп, түбәндәге яуаптар алдыҡ.

КЕШЕЛЕК, БӘЛКИ, АҢЫНА КИЛЕР...

Гөлсәсәк МОСТАЕВА, Өфө ҡалаһы: Етмеште уҙған олатай, офисты өйгә алыштырырға мәжбүр хеҙмәткәр ирем, ике бәләкәй бала һәм мин ҡала фатирында, дүрт стена ҡосағында ҡалдыҡ. Тәүге көндәрҙә ҡаушата, һағайта ине был тыйыу, тора-бара ҡулайлашып алдыҡ беҙ уға. Исмаһам, балалар көн оҙоно атай янындалар, йәғни эштән ҡайтып, ашап, ауып киткән атайҙарын икенсе сүрәттә лә күрҙеләр. Иртән уяныу менән ҡыҙыбыҙҙың тәүге һорауы: "Атай эшкә киттеме?". "Юҡ, өйҙә", тигәс, китә ауыҙҙары йырылып. Икенсе бүлмәлә эшләп ултырған аталары янына тыптырлашып килеп сыҡҡан булалар. Атай кеше яндарында булыуы ғына ла байтаҡ күтәрә күңелдәрен. Үҙе бер тамаша! Атай кеше уйната ла, мин аш әҙерләгәндә әүрәтә лә, йорт эсендәге бөтмәҫ ваҡ эштәрҙең дә күпме ваҡыт алғанын үҙ күҙҙәре менән күрә. Шәп бит! Миңә, әсәй кешегә лә ҡулай булды бер уйлаһаң. Яуаплылыҡ тойғоһо кәмей бирҙе, тип әйтәйемме, ирем өйҙә булғас, бар яҡлап та тынысбыҙ, иркәләнкерәй төштөк. Саф һауа һуларға балаларҙы лоджияға алып сығабыҙ. Улар уйнағансы эргәләрендә тик ултырып булмай бит, шул тирәлә үҙенән-үҙе тәртип барлана, ҡулланылмаған әйберҙәр ташлана. Былай булһа, яҙғы ҡояш саҡырыу менән тышҡа атлығыр инек, ә үҙизоляция үҙенекен итте - лоджияла тиҙ генә тәртип булдырылды. Ул ғына түгел, башҡа шулай уҡ ҡул теймәгән мөйөш-шкафтар ипкә килтерелде. Уның ҡарауы, беҙҙе уратып алған тышҡы донъяны ғына түгел, эске уй-кисерештәр илен дә ҡаҡҡылап-һуҡҡылап таҙартып алырға форсат бирҙе был тыйыу. Нәфсебеҙҙе йүгәнләргә, йондоҙ күҙләмәй, аяҡ аҫтында тулып ятҡан һый-хөрмәтте ҡәҙерләргә, саф һауаның ҡәҙерен белергә мәжбүр ителдек.

Балалар менән нимә уйнарға, тип баш ватыусыларҙан түгел беҙ. Үҙизоляция мәлендә лә уртаҡ кәсептәребеҙ үҙгәрешһеҙ ҡалды, тиһәм дә була. Эргәләрендә бәйләпме-тегепме ултырһаң, ҡҙҙәре бынамын итеп уйнай балаларыбыҙ. Тәҙрәнән ҡарап, "тыңлауһыҙ" кешеләрҙе ҡарап-һанап тороу уйыны килеп сыҡты. Беҙгә, йәш быуынға, аптырайһы түгел, интернет бар, мәғлүмәтһеҙ күңелһеҙләнеп ултырмайбыҙ. Арабашлашыу ҙа, белем туплау ҙа өҙлөкһөҙ бара. Бына ололарға ҡала фатирында ауырыраҡ бирелә үҙизоляция. Ҡараған, тыңлаған нәмәләре - телевизор. Һуңғыһы иһә шунса үлем, шундай ҙур бинаны морг өсөн биргәндәр, фәлән-фәсмәтән тип тылҡыуҙан башҡаны артыҡ күрһәтмәй. Ҡыҙғаныс. Йәштәр мәғлүмәтте һайлап уҡый алһа, ҡарттар мейеһенә башҡасараҡ формаһы һалына.

Гөлсәриә ӘБИЛЕВА, Сибай ҡалаһы: Шөкөр. Иң шәп мәл. Ғаилә өйҙә булғас, аш бүлмәһе күп ваҡытты ала. О, оҫта ашнаҡсымын икән, тип уны-быны төрләйем. Ниһайәт, ҡомалаҡтан әсетке яһап, икмәк бешереүгә тотондом. Сәк-сәккә оҫтарып барам. Ә бына рецепт буйынса ярты көн буйы бешерелгән былау ысын былау булды. Өйҙәгеләрҙән маҡталдым. Аптыратам яҡындарымды. Ҡоролтайҙар онлайн әңгәмә ойошторов ебәрҙе, шуларҙы тыңлайым. Һәм иң мөһиме - намаҙҙарымды мәлендә, оло ҡыуаныс менән яйлап уҡыйым. Ғәрәп яҙыуы буйынса алған һабаҡтарымды нығытам: көн һайын Ҡөрьән-Кәрим китабына баҡам. Уҡыйым да тауышлы ҡәләм артынан дөрөҫләп үҙемде тикшерәм. Һуңғы мәлдәрҙә көн менән төн шәп үткәнен нығ һиҙә башлағайным. Кешеләр ҙә баш баҫып саба ла саба кеүек ине. Тәбиғәт тә, нимә эшләргә белмәй, аптырап, үҙебеҙ кеүек яҡлау таба алмаҫын аңлағандай бағынғайны кеүек. Шаңҡыу кәрәк ине шул. Бәлки, аңына килер кешелек.

Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ, Иглин районы Аҡбирҙе ауылы: Егерме йылдан ашыу ҡулға ҡылҡәләм тотоп, һүрәт төшөрөргә ваҡыт тапҡан юҡ ине, әле ҡабаттан тотондом ошо шөғөлөмә. Үҙемә лә оҡшап ҡалды. Ауылда йәшәгәс, яйлап яҙғы баҡса эштәренә әҙерләнәбеҙ - теплицала түтәлдәрҙе икенсе төрлө итеп үҙгәрттек. "Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит", тигәндәй, быйыл йәшелсәләрҙе мотлаҡ сәсер кәрәк инде. Улыма баҡсалағы муйыл ағасынан ян менән уҡ эшләп бирҙем. Көн дә сәпкә атыу буйынса оҫталығыбыҙҙы камиллаштырабыҙ. Бәлки, донъя былай барһа, урманға һунарға ла йөрөргә тура килер, кем белә. Тағы: балаҫ һуға торған станок алдыҡ, шуны ҡороп, өйрәнергә торабыҙ.

Зөлфиә САФИУЛЛИНА, Октябрьский ҡалаһы: Мин 3 бала әсәһе (ике улым янымда, береһе эшләп йөрөй, бәләкәсе 11-се класта уҡый, студент ҡыҙым ситтә), уҡытыусы, класс етәксеһе. Уҡытыусы өсөн ниндәй генә замандар булһа ла, эш өҫтөнлөк итә инде ул. Ҡурсаланыу осоронда уҡытыусының эше, минеңсә, артты ғына. Коронавирус барыһын да өйгә ҡайтарҙы, бикләп ҡуйҙы. Дистанцион уҡытыуға әҙерләнгәс, көн дә вебинар тыңланым, талаптар күп һәм ҙур. Ата-әсәләр, уҡыусыларым менән аңлатыу эше алып барҙым һәм барам. Тыныс ҡына ултырып уйланырға ла форсат юҡ, дөрөҫөн генә әйткәндә. Ватсапта ҡала башҡорттары төркөмө булдырҙым. Мөһим әйберҙәрҙе һалырға, уртаҡлашырға маҡсат. Мин әсәй булараҡ та, уҡытыусы булараҡ та, балама дистанцион уҡытыуҙы теләмәйем. Кире яҡтары бик күп. Әммә ҡалайтаһың, ошо осорҙо имен генә үткәреп ебәрергә кәрәк инде...

Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

ДОҒА ҠЫЛЫР ИНЕМ...

Был карантиндары бер яҡтан арыу әле ул, магазинға йөрөргә ярамағас, баҡса ла янда оҙағыраҡ йәшәй. Хан заманынан бирле бешереп тә ҡарамаған рецептарҙы соҡоп сығарып, төрлө ризыҡтар бешерә башланым. Сәйгә тәмлекәс бөтөп киткән, тинем дә, яңы эшләгән эремсегем дә булғас, апаруҡтан бирле бешермәгән бер печеньены әтмәләргә булып киттем. Көнөнә бер тапҡыр ҡамырға теймәгән ҡул ҡатын-ҡыҙ ҡулы була тиме! Шулай итеп, ҡыҙымдың дәрестәре тамамланмаҫ борон бешереп тә алдым. Тәмле еҫенә түҙмәй, тәнәфестә аш бүлмәһенә килеп инеп, шыпырт ҡына тәрилкәгә һалып алып китте инде.

"Ҡалай йәтешме, ҡыҙым, мәктәбең өйҙә булғас?" - тип һүҙ ҡушам. "Башҡаса магазиндан печенье алма, йәме", - тине Динәм. Күңелем булды. Был тәмлекәс өйҙәгеләргә бик оҡшағас, был рецепты һеҙҙең менән дә бүлешәйем әле: 300 грамм эремсек, 3 йомортҡа, 1 стакан шәкәр ҡомо, 1/2 балғалаҡ сода, 1/2 балғалаҡ тоҙ, 150 грамм маргарин, 2 ҡалаҡ ауыл ҡаймағы кәрәк. Ошо ҡатышмаға өс стакан ярым оном китте.

...Көн дә тирә-йүнде күҙәтеп, туғай ситтәрен, йылға буйын ҡыҙыра инек. Ә бөгөн урамда көнө буйы ҡурҡыныс ел, ағастар ана ауам, бына һынам тип сайҡала. Йә ямғырлап, йә ҡарлап боларып тора көн. Ярай, быныһы ғына бүстәк, донъялары болармаһын, көн яманы үтер ул, бынау сирҙәре тиҙерәк тамамланһын ине. Ерем ҡалын ҡарҙарҙан әрселеп бөтөүгә бөтөн халыҡ еңел тын алып, ҡәҙимгесә йәшәп китһен ине. Әүлиә тауына менеп, бөтөн ыбыр-сыбыр балаларымды йыйып, хәйерҙәр һалып, доғалар уҡып төшөр инек, тип нәҙер әйтеп ҡуйғанмын! Алла биргә, имен-аман ғына шул теләктәребеҙ тормошҡа ашһын инде.

Айгөл МИҢЛЕБАЕВА.
Күгәрсен районы.

✓ *Кешеләре башлыса оҙон буйлы, ерән сәсле, алһыу йөҙлө һәм зәңгәр күҙле. Ҡара сәс яҡшы сифат тип һаналмай, ә ҡоңғорт күҙлеләр Ли Лин вариҫтары тип һанала. Ир-ат ҡолаҡтарына алҡа тағып йөрөй. Улар ғорурҙар һәм бирешмәҫтәр.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

ЫРЫУЫБЫҘ ҠЫРҒЫҘ, ҮҘЕБЕҘ - БАШҠОРТ

Ғалим-этнолог Р.Ғ. Кузеев классификацияһына ярашлы, ҡырғыҙ ырыуы төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына ҡарай. Тарихи Башҡортостандың Ҡырғыҙ олоҫо рус документтарында XVI быуаттан башлап күрһәтелә башлай. Тарих фәнендә ошо башҡорт ырыуының Енисей ҡырғыҙҙарынан килеп сығыуы ысынбарлыҡҡа тап килә, тип иҫәпләнә. Билдәле этнограф Р.Ғ. Кузеев та ошо версияны раҫларлыҡ дәлилдәр тапҡан.

Боронғо ҡырғыҙҙар хаҡындағы мәғлүмәттәр ҡытайҙарҙың Хань династияһы (б.э. тиклем 206 йыл - б.э. 220 йылы) замандарындағы хроникаларҙа сағылыш тапҡан. Бында б.э. тиклем III быуат аҙағында һундар тарафынан алып барылған яулап алыу һуғыштары хаҡында бәйән ителә. "Шунан һуң улар төньяҡта Хуньюй, Кюеше, Динлин, Гэгунь һәм Цайли биләмәләрен буйһондорҙо; шуға күрә старейшиналар һәм вазифалы заттар Модэ Шаньюйға баш һалдылар һәм уны аҡыл эйәһе итеп таныныла", - тип әйтелә ошо хроникала.

Ҡытай яҙмаһының үҙенсәлектәре арҡаһында "ҡырғыҙ" атамаһын белдергән иероглифтар "гэгунь", "гяньгунь", "цзянькунь", "хэгу", "цигу" кеүегерәк яңғыраш алған. Үрҙә аталған хроникаларҙа күрһәтелгән мәғлүмәткә ярашлы, ҡырғыҙҙар һун батшаһының Ордос исемле ставкаһынан төньяҡтараҡ йәшәгән. Тарихсылар А.Н. Бернштам һәм Л.Р. Кызласов бында Енисей йылғаһы үрендәге Минусинский һөҙәк соҡорлоғо тирәһендәге ерҙәр хаҡында һүҙ баралыр, тип фаразлай. Шулай ҙа ҡырғыҙҙарҙың тәү төйәктәре Енисей буйында түгел, ә хәҙерге Көнсығыш Төркөстанда, атап әйткәндә, Ҡытайҙың Синьцзян-Уйғыр автономиялы районында булғанлығы хаҡында яҙма сығанаҡтарҙа дәлилдәр булыуын тикшеренеүсе Л.А. Боровков асыҡлаған, ошо фекерҙе тарихсы ғалимдарҙан В.Я. Бутанаев һәм Ю.С. Худяков та ҡеүәтләй. Боронғо Ҡытай хроникаларына ярашлы, һун шаньюйы Модэ яугирҙарының б.э. тиклем III быуат аҙағындағы походы осоронда ҡырғыҙҙар Көнсығыш Төркөстан территорияһына ҡараған ерҙәрҙә көн иткән була. Б.э. тиклем I быуатта Хунну империяһында үҙ-ара низағтар көсәйеп китеп, шаньюй Чжичжи үҙенең туғаны Хуханьеға ҡаршы баш күтәрә. Б.э. тиклем 49 йылда ул үҙенең ғәскәрҙәре менән Көнсығыш Төркөстанға баҫып керә, унда көн иткән уцзе ҡәбиләһен буйһондора, шунан һуң цзянькунь (ҡырғыҙ) халҡын да тар-мар итә. Динлиндарҙы ла буйһондорғас, һундар ошо ҡәбиләләр ярҙамында усундарҙы ла енеүгә өлгәшә. "Чжичжи цзянькундар ерендә урынлашты", - тип теркәлеп ҡуйылған әле иҫкә алынған хроникала. Шулай итеп, боронғо ҡырғыҙҙар һун шаньюйы Чжичжиның (ул б. э. тиклем 36 йылда Ҡытай армияһының каратель экспедицияһы һөҙөмтәһендә һәләк ителә) көнбайыш походында ҡатнаша.

Йәнә б.э. III быуатына ҡараған бер сығанаҡта ҡырғыҙҙар хаҡында бер ни тиклем мәғлүмәт бирелгән. "Гяньгунь биләмәһе Канцзюйҙан төньяҡ-көнбайыштараҡ урынлашҡан. Һайланма ғәскәрҙәре 30 мең кешелек. Көтөү артынан йөрөйҙәр. Унда кеш күп, яҡшы аттар бар". Был яҙма мәғлүмәттә ҡырғыҙҙар төйәк иткән ер Кангарҙан (Кангюй, Канцзюй) төньяҡ-көнбайыштараҡ, тип билдәләнеүе ысынбарлыҡҡа тап килмәй, сөнки боронғо ҡаңлылар Һырдаръя йылғаһының урта ағымынан Ете һыу арауығына тиклем ерҙәрҙе биләһә, Гяньгунь, йәғни Ҡырғыҙ биләмәләре унан төньяҡ-көнсығыштараҡ ята. Һайланма ғәскәр һанынан сығып иҫәпләгәндә (яугирҙар халыҡтың 1/5 өлөшөн тәшкил итә), ҡырғыҙҙарҙың ул заманда дөйөм иҫәбе 150 меңдән дә кәм булмағандыр, тип әйтеп була.

"Бәй ши" хроникаһында (386 - 581 йылдар) ҡырғыҙҙар (хэгу) төркиҙәрҙең теле төркөмө составына индерелгән. "Теле ата-бабалары - сюнну вариҫтары ул. Ҡәбиләләре бик күп. Көнбайыш диңгеҙенән көнсығыштараҡ, тауҙарҙа һәм үҙәндәрҙә барса урындарҙа йәшәйҙәр", - тиелә унда. Ҡырғыҙҙарҙың теле составына инеүе уларҙың төрки телле булыуын, ошо берләшмәлә йәшәү уларҙың этник һыҙаттарының да формалашыуына хәл иткес йоғонто яһауын билдәләргә була.

"Суй шу" хроникаһында ҡырғыҙҙар ҙа, башҡорттар ҙа теле (уғыз) ҡәбиләләре иҫәбенә индерелгән. Ҡытай яҙма теленә ярашлы, башҡорттар ошо хроникала "божуцзюли" тип атала. Күрәһең, боронғо башҡорттар һәм ҡырғыҙҙар үҙҙәренең тәү тарихында бер үк этник һәм сәйәси арауыҡта формалашҡандыр. Ҡытай сығанаҡтарында башҡорт исеме аҫтында билдәле булған ҡәүемдең Фулинь (Византия) һәм аландар биләгән ерҙәрҙән көнсығышҡа табан, Ҡара һәм Арал диңгеҙҙәре араһында ятҡан киң далаларҙа көн итеүе теркәлһә, ҡырғыҙҙарҙың Яньцинан төньяҡтараҡ, Аҡ тауҙарға (Байшань) яҡын ерҙәрҙә йәшәгәнлеге теркәлә. Ә был ерҙәр Көнсығыш Төркөстанға ҡарай, тимәк IV-V быуаттарҙа ла ҡырғыҙҙар боронғо биләмәләрендә көн иткән була.

Ҡытайҙарҙың "Тан шу" хроникаһында Ҡырғыҙ дәүләте Хагас тип аталып, түбәндәге мәғлүмәт теркәлгән: "Хагас боронғо Гяньгунь дәүләте ул. Ул Хаминан көнбайышта, Харашарҙан төньяҡта, Аҡ тауҙар янында ята. Бәгзеләр был дәүләтте Гюйву йә иһә Гйегу тип атай. Уның кешеләре динлиндар менән ҡушылып бөткән. Хагас биләмәләре ҡасандыр һундарҙың көнбайыш сиктәрен тәшкил иткән". Ҡырғыҙҙарҙың динлиндар менән генетик бәйләнештә булыуы уларҙың физик һыҙаттарының башҡа бер Азия халыҡтарынан айырымланып тороуына килтерә. Динлиндар Үҙәк Азияға һәм Алыҫ Көнсығышҡа европеоид раса тибына ҡараған антропологик һыҙаттар алып килә. Динлиндар заманында һун, усунь (уйшин), уйғыр, ҡырғыҙ, ҡыпсаҡ ҡәүемдәре этногенезында ҡатнашҡан ҙур этник төркөмдө тәшкил иткән. Тап шуның өсөн Ҡытай хроникаларында ошо хаҡта былай тип әйтелә: "Әлеге ваҡытта зәңгәр күҙле һәм ерән һаҡаллы төркиҙәр... уларҙың (динлиндарҙың.- **авт. иҫк.**) вариҫтары ул".

V-VI быуаттарҙа ҡырғыҙҙар Енисей йылғаһы үрендәге ерҙәргә күсеп килә. Ошо яңы ерҙәрендә йәшәгәндәрендә уларҙың көн итмеше хаҡында "Тан шу" хроникаһында бик ентекле мәғлүмәт теркәлә:

"Уларҙың халыҡтары бер нисә йөҙ меңгә барып етә; стройҙағы ғәскәрҙәре 80 мең. Тура көньяҡ-көнсығышҡа табан хойхус (уйғыр. - **авт. иҫк.**) урҙаһына тиклем 3 мең һанала ине; көньяҡҡа табан Таньмань тауҙарына тиклем барып етә.

Тупрағы йәйҙәрен һаҙлыҡлы; ҡыштарын ҡар күберәк. Кешеләре башлыса оҙон буйлы, ерән сәсле, алһыу йөҙлө һәм зәңгәр күҙле. Ҡара сәс яҡшы сифат тип һаналмай, ә ҡоңғорт күҙлеләр Ли Лин вариҫтары тип һанала.

Ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда аҙыраҡ ине. Ир-ат ҡолаҡтарына алҡа тағып йөрөй. Улар ғорурҙар һәм бирешмәҫтәр. Уларҙың ҡыйыуҙары ҡулдарына татуировка эшләй, ә кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙары муйындарын татуировкалай...

Йылдың тәүге айын Маоши ай, тип атайҙар. Ай һүҙе айҙы белдерә. 3 ай сирек йылды тәшкил итә. Йылдар ун ике билдә менән һаналып йөрөтөлә; мәҫәлән, Инь билдәһендәге йыл юлбарыҫ йылы тип атала. Атмосфера иң һалҡындарҙан; хатта иң ҙур йылғалар яртыһына тиклем туңа.

Тары, арпа, бойҙай һәм гималай арпаһы сәсәләр. Ондо ҡул тирмәндәрендә тарттыралар; ашлыҡты өсөнсө айҙа сәсеп, туғыҙынсы айҙа уралар. Шарапты ботҡанан әсетәләр. Ағас емештәре лә, баҡса йәшелсәләре лә юҡ. Аттар тығыҙ кәүҙәле һәм бейектәр. Нык итеп һуғышҡандары иң яҡшыларынан һанала. Дөйәләр һәм ныйырҙар бар; әммә ныйыр һәм һарыҡ күберәк. Бай ер эшкәртеүселәр бер нисә мең баш аҫрай. Ҡыр йәнлектәренән тарпандар, ҡыр кәзәләре, мөгөҙлө һәм ҡара ҡойроҡло кәзәләр бар. Ҡара ҡойроҡло кәзәләр кабаргаға оҡшаған, уларҙың ҙур ҡара ҡойроҡтары бар. Балыҡтарҙан берәһе ете фут оҙонлоғонда булып, шыма һәм һөйәкһеҙ, ауыҙы томшоғо аҫтында.

Ҡоштарҙан: ҡыр ҡаҙҙары һәм өйрәктәре, найыҫҡан һәм ҡарсығалар. Ағастарҙан: ҡарағай, ҡайын, ильм (ҡарама), тал, шыршылар; һуңғылары шул тиклем бейектәр, хатта ки йәйәнән атылған уҡ уның осона тиклем барып етмәй. Әммә ҡайын барыһына ҡарағанда ла күберәк үҫә. Алтын, тимер, ҡурғаш бар...

Ҡорал яһайҙар, улар бик үткер; тукюеға (төркиҙәргә.- **авт. иҫк.**) даими ташыйҙар.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.
(Дауамы бар).

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75

ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

Башҡорттар китте һуғышҡа

Апрель аҙаҡтарынаса дивизия тәгәрмәс өҫтөндә булды. Вагондарҙа хәрби тормош үҙ сираты менән барҙы, хәрби-политик әҙерлек өҙөлмәне.

1942 йылдың 25 апрелендә Брянск әлкәһе Сафоновка тимер юл станцияһына килеп туҡтаныҡ, вагондарҙан төштөк. Дивизия 8-се кавалерия корпусы составына инә икән. Корпус командиры генерал-майор П.П. Корзун, полктар менән танышҡас, ҡәнәғәтләнеү белдерҙе. Корпус командиры урынбаҫары А.С. Жадов иһә Шаймоpатовты күргәс тә, ҡосаҡлап уҡ алды.

- Михаил Михайлович! Һаумы, дуҫым, бына тағы ла осраштыҡ бит! Тимәк, дошманды бергәләп дөмөктөрәбеҙ икән!

Баҡтиһәң, улар әүәлдән ҡорҙаштар, М.В. Фрунзе исемендәге академияла бергә уҡығандар; шулай уҡ П.П. Корзун да Шаймоpатовҡа бик таныш, дуҫ, хатта икеһенең дә ғаиләләре Мәскәүҙә Чистые Пруды урамындағы 75-се йортта күрше генә йәшәйҙәр икән. Гражданддар һуғышында сыныҡҡан был командирҙар, үкенескә ҡаршы, өсөһө лә бик тиҙҙән айырылышасаҡтарын (Корзунды ла, Жадовты ла, үрләтеп, башҡа частарға ебәрәләр), корпус командалығына башҡа кешеләр килерен, улар менән Шаймоpатовҡа көйләнеп эшләп китеүе шөйлә ҡатмарлыраҡҡа төшөрөн белмәйҙәр ине..."

* * *

Полк комиссары Сәғит Әлибаевтың "Көндәлек биттәренән" исемле хәтирәләр китабында 112-се Башҡорт атлы дивизияһының һуғыш яландарына нисек барып етеүе хаҡында ентекле мәғлүмәттәр бирелгән. Ошо хроникала уның яҙмаларынан ҡайһы бер ҡыҙыҡлы фактҙарҙы уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.

"**9 апрель.** Китәбеҙ... Башта, билдәле, беҙҙең полк тейәлде. Тәүге өс эшелондың берәһендә полковник Шаймоpатов һәм уның штабы китте. Күсимов - алдағы, мин - дүртенсе эшелонда. 12 апрель көнө 18 сәғәттә ҡуҙғалдыҡ.

Хәрби эшелондың үҙ тормошо - мәшәҡәттәре, ыҙалары бар. Һәр кемгә эш етерлек. Һәм һәр берәһе үҙ бурысын өлгөлө үтәргә тырыша.

Бына полк батареяһының ашхана мөдире Ниғмәтуллин. Ул һис тик тормай. Халыҡты ваҡытында тәмле аш менән туйындырыу өсөн "тиреһенән сыға". Әле юҡ ерҙән һыу килтерә, әле утын әҙерләтә, әле аҙыҡ артынан саба. Ул - Баймаҡ районы Шура ауылы уҡытыусыһы.

Бына әле байраҡ эргәһендә поста торған егет - Ғаббас Сымбулатов - насармы ни? Хәйбулланан ул. Бөгөн иртән миңә: "Комиссар иптәш, мин һеҙҙе таныным бит", - ти. "Ҡайҙан таныный?" "Ағайымдың карточкаһында һеҙҙең дә рәсем бар, ағайым Каруанһарайҙа педтехникум бөткән, шунда бергә төшкәнһегеҙ. Ул хәҙер Белоретта лейтенантлыҡҡа уҡый".

Дәүләкән, Миәкә, Бәләбәй, Йәрмәкәй һәм башҡа райондарҙан беҙҙе - туғандарын, ирҙәрен, яҡташтарын күреп ҡалыу өсөн станцияларҙа поезға ҡаршы сығыусылар күп булды. Ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарттар, бала-сағалар. Шуныһы характерлы - күҙ йәше юҡ тиерлек.

17 апрель. Биш көн үтеүгә, беҙ - Куйбышевта. Бында ла аттар сығарылып йөрөтөлмәй. Был хәл беҙҙе борсой башланы... Ике яҡтан да өҙлөкһеҙ поездар үтә, станция сиктән тыш тығын.

Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.
(Дауамы бар).

✓ *Биш-алты йыл самаһы коммерция структураларында эшләп, үҙемде эшҡыуарлыҡ өлкәһендә һынап ҡараным. Әммә мине барыбер йәмғиәткә күберәк файҙа килтерә торған өлкә тартты.*

АҘЫЛ ИРҘӘР...

үҙем тип түгел, халҡым тип яныр

Тормошта бер нәмәгә лә битараф ҡала белмәгән, йәмғиәттең һулышын тойоп йәшәгән кешеләр була. Улар үҙ мәнфәғәтенән бигерәк дөйөм халыҡ хәстәрен ҡайғырта, уртаҡ идеялар өсөн көйә, йәмғиәткә файҙа килтереү хаҡында борсола. Ошо һирәктәр араһында ла күҙгә күренерлек эштәр башҡарған, йәмәғәтселектең хоҡуҡтарын ҡайғыртҡан үҙ шәхестәребеҙ бар һәм шуларҙың береһе - Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһының Гражданлыҡ йәмғиәтен үҫтереү, йәмәғәт һәм дини берләшмәләр мәсьәләләре буйынса комитеты ағзаһы Рәмзил ИШСАРИН. Рәмзил Рафаил улы менән вайымлылар, илһөйәрҙәр, ерһөйәрҙәрҙең нисек тәрбиәләнеүе, ниндәй уй-ниәттәр менән үҫеүе һәм тормошта үҙ урынын табыуы тураһында әңгәмәләштек.

Рәмзил ИШСАРИН:

Башҡорт йәштәре үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнамаҫҡа, төрлө өлкәләрҙә конкурентлы булырға, бөтәһе менән бер рәттән алдынғылыҡҡа сығырға тырышырға тейеш. Башҡорт халҡының иҡтисади хәлен яҡшыртам, арабыҙҙа эшҡыуарҙарҙы үҫтерәм, кешеләрҙе ошо өлкәгә йәлеп итәм тигәндәрҙең ошо йүнәлештә эшләгән башҡа ойошмаларҙа ҡатнашыуы отошлораҡ булыр. Шул ваҡытта ғына беҙ башҡа халыҡтар араһында отолоп ҡалмаясаҡбыҙ.

Ғаиләлә алған тәрбиә кешенең киләсәген билдәләй, тиҙәр. Һеҙҙең киләсәгегеҙгә йоғонто яһаған бала саҡ хәтирәләре ниндәй?

- Мин ябай крәҫтиән ғаиләһендә үҫтем. Әсәй ғүмер буйы һауынсы, атай механизатор булып эшләне. Шуға күрә, бәләкәй саҡтан фермала йөрөнөк, 5-6 йәштән һыйыр һауырға өйрәнеп, әсәйгә ярҙам иттек. Үҫә килә атай үҙе менән эшкә йөрөттө, трактор, йөк машиналары менән идара итергә өйрәтте. Бының менән ауыл балаларын аптыратып булмай, бөтәһе лә хеҙмәт тәрбиәһендә үҫте. Ул ваҡытта эштән ҡасыу тураһындағы уй булманы ла. Каникул мәлдәрендә балалар ырҙын табағында эшләй, ҡайһы бер малайҙар комбайнсы ярҙамсыһы булып баҫыуҙа йөрөй. Кәүҙәгә арыу ғына булғас, мине 6-сы кластан силос соҡорона эшкә саҡыра башланылар. Уның араһында әсәй-атайға ла барып ярҙам итәм, өйҙәге эш тә минең өҫтә ҡала. Беҙ ғаиләлә 4 бала булдыҡ һәм мин мәктәп йәшенә еткәндә апайым Салауат педагогия училищеһына уҡырға китте, үҙемдән 10 йәшкә бәләкәй игеҙәк туғандарымды өләсәй менән икәү ҡараныҡ. Әсәйем игеҙәктәрҙе тапҡас, бер аҙна ял иттеме-юҡмы, эшкә сыҡҡайны. Атайымдың әсәһе Рабиға өләсәйемдең көн дә ҡабатлап әйткән һүҙҙәре бөгөн дә ҡолаҡта яңғырап торғандай: кешелекле бул, ҡайҙа ғына йөрөһәң дә алдыңды-артыңды ҡарап йөрө, дөрөҫ юлдан бар, ғәҙел бул...

Эштән бушамаһам да тик яҡшы билдәләргә генә өлгәштем, атай-әсәйҙең дәрес әҙерләп ултырғанымды күргәне лә булмаҡ, әммә йөҙҙәренә ҡыҙыллыҡ килтермәнем. Бәләкәйҙән китап уҡырға яратҡанмын, хатта ауыл китапханаһының асҡысын үҙемә биреп үк ҡуйғайнылар бер мәл. "Китап ене" ҡағылғандар малайҙар араһында һирәк була, шуға улар минең был ғәҙәтемде, шулай уҡ китап уҡырға яратҡан ҡыҙҙар менән аралашыуымды бик өнәп тә бөтөрмәйҙәр ине. Хәҙер уйлайым да, моғайын, сәйәсмән булыу шул ваҡыттан башланғандыр, тием. Сөнки "егетлек абруйыма" тап төшөрмәй генә бөтәһе менән дә аралашыу юлын таптым. Мәктәптә йәмәғәт эштәрендә актив ҡатнашып йөрөлдө, октябрят, пионер отрядтарын да, хатта комсомол ойошмаһын да етәкләнем. Быға бәйле ҡыҙыҡлы хәтирә лә бар әле. Пионер йәшендә булһам да, комсомол ойошмаһы етәксеһе итеп ҡуйҙылар, ярты йылдан райондағы иң яҡшы ойошма тип танылып, республиканан Почет грамотаһы алдыҡ.

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына бишенсе синыфтан уҡ саҡыра башлаһалар ҙа, унынсыға ғына уҡырға килдем. Сөнки ауылдағы математика уҡытыусыбыҙ Сәлимә апай ныҡ яҡшы уҡытты һәм гимназияға уҡырға киткем килмәйерәк йөрөнөм. Ләкин уҡытыусыбыҙ декрет отпускыһына сыҡты ла, бер йыл йүнле математика дәрестәре булманы, ә мин бөйөк математик булам тип хыялланып йөрөйөм бит инде. Шуға Өфөгә юлланырға тура килде. Имтихан тоттоҡ та, башҡа фәндәрҙән етерлек балл йыя алмаһам да, математика имтиханы күрһәткестәрем яҡшы булғас, гимназияға ҡабул иттеләр һәм математика класына ултырттылар. Ҡыҙғанысҡа күрә, ул йылдарҙа гимназияла математика буйынса уҡытыу сифаты төшөп китте, бер уҡыу йылы эсендә 3-4 уҡытыусы алышынды. Шуға, тора-бара математика йүнәлешендәге кластың был предметҡа ҡыҙыҡһыныуы юғалды ла ҡуйҙы. Мин дә хоҡуҡ фәне, юридик өлкә менән мауығып киттем. Сөнки бик ҡыҙыҡ осорға эләктек бит беҙ: суверенитет яулау заманы, закондар үҙгәртелә башланы, Конституция ҡабул ителде. Шуға, юридик белемдең, закондарҙы һәм хоҡуҡтарыңды белеүҙең ҡайҙа эшләһәң дә кәрәге тейер, тип уйланым. Әммә үҙем шул эштең уртаһында ҡайнармын тигән уй башыма ла кереп сыҡманы. БДУ-ның юридик факультетына инеү өсөн имтихан тапшырҙым, әммә тәүге йылда үтә алманым. Бөтән пландар юҡ ине, уҡырға инә алмаҫмын тип күҙ алдына килтермәгәйнем. Шулай итеп хыялымды икенсе йылына ғына бойомға ашыра алдым, уға тиклем Өфөләге тимер-бетон заводында эшсе һөнәренең нигеҙҙәрен үҙләштерҙем.

Башҡортостан суверенитеты өсөн көрәш йылдарында Башҡорт йәштәре иттифағының тәүге етәкселәренең береһе булғанһығыҙ. Шул турала ла хәтергә төшөрөп үтәйек әле. Ошо хәрәкәттә сынығыу артабан да төрлө йәмәғәт эштәренең уртаһында ҡайнарға этәргән, күрәһең?

- Беҙ мәктәп уҡыусылары булған йылдарҙа уҡ республикала төрлө йәмәғәт хәрәкәттәре башланды. Ошо хәрәкәт етәкселәренең береһе ауылдашым Данир Ғәйнуллин булды. Ул бала саҡтан беҙҙең арала лидер ине, Тимур командалары ла ойоштора торғайны, гел уның артынан эйәреп йөрөнөк. Шуға мин уның ҡайнап торған йәмәғәт эшенә башлы-көллө сумыуына аптыраманым. Уның әйҙәүенә эйәреп, беҙ, гимназия уҡыусылары ла, бөтә йәмәғәт саралары йөрөй башланыҡ. Университетҡа ингәс, уҡыуға бирелеп киттем һәм 1-2 йыл уҡығас, таҡы ла Башҡорт йәштәре иттифаҡы сараларына йәлеп ителдем. Был ойошманың актив эшләп китеүенә I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы зур этәргес булды, сөнки йәштәр, бигерәк тә беҙҙең БДУ студенттары уны ойошторошоуҙа ла, ҡоролтай эшендә лә әүҙем ҡатнашты. Был ваҡиға яңы башҡорт йәштәре ойошмаһы барлыҡҡа килеүгә зур этәргес булды. Беҙ ул ваҡытта дәүләт ведомстволары менән берлектә йәштәр өсөн бик матур мәҙәни, спорт, фәнни саралар үткәрә башланыҡ. Башҡорт йәштәре иттифағын 1996 йылдан алып өс йыл дауамында тартты. 2006 йылда "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан бүлексәһенә йәштәр эштәре буйынса белгес итеп эшкә саҡырылғас, шунда уҡ ризалаштым. Ул ваҡытта партия эргәһендә "Йәш гвардия" ойошторола башлағайны, шуның эшен яйға һалыу өсөн минең тәжрибәм кәрәклеген әйттеләр. Комсомолдың аныҡ, структуралы, планлы булыуы оҡшай торғайны, шуға ниндәй генә ижтимағи ойошмала эшләһәм дә шул принциптарҙы күҙ уңында тота инем. "Йәш гвардия"ны ла яңыса итеп ойошторов ебәрҙек, әлеге көндә ул иң көслө ойошмаларҙың береһе.

Миңә яңы ойошмалар ойоштороу эше оҡшап ҡалды. Шуға 2008 йылда "Арена" тигән ойошмаға эшкә күсеп, яңы асылып ҡына торған "Динамо" спорт комплексының эшен гөрләтеп ебәрҙек. "Опора России" ойошмаһының Башҡортостан бүлексәһе етәкселегендә лә эшләнем. 2008-2009 йылдарҙа хеҙмәттәштәр менән бергә уны Рәсәй кимәлендә алдынғы урынға сығарҙыҡ, республиканың райондарында бүлексәләр асып, бик күп шәхси эшҡыуарҙарға эш башларға ярҙам иттек, республикаға субсидия, грант аҡсалары йәлеп иттек. Ул заманда эш башлаған эшҡыуарҙар һаман да шулай матур эшләп киләләр.

Ә бына бөгөн башҡорт йәштәрен йәмәғәт эштәренә йәлеп итеү өсөн ниндәй ойошма кәрәк?

- Әлбиттә, ойошмаларҙың төрлөһө булырға тейеш. Башҡорт йәштәренең үҙ милли ихтыяжы буйынса ғына ойошмаға тупланыуы аралашыу, бергә үҫешеү йәһәтенән яҡшы, әлбиттә. Башҡорт халҡын борсоған темаларҙы, башҡорт йәштәрендә генә хасил булған һорауҙарҙы ла күтәрергә тейеш кемдер, шуға ошо өлкәлә файҙа килтерергә теләүселәр бергә тупланырға тейештәр. Әммә төрлө яҡлап үҫешеү өсөн һөнәри йүнәлештәр буйынса ла фекерҙәштәр, коллегалар менән аралашыу мөһим. Башҡорт йәштәре үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнамаҫҡа, төрлө өлкәләрҙә конкурентлы булырға, бөтәһе менән бер рәттән алдынғылыҡҡа сығырға тырышырға тейеш. Башҡорт халҡының иҡтисади хәлен яҡшыртам, арабыҙҙа эшҡыуарҙарҙы үҫтерәм, кешеләрҙе ошо өлкәгә йәлеп итәм тигәндәрҙең ошо йүнәлештә эшләгән башҡа ойошмаларҙа ҡатнашыуы отошлораҡ булыр. Шул ваҡытта ғына беҙ башҡа халыҡтар араһында отолоп ҡалмаясаҡбыҙ. Беҙ - башҡорттар, тип күкрәккә һуғып, беҙгә тегене, быны бирегеҙ тип кенә ятып булмай. Әлеге көндә беҙ ил кимәлендә, үҙебеҙҙең миңә етәкләргә тура килде. Был ойошма эшендә ҡатнашыу күптәргә зур сәйәсәткә старт бирҙе, ойоштороу эштәренә өйрәтте. Ул осорҙа сынығыу алған егеттәр-ҡыҙҙар менән әлеге көндә лә аралашып торабыҙ, күптәр тормошта үҙ юлын тапты, халҡыбыҙға төрлө өлкәлә файҙа килтерәләр.

Иттифаҡтан һуң бер нисә йыл Йәштәр эштәре буйынса дәүләт комитетында эшләп алдым, унда "Республика көндәре", фәнни саралар үткәреү, социаль программалар яҙыу тәжрибәһен үҙләштерҙем. Шул ваҡытта юридик практика бик тә кәрәк булды һәм алған белемемдең файҙаһын күрҙем. Беҙҙең комитет ул ваҡытта ла, әлеге көндә лә беренселәрҙән булды, Рәсәй буйынса башҡаларға өлгө күрһәттек һәм күптәр килеп эшкә өйрәнә торғайнылар.

Биш-алты йыл самаһы коммерция структураларында эшләп, үҙемде эшҡыуарлыҡ өлкәһендә һынап ҡараным. Әммә мине барыбер йәмғиәткә күберәк файҙа килтерә торған өлкә тартты.

✓ *Аҫаба башҡорттар 1463 ауылда йәшәһә, 295 ауылда припущенник (килмешәк) башҡорт көн иткән. Ерһеҙ ҡалған башҡорттар припущенникҡа әйләнеп, VIII ревизия (1834 йыл) буйынса уларҙың һаны 66 меңдән артып киткән.*

йәмғиәттә генә түгел, ә бөтә донъя кимәлендә конкурентлыҡҡа сығабыҙ. Интернет, замандың башҡа мөмкинлектәре сиктәрҙе юя. Шуға халҡыбыҙҙың киләсәге матур булһын өсөн заман ысынбарлығында артта ятып ҡалмауҙы хәстәрләргә кәрәк. Йәмәғәт ойошмалары күп, һәр кем күңеленә ятҡан, йәмғиәтебеҙгә файҙа килтергән, ыңғай эшмәкәрлек алып барғандары менән эшләй, фекерҙәштәр таба, тәжрибә уртаҡлаша, һөнәри үҫешкә өлгәшә ала. Бөтә йүнәлештәр буйынса ла алдынғылар булырға ынтылыу мөһим, әммә бер кемде лә кәмһетмәйенсә һәм үҙебеҙҙе лә кәм тоймайынса эшләргә кәрәк быны.

Үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртыусы, фекерен белдереүсе итеп һайлаһа ла, депутаттарҙы халыҡ күберәк тиргәп телгә ала. Әммә ашаған белмәй, тураған белә, тиҙәр. Ни өсөн ҡәнәғәтһеҙҙәр һаны күберәк?

- Етәксе булыу - һәр ваҡыт ҡыйын эш. Уларҙы гел әрләйҙәр, сөнки уның иңдәрендә оло яуаплылыҡ ята. Ошо яуаплылыҡты тормошҡа ашырғанда төрлө алымдарға, бәлки, кемгәлер оҡшамағанына ла, барырға тура килә. Кешенең асылы шундай бит: ул үҙен, тормошон, киләсәген яҡшыртырға тырыша, уға булғанынан һәр ваҡыт күберәк кәрәк, бер ҡасан да тулыһынса ҡәнәғәтләнеү кисермәй. Был яҡшылыр ҙа, әлбиттә. Ләкин етәксе һәр кемдең бына шундай талабын ҡәнәғәтләндереп еткерә алмаҫҡа ла мөмкин. Ул дөйөм халыҡ өсөн, дөйөм халыҡтың талабын аҙмы-күпме ҡәнәғәтләндереү өсөн эшләй.

Эйе, партияны ла әрләйҙәр. Сөнки ул эшләй. Ә эшләмәгән партияларҙы нимә өсөн әрләйһең? Уларҙың яуаплылығы юҡ, улар үҙҙәре үк әрләү компанияһын башлап ебәрә, халыҡ шуға ышана. "Берҙәм Рәсәй" партияһы тормошобоҙҙағы һәр проблеманы күрә, күтәрә, хәл итеү юлдарын эҙләй, әммә, билдәле, һәр ваҡытта ла хәл ителеш килеп сыҡмаҫҡа ла мөмкин. Әлеге көндә донъялағы үҙгәрештәр беҙҙең илдә лә ауырлыҡтар тыуҙыра. Ҡыҙғанысҡа күрә, донъялағы иҡтисади хәл һәм шуға өҫтәп коронавирус эпидемияһы илебеҙ иҡтисады торошона ҙур йоғонто яһай. Ләкин беҙ берләшеп, был проблеманы хәл итә алырбыҙ, тип ышанам.

Халыҡта депутаттарға ҡарата ышаныс булдырырға тырышабыҙ, әммә был бөгөн генә барлыҡҡа килгән проблема түгел. Ысынында, әгәр ҙә элек аҡсалы кешеләр статус, шәхес именлеге кәрәк булған өсөн депутатлыҡҡа килһә, ҙур фракция булмағанлыҡтан, төрлө кешеләрҙең ихтыяжын иҫәпкә алырға һәм килешеүҙәргә барырға тура килһә, руссалап әйткәндә, "лоббировать" итһәләр, хәҙер ҙур партиялар булғанда бер депутат үҙ файҙаһын ғына ҡайырып ниҙер эшләй алмай. Бөтә мәсьәләләрҙә лә партиялаштар, коллегалар менән уртаға һалып фекер алышабыҙ, эш ваҡытыбыҙ ҙа ҡаты тәртипкә ҡоролған. Мәҫәлән, элек депутат 4 йылға бер тапҡыр эш урынына килеп күренә алһа, хәҙер ундай ирек юҡ, эске тәртип көслө. Әйтергә кәрәк, кемдәрҙер уйлауынса, депутат булыу бизнесҡа ла, башҡаға ла ниндәйҙер хоҡуҡтарҙы арттырмай. Депутатлыҡ бик ҡатмарлы эш. Бөгөн халыҡ бөтәһен дә күреп-белеп тора, һәр аҙымың шундуҡ беленә, бер нәмә лә эшләмәй, бурыстарыңды үтәмәй йөрөү тураһында әйтеп тораһы ла түгел.

Һеҙ Дәүләт Думаһының Гражданлыҡ йәмғиәтен үҫтереү, йәмәғәт һәм дини берләшмәләр мәсьәләләре буйынса комитеты ағзаһы. Был сиктәрҙә ниндәй мәсьәләләр өсөн яуап бирәһегеҙ, халыҡтың ниндәй мөрәжәғәттәрен ҡабул итәһегеҙ?

- Беҙҙең эш өлкәһе иҡтисад мәсьәләләренән саҡ ҡына ситтәрәк. Йәмғиәткә ярҙам иткән эштәр һағында торабыҙ, кеше хоҡуктары системаһы нәҡ беҙҙең аша үтә, беҙ кеше хоҡуғын ҡайғыртҡан закондарҙы ҡарайбыҙ, ҡабул итәбеҙ. Кеше хоҡуғы буйынса вәкилдәр эшмәкәрлегенә ярҙам иткән закондар системаһын булдырҙыҡ, төрлө мәсьәләләрҙе халыҡҡа ишеттереү, киң йәмәғәтселектең фекерен тыңлау буйынса барыһын да беҙ эшләйбеҙ. Әлеге көндә дини сәйәсәт өлкәһендә ҡабул ителергә тейешле ҡайһы бер закондар әҙерләгәнбеҙ. Шәхсән үҙем хаж сәфәре ҡылыусыларға ҡағылышлы закондарҙы бойомға ашырыуҙа ҡатнаштым. Бынан тыш, йәмәғәт советтары, йәмәғәт палаталары төҙөү һәм уларҙың төрлө кимәлдәге актуаль мәсьәләләрҙе хәл итеү йәһәтенән эшмәкәрлектәренә уңайлыҡтар тыуҙырыу ҙа беҙҙең комитет ҡарамағында. Ирекмәндәр хәрәкәтен дә беҙ төҙөнөк, уларҙың эшмәкәрлегенә ҡағылышлы закондар ҡабул иттек һәм Рәсәйҙә Ирекмәндәр йылын уҙғарҙыҡ. Шулай уҡ хәйриә йәмғиәттәре лә беҙҙең ҡарамаҡта, был өлкәлә эштәрҙе яйға һалырға һәм халыҡты төрлө мутлашыусыларҙан һаҡларға тырышабыҙ.

Комитеттың дини берләшмәләр мәсьәләләре буйынса эшмәкәрлегенә бер аҙ иғтибарҙы йүнәлтеп китеү урынлы булыр. Был йәһәттән тәү сиратта шуны әйтергә кәрәк: дәүләт һәм дин айырым булһа ла, халыҡ бер. Дәүләт тә, дин дә бер үк кешеләр менән эш итә. Халыҡтың хәүефһеҙлеген ҡайғыртыу дәүләттең төп бурысы, шуға дин өлкәһенә ҡағылған һорауҙарҙан да ситтә тороп булмай. Минеңсә, халыҡты ҡурҡыныс юлға алып барған ойошмалар менән көслө хоҡуҡи көрәш алып барылырға тейеш. Әлеге көндә дин өлкәһендә, ҡыҙғанысҡа күрә, төп проблемаларҙың береһе - ул тарҡаулыҡ. Беҙҙең республикала ғына түгел, бөтә Рәсәй буйынса мосолман ойошмалары тарҡау. Әгәр ҙә христиандарҙың бер генә ойошма, бөтәһе лә бер ҡулда булһа, мосолмандар ойошмаһы бер бөтөн түгел. Шуға һәр береһе үҙенсә эшләй, уларҙы финанслау яғынан да, башҡа йәһәттән дә хеҙмәттәшлек итеүе ауыр. Ситтән традицион булмаған идеялар индерелеү ҙә шунлыҡтан килә. Шуға, ихтирамлы мөфтөйҙәр уртаҡ тел табып, бер фекергә килер, моғайын, тигән теләгебеҙ бар.

Ғөмүмән, һайлаусыларым менән тығыҙ бәйләнеш булдырылған, тип иҫәпләйем. Мин 15 йыл тирәһе телефон номерымды алыштырғаным юҡ һәм бик күп шылтыраталар, мөрәжәғәт итеүселәрҙең барыһын да ҡабул итәм, бөтә һорауҙарҙы ла мөмкин тиклем хәл итергә тырышам.

Бөгөн бик күп йәштәр "үҙҙәрен эҙләй". Оҙон хеҙмәт юлы үткән кеше булараҡ, һеҙ тормошта үҙ урыныҡыҙҙы таптыҡыҙмы?

- Мин һәр ваҡыт күңелемә ятҡан эштәрҙе генә атҡарырға тырыштым һәм был минең һуңғы вазифам түгелдер, тип уйлайым. Аныҡ бер ниндәй эш менән дә шөғөлләнмәгән осорҙарым да булды, күңелемә ятмағанға тотонғом килмәй йөрөнөм һәм оҙаҡ эҙләндем. Оҡшаған эшкә башкөллө китеп бирелеп тотонам. Дөрөҫөн әйткәндә, матди яҡҡа бик ҙур әһәмиәт бирмәйем, иң мөһиме, ғаиләм имен булһын һәм төп ихтыяждары ҡәнәғәтләндерелһен. Сәйәсәткә килеүем дә матди башланғысҡа бәйле түгел, партия сафына ингән осорҙа бындағы эш хаҡынан өс тапҡырға күберәк түләнгән урындан тәҡдим дә килгәйне. Әммә мин партияны һайланым, сөнки йәмәғәт эшендә ҡатнашырға һәм файҙа килтерергә яңы мөмкинлектәр асылды. Шуға ошо ике нәмәгә - юғары килем дә килтергән, күңелгә лә ятҡан эште берләштерергә тырышмаған кешеләр шул тиклем ныҡ бәхетһеҙ булып тойола миңә. Бөтәһенең дә быға тәүәккәллек күрһәтә алмауын да аңлайым.

Ҡайһы берәүҙәр, һеҙ ябай халыҡтың хәлен аңлайһығыҙмы ни инде, һеҙ бит алтын ҡашыҡ менән тыуғандар, тиһә лә, барыһы ла шулай еңел генә бирелмәне. Мин дә ваҡытында ҡуртымға алынған фатирҙа йәшәнем, ул мәлдә ике балабыҙ бар ине, әммә яратмаған эшкә урынлашырға теләмәй, эшһеҙ йөрөгән мәлдәр ҙә булды һәм һөҙөмтәлә үҙемде таптым. Шуға тормошомдоң һәр бите алдағы йылдарға билдәләп ҡуйылған тимәйем, ваҡыт уҙыу менән бөтә нәмә үҙгәреш кисерә һәм мин дә һәр саҡ ауырлыҡтарҙы күтәрергә әҙер торам. Был вазифа биләүгә лә ҡағыла, минең өсөн бер вазифа ла үҙемә үҙем ноҡланыу йәки уңыш ҡаҙаныу сараһы булманы. Уны мин һәр ваҡыт иңемә яуаплылыҡ алыу, бурысым итеп ҡабул иттем. Шуға, ҡулдан килгәнде эшләйем, коллегаларымды ла шулай тип ышандыра алам. Бәлки, бөтәһе лә килеп тә сыҡмайҙыр, әммә мин бөтә көсөмдө налып тырышам.

ШУЛАЙ ИТЕП...

"Аҫыл кеше алтын тип үлмәҫ, халҡым тип үлер", тигән тапҡыр һүҙҙәр хәтергә төштө был әңгәмә барышында. Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып, тыныс ҡына үҙ урынында, үҙ эшен белеп башҡарып йөрөгән шәхестәргә бағышланғандыр был мәҡәл. Рәмзил Рафаил улы башҡорт халҡының тап шундай аҫыл ир-уҙамандарының береһе, замандаштарына үрнәк булырлыҡ шәхес.

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ

ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

XIX быуаттың 30-сы йылдарындағы башҡорт хужалығы тураһындағы мәғлүмәттәр иғтибарға лайыҡ. Башҡорттар йәшәгән 19 өйәҙҙең (Хотин, Хвалын, Ҡарытау өйәҙҙәрендә йәшәгән Ҡамар башҡорттарынан башҡа) 8-ендә (Бөрө, Бөгөлмә, Боғорослан, Быҙаулыҡ, Алабуға, Минзәлә, Уса, Сарапул) бар халыҡ ултыраҡ тормош алып барған, ер эшкәртеү менән шөғөлләнгән. Был өйәҙҙәрҙә 520 башҡорт ауылы иҫәпләнгән. Тотош алғанда, бөтә өйәҙҙәрҙәге башҡорт ауылдарының 902-һендә ер эшкәртеү менән бәйле ултыраҡ тормошло хужалыҡтар өҫтөнлөк итһә, 912 ауылдың халҡы ярым күсмә тормош алып барып, мал аҫрау менән шөғөлләнгән. Ведомостарҙағы мәғлүмәттәр сиктәре аныҡ күрһәтелгән хужалыҡ райондарын билдәләү мөмкинлеген биреүе өсөн ҡиммәтле. Улар башҡорттарҙың һәм мишәрҙәрҙең ергә ҡарата милекселек мөнәсәбәттәрен аныҡлау йәһәтенән дә әһәмиәтле. Ошо тарихи сығанаҡҡа ярашлы, аҫаба башҡорттар 1463 ауылда йәшәһә, 295 ауылда припущенник (килмешәк) башҡорт көн иткән. Ерһеҙ ҡалған башҡорттар припущенникҡа әйләнеп, VIII ревизия (1834 йыл) буйынса уларҙың һаны 66 меңдән артып киткән. Күреүебеҙсә, ерһеҙ ҡалған башҡорттар туҡтауһыҙ арта барған, шулай ҙа был күренеш барса башҡорттарға ла хас булмаған. 19 өйәҙҙең 6-һында - Бөрө, Верхнеуральск, Алабуға, Уса, Сарапул, Шадринск өйәҙҙәрендә припущенник башҡорттар булмай.

Ведомостар мишәрҙәрҙең ер менән файҙаланыуы тураһындағы элекке ҡарашҡа төҙәтмә индерә. Ғилми әҙәбиәттә 1736 йылдың 11 февралендәге указдан һуң мишәрҙәрҙең аҫаба башҡорттарға ер менән файҙаланған өсөн түләүҙәрен туҡтатыуы хаҡындағы фекер киң таралған. Бындағы мәғлүмәттәр ошо ҡарашты раҫламай. Хатта XIX быуаттың 40-сы йылдары башында ла 147 ауылдың мишәрҙәре (Бөрө өйәҙендә -71, Бәләбәйҙә - 56, Стәрлетамаҡта -18, Силәбелә - 2) припущенник хәлендә йәшәүен дауам итә, унан башҡа уларҙың 7 ауылы типтәр ерҙәрендә көн итә. 117 мишәр ауылы һатып алынған ер биләмәләрендә йәшәй; мишәрҙәрҙең 25 ауылы - ҡаҙна ерендә, 8 ауылы - урыҫ батшалары тарафынан бирелгән, 6-һы башҡорт ихтилалсыларынан тартып алынған ерҙә көн итә.

Башҡорт кантон начальниктары ведомостарында һәр ауыл буйынса ике енескә ҡараған башҡорт кешеләре генә күрһәтелһә, мишәр кантондарында шулай уҡ 1834 йылға ҡарата мишәрҙәр иҫәбе теркәлгән. Типтәр ауылдары тураһында земство исправниктары тарафынан 1839-1842 йылдарҙа төҙөлгән ведомостарҙа типтәр командаларының һаны (бөтәһе 99), 1834 йылға ир енесенә ҡарағандарының иҫәбе, улар биләгән ер майҙаны һәм ошо ерҙәргә хоҡуҡтары хаҡында акттар теркәлгән. Беҙ тикшергән һәм өйрәнгән документтарҙа припущенниктар һәм типтәрҙәр хаҡында ла һүҙ барғас, ошо сословиеларҙы һәм уларҙың атамаларын белдереүсе терминдарға ла иғтибар бүләйек.

Ҡағиҙә булараҡ, ғилми әҙәбиәттә типтәр институтының ерле сығышы тураһындағы мәсьәләне ситләтеп уҙалар. Уларҙы Башҡортостанға күсеп килгән крәҫтиәндәр менән бәйләп, нигеҙһеҙ рәүештә крәҫтиәндәрҙең айырым социаль-этник төркөмөнә индерәләр һәм улар араһында башҡорттар булыуын инҡар итәләр. Тап шуның өсөн тарихсыларҙан һәм этнографтарҙан типтәр атамаһы һәм сословиеһының килеп сығышына һәм уларҙың этник-ара процестарҙағы роленә иғтибарлыраҡ булыу талап ителә.

Припущенник һәм типтәр институттары башҡорт йәмғиәтенең социаль-иҡтисади һәм сәйәси үҫеше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Улар башҡорттарҙың үҙәре биләгән ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуғы булыуы менән бәйле булып, Волга буйынан күскенселәр килә башлағандан байтаҡҡа алдараҡ барлыҡҡа килгән. Килмешәклек күренеше аҫабалыҡ хоҡуғы бөтөрөлөү менән юҡҡа сыға. Типтәрлектең Башҡортостандан башҡа ерҙәрҙә теркәлмәүе әлеге институттың ошо ерлектә барлыҡҡа килеүен дәлилләүсе факт булып, башҡорттарҙың урыҫ батшаларының жалованный грамоталары менән нығытылған аҫаба ерҙәренә килмешәктәрҙе индереүе (припуск) менән бәйле килеп сығыуын күрһәтеп тора. Аҫаба ырыу ерҙәренең бер өлөшө менән ирекле рәүештә эш итеү мөмкин була: уны һатыу йәиһә ҡуртымға биреү тыйылмай. Община ерҙәренә билдәле шарттарҙа ошо йәки башҡа олоҫтарҙан сыҡҡан килмешәктәрҙе индереү һөҙөмтәһендә припущенниктар сословиеһы барлыҡҡа килә.

(Дауамы бар).

✓ Ҡартатайҙар бөркөттө тотоп өйрәткәндә, уны башта уҡ тағараҡҡа ултыртҡандар. Ашатыр алдынан уны хужаһы үҙ тауышына өйрәткән. Сөнки бөркөт ишетеп өйрәнгән тауышты ғына үҙ иткән, башҡаларға осоп килмәгән.

Спартак ИЛЬЯСОВ

АТА-БАБАМ ҺӨНӘРЕ - ҠОШ СӨЙӨҮ

Йыртҡыс ҡошто һунарға өйрәтеү

Тотоу, ҡулға алыу. Боронғо һунарсылар иң алда нимәгә һунар итергә тигән маҡсаттарын асыҡлаған. Теләккә һәм ҡайһы төр һунарына ҡулайлашыуға төрлө шарттар йоғонто яһаған. Мәҫәлән, һунарсының һәм ҡоштоң ҡайһы климат һыҙмаһында йәшәүе; ер өҫтө төҙөлөшө; был урындарҙа ниндәй ҡоштарҙың һәм йәнлектәрҙең йәшәүе; һунарсының ҡош менән һунар ысулы; һыбаймы, әллә йәйәүме, һ.б. Ер өҫтөнөң ҡош менән һунар итеү өсөн иң камил, иң ҡулайлы һыҙаттарының береһенә беҙҙең ерҙе, боронғо тарихи Башҡортостан ерен индереү кәрәктер. Бының өсөн ер өҫтө төҙөлөшөн биш төргә бүләйек.

1. Диңгеҙ йә оло һыу, һаҙлыҡтар, ҡырсынлыҡлы бейек яр, тау, ҙур ҡамышлыҡтар.

2. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ һыуһыҙ уңғыл да сунғыл яҫы ҡалҡыулыҡтар далаһы.

3. Оло һыу, һаҙлыҡтар, ҡалын урман, ҡамышлы күлдәр теҙмәһе, ваҡ яландар.

4. Ҡаялы бейек ҡаҡ тауҙар, ваҡ ағаслы урманлы үҙәктәр. Тау араларында ваҡ яландар, ҡамышлы ваҡ йылғалар.

5. Урман-тауҙар, сауҡалыҡтар, шырлыҡтар яландар менән алышына. Киң яландар, күлдәр, йылғалар, ваҡ һаҙҙар, шишмәлектәр, түбәлектәр теҙмәһе.

Беҙҙең атай-олатайҙар һуңғы меңъйыллыҡта тәбиғәттең мин яҙған һуңғы бүлегендә йәшәгән. Шунда ҡулайлашҡандар, бөркөт-ҡарсығалары менән дә шунда һунарсылыҡ итеп өйрәнгәндәр. Бөркөт, көсөгән, ялан бөркөтө, ҡарағош менән бүрегә, ҡыр кәзәһенә, төлкөгә, һуйырға, ҡаҙға, торнаға һунарсылыҡ итһәләр, ҡарсыға, ыласын, торомтай, һыйғыр, яғылбай һ.б. ваҡ ыласындар менән үрҙәк, ҡор, сел, ағуна, һуйыр, ҡаҙ, ҡуян һәм башҡа ризыҡ булырҙай ҡоштар, йәнлектәр аулағандар. Йыртҡыс ҡоштарҙы һунарға өйрәтеү алымдары нигеҙҙә бер төрлө булһа ла, һунар алымдары, тотоу, өйрәтеү, ашатыу бер ни тиклем айырыла.

Инә ҡаҙ аҫтына бөркөт йомортҡаһын һалып, унан сыҡҡан ап-аҡ мамыҡ менән ҡапланған бәләкәй генә йомшаҡ себеш йөн һалынған бүрек эсендә мейес башында тиҙ кибеп, яҡтылыҡҡа, йылы ергә, бүреге менән элеп ҡуйғас күп тә үтмәй сипылдап ашарға һорай башлай. Сипылдау сәғәттәр үткән һайын көсәйә, талап шаулыраҡ, хатта даулыраҡ була башлай, сөнки ул бүректең ситенә сығырға сәбәләнә. Ағайым тәбиғәттәге, беҙҙең Көнсығыш Уралдағы йәнлектәрҙең, ҡошҡорттоң фиғел-булмышын яҡшы белә ине. Бына ул сыбыҡ осона йөнлө тире кисәге кейҙереп, уның башына ит элеп, бөркөт балаһының суҡышы алдына килтерә. Тәүҙә сигенә биреп аптырап ҡалған себеш, сыбыҡ ҡыбырлауын күҙәтеп ултыра торғас, эске йыртҡыслыҡ хисе уянып, башта ынтылып, тире йөндө суҡып ала. Әҙ генә ултыра торғас, асыуы килеп булһа кәрәк, алдында бер туҡтауһыҙ һелкенеп торған кисәкте ҡабып ала. Күрәһең, тәмле кисәк уның барлыҡ теләген, йыртҡыслыҡ хисен уята. Тағы ла ит кисәге алдына килгәнсе сипылдап, бүрек эсендә тулғана. Икенсе өлөштө ул батырыраҡ, көттөрмәйенсә ала. Ә өсөнсө, дүртенсе өлөштө төйөнлө "баш" алдында күренеү менән үк һоғона. Шулай үҫте бөркөт ағайымдың ғаиләһендә. Бөркөт балаһының үҫеүен, уның барлыҡ ҡылыҡ-ғөрөфөн, ситтә йәшәүем сәбәпле, һәр көн күрә, өйрәнә алманым. Әммә осрашҡас, ағайым уны һәр саҡ һөйләр булды.

Ай ярым самаһы себешкә тик йомшаҡ ит ашатҡан ул. Эс-ҡарын, үпкә-бауыр, эсәк, ваҡланған ҡыр ҡошо, өй ҡошо, йомран һ.б. - бөтәһен дә үҙ иткән. Әммә һыу эсерергә өйрәтеү бик ауыр булған. Һәр ваҡыт ауыҙына һалып тороу ауыр булғанлыҡтан, ояһы эсендә ағас өңмәгә шешәнән сепрәк аша һыу тамыҙып ҡуйған. Тәбиғәт үҙенекен итә. Ит ашағас, һыу эскеһе килгәндер. Эскән, өйрәнгән. Тыпылдап тамған тамсы тауышы уны өңмә ағастағы һыуға саҡырған...

Йәш бөркөттөң ҡаурыйҙары морон төрткәс, йыртҡыслыҡ ғәҙәтен тыуҙырыу өсөн эшкәртелмәгән ит бирә башлаған. Әлбиттә, ул саҡта себеш-бөркөт һарайҙа үҙ бүлмәһендә йәшәгән була. Эшкәртелгән ит, тигәнем турғай, күгәрсен, йомран һәм башҡа ҡош-ҡорт, йәнлек ите була. Ҡаурыйҙары эреләнеп ҡатып бөткәс, ара-тирә тере ҡош, йән эйәһен биреп, һунарсылыҡ хисен нығыталар. Йыртҡыс ҡоштарҙың тәбиғәт менән йыртҡыслығы һалынғанын шунан да белеп була. Үҫеп камил була барған һайын тере ҡошҡа, тере йәнлекте баҫырға, соҡорға теләге, әүәҫлеге арта ғына бара. Ағайым үҫтергән бөркөттөң ғөрөф-ғәҙәтен мин һәр саҡ мөмкинлек табып күҙәтә килдем. Үҫеп етеп, фиғеле менән бөтөнләй оло ҡош кеүек булғас, ул үҙенән-үҙе ағас ҡумтанан - ояһынан төшөп, һарай эсендә осорға мәшәҡәтләнә башлай. Ҡоштоң осор осоро етеүен ҡойроғонда арҡыры аҡһыу һыҙат эҙе билдәләй. Олоғайғас, ул асыҡ төҫ алып, киңлеге 15-20 мм самаһын тәшкил итә. Осорға өйрәтеү - үҙе бер мөғжизә. Ағайымдың бөркөттө һунарға өйрәтеүен һүрәтләйем.

Беренсенән, тәүге көндәрҙән үк бөркөт балаһына ит бирер алдынан ағайым башта һыҙғыртыуыс менән һыҙғырта, шунан һуң ғына ашата ине. Тора-бара ҡош һыҙғыртыуысҡа шул тиклем өйрәнде, ағайым һыҙғырыу менән "ҡъяҡ-ҡъяҡ-ҡъяҡ" тип тауыш бирә ине. Һарайға кереп ит бирер алдынан тағы бер һыҙғырһа, бөтөнләйгә тыныслығын юғалта. Тулай, ҡанат ҡаға, тауышлана башлай ине.

Ҡәртнәйем яҡтан оло ҡарттайым Хисмәт бүресе, бөркөтсө булғанлыҡтан, уның бүре алыу, бөркөт өйрәтеү алымдарын беҙгә бабайҙарым, ҡарттайым Сәлимгәрәй Ҡорамшин йыш ҡына һөйләр булды. Ағайым һунарға бик әүәҫ булғанлыҡтан, был алымдарҙы бик яҡшы үҙләштергәйне. Уны мин дә үҙемә етерлек һеңдергәйнем. Ағайым бөркөт ҡулда ултырып өйрәнһен өсөн уның башына томаға кейҙереп, тағараҡҡа ултыртып ҡуйҙы. Тағараҡ һәр саҡ бәрелеп торғанлыҡтан, күҙе ҡапланған бөркөт, йығылып төшмәҫ өсөн, һәр саҡ ҡанаттарын елпеп, тигеҙлек һаҡлап ҡалырға тырыша ине. Ике аҙна, кәрәк булһа, өс аҙна, ул шулай интегә. Ҡартатайҙар бер йәшлек йәки иркенлектә йәшәгән оло бөркөттө тотоп өйрәткәндә, уны башта уҡ тағараҡҡа ултыртҡандар. Ашатыр алдынан уны хужаһы үҙ тауышына өйрәткән. Сөнки бөркөт ишетеп өйрәнгән тауышты ғына үҙ иткән, башҡаларға тауыш та бирмәгән, осоп та килмәгән. Шуға ла ағайым уға һәр саҡ тимер юлсыларҙың әсе һыҙғыртыуыһын ҡулланды, сөнки ул үҙе тимер юлында эшләне. Бөркөтөнөң аяҡтарына ҡыҫҡа ныҡ ҡайыш менән бәләкәй генә сыңға бәйләп ҡуйҙы. Нәҙек оҙон ныҡлы бауҙы сыңға аша үткәреп, ҡулында тота торғайны. Тәүләп ул томағалы бөркөтөн арбаға ултыртып, ат менән сыға. Тейешле урын һайлап, бөркөттө күбә башына ултырта ла аяғына бәйләнгән оҙон бауҙы ергә таяҡ менән ҡағып ҡуя. Томағаһын сисә. Үҙ ғүмерендә ҡыр, иркенлек күрмәгән бөркөт башта ҡурҡып ҡала. Ултыра торғас, ул хужаһын һәм атты таный, дәртләнеп тауыш бирә. Ҡанаттарын елпей. Шул саҡта ағайым һыҙғыртыуыс менән һыҙғыра ла бәйгә бәйләнгән төлкө тиреһен бөркөт алдынан һөйрәп үтә. Яй ғына һөйрәлеп барған "төлкөгә" башта бөркөт иғтибар итмәй. Икенсеһендә лә шул үк ҡабатлана. Өсөнсө тапҡыр ағайым оҙонораҡ бау менән тирене бик шәп тартып үтә. Тиҙлеккә бөркөт тиҙ иғтибарлай. Күбә башынан үҙ ғүмерендә тәүләп һауаға күтәрелә, ҡамыш араһынан барған "төлкөгә" ташлана. Осоп килеп, эсенә бесән тултырылған тиретөлкөгә ултыра ла ҡанаттары менән һуға, соҡой башлай. Шул арала ул үҙ өлөшөн - итте ала. Быңдай дәрес күпме барғандыр, уныһын белмәйем. Тора-бара ағайым бөркөтөн һыбай алып сыға башланы. Ярҙамсы һыбайлы оҙон бау менән ат ҡойроғона тағылған тирене йән-фарман сабып һөйрәй. Арттан сабып барған ағайым томағаһын сисеп, бөркөтөн осора. Бөркөт "сабып" барған "төлкөнө" һауанан тиҙ күреп, тағы ла тире өҫтөнә ҡуна. Быңдай дәрестәр оҙаҡ ҡына дауам итте. Ниһайәт, ағайым һыбай сығып, ҙур яланда үр ҡуянына тап була. Бөркөтө уны шунда уҡ баҫа. Үр ҡуяны ҡорос тырнаҡтың тәүге һәм ысын табышы була...

Ағып барған көндәлек тормошта айырым иғтибарға лайыҡ уҡ кеүек күренмәһә лә, ауылыбыҙҙа үҙенсәлекле һәм һәләтле кешеләр бихисап. Шуларҙың береһе - ғүмерен йылҡы ҡарауға, йылҡы үрсетеүгә бағышлаған һунарсы Ғәйфулла ағай Моратшин. Ул Ирәндек тауының ҡаялары араһынан бүре көсөгө алып, өйөнә килтереп, аҫырап үҫтерҙе. Ете-һигеҙ айҙан көсөк бүрегә әйләнеп, бүрелек вазифаһын үтәп, Ғәйфулла ағайҙың тауыҡтарының, ҡаҙҙарының "йөнөн туҙҙырғас", ул уны сынйырға бәйләне. Бүре көсөгө эттәр менән аралашыуға барманы, оло, ҙур эттәр ҙә уға яҡын килергә батырсылыҡ итмәне... Үҫә төшкәс, сынйырҙа булыуына ҡарамаҫтан, бүре көтөүҙән ҡайтып абайламай яҡын килгән һарыҡ-кәзәһенең дә итен татыны. Көҙ еткәс, ул ғәҙәте буйынса олой башланы. Бүрене бүреккә һалһаң да урманға ҡарай, тиеүҙәре дөрөҫ инде...

Ағайым күгәл (ҡыр) өйрәк йомортҡаларын баҫҡан тауыҡ аҫтына һалып, өс үрҙәк бәпкәһен аҫраны. Тауыҡ уларҙы үҙ итеп, ҡанат аҫтына керетһә лә, ҡурҡыныс килеүе тураһында тауыш бирһә, ниндәй тойғо менәндер уны аңлап, был бәпкәләр таҡта ярыҡтары, оя аҫтына ҡасып бөтәләр ине. Нисек аңлаған улар тауыҡ телен? Ә бына ем һалһалар, тауыҡтың ашарға саҡырып көртөлгәнен улар аңламаны. Үҫеп еткәс, ҡапҡа аша осоп, һаҙлыҡҡа китәләр, асыҡһалар, кис осоп ҡайтыр булдылар. Көҙ көнө береһе генә бәлеш була алды. Икеһе осоп көньяҡҡа китте. Ағайым уларҙы яҙ көнө көттө, ләкин ҡайтманылар. Ҡаҙҙар, тауыҡтар, өй үрҙәктәре был өс йылғыр ҡыр үрҙәген сит үк күрмәне. Болаша-болаша бергә ашанылар.

Күрәһең, ҡыр йәнлегенең теле башҡа. Ә бөркөттө ағайымдың ҡош-ҡорто күрһә, йә тауышын ишетһә, ҡурҡыштарынан һөрән һалып, ҡысҡырып, ҡасыр булдылар.

Үҙ ата-инәһенә йәки етәксеһенә, хужаһына бүренең дә, бөркөттөң дә бик ныҡ бирелгәнлеге шунан ғибәрәт. Улар үҙ хужаһынан башҡаны танымай, тыңламай һәм буйһонмай. Уларҙың хужаһы кеше йөҙөндә тик бераү генә. Шуғалыр ҙа, бәлки, ағайым бөркөттө бик кешегә күрһәтеп барманы. Ҡарарға һораһалар ҙа ризалашманы. Бөркөткә балаларын да яҡын ебәрмәне. Ниңәлер бәләкәй балаларҙы яратманы бөркөт. Уларҙы күрһә, ҡанаттарын күтәреп ыҫылдар булды.

Һыбай йөрөгәндә "балдаҡҡа" һалынған ҡул сығанағына йә арба алдына махсус ултыраҡҡа тире ҡағыла. Һунарға сыҡҡанда башы томаға менән ҡапланған бөркөт шунда ултыра. Сыңғалы нәҙек ҡайыш менән ҡунмаға аяғынан бәйләп ҡуйыла, сөнки ҡырға сыҡҡанды аңлаған бөркөт, тотмаһаң, осоп китергә тора. Өйҙә бөркөттө һәр саҡ тағараҡҡа ултырталар.

Хәҙер уҡыусы беҙҙең Башҡортостанда бик һирәк осрай торған һунар ҡошоноң - ағайымдың "ҡорос тырнағының" артабанғы яҙмышын белгеһе килер. Артыҡ шауламай, кеше күҙенә лә күренеп бармауҙы үҙ ҡағиҙәһе итеп алған ағайым "ҡорос тырнағы" менән ҡуяндар, төлкөләр, хатта ҡыр кәзәһен дә алғанын тасуирлап һөйләп алайым. Үҙе тимер юлында эшләгәнлектән, ҡышын көндәр ҙә ҡыҫҡа булыу сәбәплелер, ҡар ҡалынайғас, ҡош менән һунарға сыҡманы. Өшөй, ти торғайны. "Ҡорос тырнаҡ" ҡышты махсус һарай бүлмәлә үткәрҙе. Йыраҡ уҡ булмаған ферманан йоғошһоҙ сирҙән үлгән мал итен килтереп, ваҡлап, күпме теләй, шул тиклем алдына ҡуя ине.

Яҙ етеп, көндәр йылынғас, ул уны иреккә ебәреп ҡараған. "Ҡорос тырнаҡ" бик бейеккә күтәрелеп, ситкә осоп китә. Һыҙғырһа ла ишетмәй, килмәй. Әммә ике сәғәт самаһы үтеүгә ул шау-шыу ишетеп урамға сыҡһа, өйҙәре алдындағы һаҙлыҡ-күләүек ситендә бөркөтөнөң бер ҡаҙҙың йөнөн туҙҙырып ашап ултырғанын күрә. Был ваҡиғаға шаһит күршекүлән, таяҡ һәм көйәнтәләр менән ҡоралланып, эттәрен һөсләтеп, ҡаҙҙы ҡотҡарырға ашыға. Тауыш-ғауғаға "ҡорос тырнаҡ" һиҫкәнеп һауаға күтәрелә. Апайҙар, малайҙар өйҙәренә таралыша, тик хужалары ҡурсауынан батырланған ҙур бул-

✓ *Кейем кешенең йәше, социаль хәленең дә сағылышы бит. Шул йәһәттән тағы бер фекеремде әйтмәксемен. Нишләптер "Ете ҡыҙ", "Хан ҡыҙы" бейеүҙәрендә ҡашмау кейәләр. Ҡашмау бит кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙың баш кейеме.*

маған эт кенә ҡаҙ мәйете тирәһендә темеҫкеп урала. Был ваҡиғаларҙы һауанан күҙәтеп, кешеләр таралғанын күргән "ҡорос тырнаҡ" таш булып эткә ташлана. Өҫтөнән осоп үткәндә бер нәмә лә һиҙмәй еҫкәнеп йөрөгән этте аяҡтары менән шул тиклем көслө итеп тибә, эт шунда уҡ сыйылдап барып төшә. "Ҡорос тырнаҡ" күтәрелә биреп өйөрөлөп килә лә сайылдап өйөнә табан ыңғайлаған этте елкәһенән эләктереп, һауаға күтәреп алып китә. Быны күргән бөтә кеше шаҡ ҡата. "Ҡорос тырнаҡ" этте бик бейеккә күтәрә лә ысҡындырып ебәрә.

- Күктән осоп килгән этте күреп, аптырап ҡарап торҙом да аҙаҡ барып ҡараным. Ауырлығын самалап, һигеҙ кило тирәһелер, тип ныҡымта яһаным, - тиер ине ағайым.

Үҙе дүрт-биш кило булып, һигеҙ килограмлыҡ ауырлыҡты 250-300 метр бейеклеккә мендереү өсөн бик ғәйрәтле булырға кәрәк бит. Ә беҙ 140-160 килограмды бер-ике минут эсендә ундай бейеклеккә күтәрә алабыҙмы? Иҫ китмәле ҡарыулыҡ, ғәйрәт бар бит бөркөт ҡанатында.

Был ваҡиғанан һуң ул ағайымдың баҡсаһы артындағы Шәһи түбә башындағы таш өҫтөнә ҡуна. Ағайымдың һыҙғыртыуыс менән һыҙғырыуын ишетеп, осоп оя һына ҡайта. Тыныс ҡына йәшәй ул. Тимер юлсыларҙы йыш ҡына "Транссибирь" юлына ла эшкә йөрөттөләр. Был осорҙа, ахыры, ул асығыуға дусар була. Еңгә уны йыш ҡына ирекке сығарып ебәрер була. Күрәһең, ул тамағы туйғас, кире ҡайтҡандыр. Әммә көн һайын түгел. Ә ағайым өйҙә булғанда ул һәр саҡ өйҙә, үҙ оя һында булды.

1994 йыл булһа кәрәк, Өфөнән "Хазина" ижад берекмәһе "Барын-Табын йырҙары" тигән нәфис фильм төшөрөргә беҙгә, Учалы районына, килгәйне. Уның етәксеһе Юлай Ғәйнетдиновҡа мин бөркөт тураһында һөйләнем. Ҡыҙыҡһыныу табып, бөркөттө ҡарарға һәм төшөрөргә машинала күрше ауылға, Ҡорамаға, ағайыма йүнәлдек. Юлыбыҙ уңманы. Ағай инде аҙна-ун көн ситтә, "Транссибирь" магистралендә командировкала икән. "Ҡорос тырнаҡ"ҡа ит булмау сәбәпле, осороп сығарып ебәргәндәр. Ул эттәр менән һуғышҡан. Бер эткә йәбешкән икән, тағы ла ике эт уға килеп ташланған. Нисек ҡотолғандыр. Әммә бик ныҡ тешләнгән була. Шулай ҙа үҙаллы оса алған. Ситкә осоп китә лә ике-өс көн үтеүгә тағы ла кире килеп, шул уҡ Шәһи түбә ташына ултырып, оҙаҡ ҡына ял итеп, кире осоп китә икән. Юлай Ғәйнетдинов менән килгәндә лә ул йөндәре таушала биреп, Шәһи түбә ташы өҫтөндә ултыра ине. Соҡона, үҙ-үҙен таҙартҡан кеүек була. Әллә дауаланды, әллә ағайымды көттө ул. Беҙ уға ҡамасауламанык.

Хәҙер ағайым да, "Ҡорос тырнаҡ" та юҡ. Ә күңелемдә һаман да икеһе лә шул тау өҫтөндә бер бер еһен көтөп-ҡарап торалар кеүек...

(Дауамы бар).

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

МУЗЕЙҘА, КИТАПТА...

дөрөҫ өлгөләр етерлек

Учалы ағинәйҙәре сарыҡ, ҡаталарын күрһәтә.

"Киске Өфө" гәзитенең 11-се һанында Сәрүәр Суринаның Роза Юлдашбаева менән булған әңгәмәһен уҡығас, милли кейемгә бәйле бер нисә фекеремде еткермәксе булдым. Ғәмлеләрҙе милли кейемдең бөгөнгө торошо, моғайын, уйға һалмай ҡалмайҙыр.

Ағинәйҙәр башланғысында бар республика ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемгә тотоноуы - бер яҡтан, ҡыуаныс. Әммә эргәлә өйрәтеүсе оҫта булмауы арҡаһындамы, Роза Рафиҡ ҡыҙы әйтмешләй, тарихи дөрөҫлөктән ситләштек, саманан ашып киттек. Нисек тегеп кейһәк тә, биҙәүесте ялтырауыҡҡа күмһәк тә ярамаймы ни, үҙемә шулай оҡшай, тигән бер ҡатлылыҡҡа баш түбән сумдыҡ. Ҡайҙа нимә күрәбеҙ, шунан өлгө алабыҙ. Республиканың бер районындағы сираттағы ағинәйҙәр йыйынында бер ҡатындың түшендәге биҙәүесенә иғтибар иттем. Ярайһы ғына ҙур итеп тегелгән ҡыҙыл буҫтауға анда-һанда өсәр-өсәр итеп магазиндан һатып алынған ҡалай тәңкәләр баҫылған. Һөйләшеп киттек.

- Был биҙәүесте һеҙҙең яҡта нимә тип йөрөтәләр?

- Селтәр.

- Өлгөнө ҡайҙан алдығыҙ?

- "Башҡортостан ҡыҙы" журналынан

Минеңсә, журнал уны айырым биҙәүес итеп бирмәгәндер, әммә журналда һүрәте баҙылған ҡатындың муйынындағы ошондай "селтәрҙән" өлгө алған да ҡуйған был ханым. Һәм быйнай миҫалдар бик күбәйеп китте. Шуға ла Республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының "Хаталар өҫтөндә эш" акцияһы иғлан итеүе бик ваҡытлы һәм урынлы булды. Беҙ, Учалы ағинәйҙәре, оло яуаплылыҡ менән тотондоҡ үҙебеҙҙең хаталарҙы төҙәтеү эшенә. Күлдәк-камзулдар, биҙәүестәр үҙебеҙҙең ырыу үҙенсәлектәренә ярашлы эшләнә. Әле беҙ башҡорттоң традицион аяҡ кейемдәрен - ҡата, сарыҡ эшләү менән мәшғүлбеҙ.

Барыбыҙ ҙа хәреф таныйбыҙ, әйҙәгеҙ, яныбыҙҙа өйрәтерлек оҫта булмаһа, китаптарҙан үҙебеҙ уҡып өйрәнәйек. Теләгәндәргә өйрәнеү мөмкинлеге юҡ түгел. Руденконың, Камалиеваның китаптарында милли кейемдең һәр төбәккә хас өлгөләре, аңлатмалары бирелгән. Урындағы музейҙарҙы ла файҙаланырға була, олораҡтарҙан да һораштырырға мөмкин. Үҙең төбөнә төшөп, төшөнөп эшләп алған биҙәүес икеләтә-өсләтә ҡәҙерле буласаҡ. Һандыҡ төбөндә ниндәйҙер бер ғиллә менән һаҡланып ҡалған өләсәйҙәр комартҡыһына эйә булған ағинәйҙәребеҙ әллә ниндәй оло хазинаға эйә булғандай ғорурлыҡ кисерә. Балаларыбыҙға ҡәҙерле бер комартҡы итеп ҡалдырырлыҡ булһын беҙ бөгөн теккән милли кейемебеҙ, биҙәүестәребеҙ, тип әйтмәксемен.

Ниәт иткәндә, дөрөҫ өлгөләрҙе табып була. Мәҫәлән, беҙ, Учалы районы ағинәйҙәре, яғаның (беҙҙең яҡта селтәр ҙә, һаҡал да түгел, ә яға тиҙәр) нисек эшләнгәнен, уның мотлаҡ ниндәй өлөштәрҙән тороуын, нигеҙенең тулаға ҡыҙыл буҫтау тегеп эшләнгәнен, нигеҙенең формаһын, ни өсөн яға тип аталғанын яҡшы беләбеҙ. Шуныһы, боронғо көмөш тәңкәләрҙән, ысын мәрйендән түгел эшләгәнебеҙ. Көмөш тәңкәләр табып булғанда ла, уларға эйә булырға хәлебеҙ етмәҫ ине. Шуға күрә мин үҙемдең "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының иғтибарын заманында ҡалҡыбыҙҙың иҫ киткес зауыҡлы булыуына, матурлыҡты һанлай, баһалай белеүе менән бергә ни тиклем етеш, бай тормошта йәшәгәнлектәренә лә йүнәлтергә тырышам. Әйҙә, ул саҡтағы ҡалҡыбыҙҙың көнитмеше менән ғорурланып ҡына йәшәйек. Көмөш тәңкә үк булмаһа ла, бөгөнгө әйләнештәге тинлектәребеҙҙе, булғандар совет заманы тинлектәрен, яһалма булһа ла ҡыҙыл төҫтәге мәрйенде файҙаланабыҙ. Шунан артығын, ялтырауыҡтарын ҡулланмайбыҙ.

Әйткәндәй, таҫтар тураһында бер ни тиклем мәғлүмәт бирер ергә кәрәк. Ҡыҙҙар таҡыя кейгән. Әле быйыл Ҡарһылыуыбыҙға ла аҡ мәрйендән эшләнгән ҡашмау кейҙереп ҡуйҙылар. Иларһың да, көлөрһөң дә, әммә бар халыҡ телевизорҙан шуны күрә, дөрөҫ тип ҡабул итә. Бына ҡайҙан баш ала хаталар. Республикала танылған ғына Guzal Dance төркөмө шундай хаталарға юл ҡуя. Халыҡ ижадын өйрәнмәйҙәр, белмәйҙәр, һанламайҙар. Әллә, сәхнәлә ярай ул, тип ҡарайҙармы икән тип уйлап та ҡуяһың. Минеңсә, оло сәхнәгә баҫҡан ижад кешеһе тәү сиратта үҙе өлгө булырға тейеш түгелме икән? Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың "Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы"н уҡығыҙ, зинһар, тип әйтке килә. Унда бит ҡыҙ башындағы таҡыяға болашыу, ҡашмау кейҙереү йолаһы бик матур тасуирланған. Ҡашмау кейҙең - ир ҡатыны булдың, тигәнде аңлата. Әлеге шул "Ете ҡыҙ" ҙы бейергә сыҡҡан төркөмдөң түшендәге биҙәүестәрен кем шулай боҙоп эшләне икән тип хайран ҡалғаным да булды. Шулай һаҡһыҙ ҡыланабыҙ. Халыҡ ижадына, милли кейемгә бәйле әйберҙәрҙе экранға, сәхнәгә сығарыр алдынан ҡырҡ тикшереү үткәрһендәр ине ул, тип уйланаһың. Билдәле "Байыҡ" тапшырыуында баһалама төркөмөндә кейем белгесе мотлаҡ булырға, хаталарҙы төҙәтеп барырға тейешлек тураһындағы фекер менән тулыһынса килешәм.

Инде бер нисә йыл "Евразия йөрәге" фестивале сиктәрендә Өфөлә милли кейем парады үткәрелә. Тәүге йылда был сара хаҡлы рәүештә башҡорт халҡының милли кейеменә генә арналһа, артабан иһә башҡа милләттәр ҙә ҡушылды. Әлбиттә, быны киң күңеллелек билдәһе, толерантлыҡ тип аңлайбыҙ. Әммә әтнәкәһе шунда: был бутҡала ниндәй кейем дөрөҫ, ниндәйе дөрөҫ түгел икәнен дә аңғармайбыҙ. Үтһә - булды, халыҡ бер йыйылып алһа - булды, тигән кеүек кенә ойошторолған һымаҡ була башланы был сара. Үткән йәйҙәге сарала беҙҙең райондан Бөйҙө ауылы ағинәйҙәре ҡыҙыл бәздән үҙебеҙҙең ерлеккә хас булған күлдәктәр тегеп, итәгенә үҙебеҙсә (музейҙа шундай өлгө бар) элмәле сигеү һалып, камзулдарын да үҙебеҙсә тәңкәле итеп кейем әҙерләнеләр. Ошо парадҡа барыр өсөн. Ҡайтҡас, әйткән һүҙҙәре шул булды: "Унда ней халыҡ сәхнә кейеме кейеп сыҡҡан даһа. Күренекле генә кешеләрҙең дә кейгән генәһе бер ҙә ҡыуандырманы..." Сәхнә кейеме менән ысын милли ерлектәгеһен айыра белеүҙәренә, берҙән, шатландым. Икенсенән, был бутҡала милли кейемгә дөрөҫ юҫыҡта үҫергә мөмкинлек булмауына көйөндөм. Һуң был сара тап үҙебеҙҙең милли кейемде дөрөҫ әҙерләп кейергә, йылдан-йыл формалаштырырға, юғары кимәлгә күтәрергә булышлыҡ итеүҙе маҡсат итмәйме һуң? Ул саҡта ни өсөн анау хәтле йыраҡтан халыҡ йыйырға? Һөҙөмтәһе һөйөндөрмәгәс. Милли кейемдең дә йәш быуынға түкмәй-сәсмәй, бар дөрөҫлөгөндә тапшырыла торған комартҡы икәнен иҫтән сығармаһа ине яуаплы кешеләр.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтер инем: милли кейемгә арналған саралар һәр яҡтан яҡшы уйланылған, емешле һәм һөҙөмтәле, башҡорт халҡы өсөн файҙалы булырға тейеш. Ошо темаға арналған семинарҙар, түңәрәк ҡорҙар, оҫталар мәктәбе ойошторов, белгестәр саҡырып, уртаға һалып һөйләшәйек. Әйтергә кәрәк, үткән йыл йәй Милли музейҙа Башҡортостан халыҡтарының баш кейеменә арналған бик матур конференция булды. Белгестәрҙең бик файҙалы сығыштарын тыңланыҡ. Был сығыштар юғалмаһын, китап итеп баҫтырығыҙ, тигән фекер ҙә әйтелеп, электрон вариантта булһа ла эшләрбеҙ, тигәндәр ине лә, булманы. Бар нәмә аҡсаға барып төртөлә шул, музейҙың хәленән килмәгәндер инде. Әйтелгәндәрҙе БР Мәҙәниәт министрлығы ла ишетеп, ябай кешеләрҙең фекерҙәренә лә ҡолаҡ һалһындар ине. Нисек кенә булмаһын, уларҙың оло бурысы был.

Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,
Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.

✓ *Йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген боҙоу өсөн ҙур булмаған тауыш та етә. Тауыш 65 децибелға ғына күтәрелһә лә (ул ҡысҡырып һөйләшеүгә тиң), йөрәк ритмы шунда уҡ көсәйә икән.*

ИНТЕРНЕТТАН

ЕЛӘК-ЕМЕШ АША

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары эксперттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-ендә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарараланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Стресс ваҡытында ҡәһүә эсеү ҡатынҡыҙҙарға яҡшы тәьсир итә. Ә бына ир-егеттәр бындай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙлеген әкренәйтә генә, тип раҫлай Бөйөк Британия белгестәре. Independent News аныҡлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһе ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡәһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡәһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеинһыҙ ҡәһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ирегеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

■ Каролина Эриксон етәкселегендәге тикшеренеүселәр төркөмө билдәләүенсә, йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген боҙоу өсөн ҙур булмаған тауыш та етә. Эксперимент барышында 110 кеше йөрәк ритмын теркәп барыусы портатив мониторҙар йөрөткән. Медицина хеҙмәткәрҙәре улар булған урындарҙа тауыштың кимәлен тикшергән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, тауыш 65 децибелға ғына күтәрелһә лә (ул ҡысҡырып һөйләшеүгә тиң), йөрәк ритмы шунда уҡ көсәйә икән. Шуға ла тауыш көслө булған урындарҙа йөрәк өйәнәге ихтималлығы ла ҙурая.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйына "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың яртыһы ультрафиолет нурҙары аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле быяла һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: тәүге төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларҙыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьсирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары кинәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

■ Америка ғалимдары иртәнге сәйгә шәкәр һалмаҫҡа һәм татлы аҙыҡтар ашамаҫҡа кәңәш итә. Татлы аҙыҡ һәм эсемлектәр ҡандағы шәкәрҙең күләмен күтәреп кенә ҡалмай. Уянғас та тәм-том менән "һыйланған" организмға ғәҙәттәгенән артығыраҡ калория кәрәк буласаҡ. Ғалимдар әйтеүенсә, бигерәк тә юғары калориялы эсемлектәр зарарлы.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

ҮҘЕБЕҘГӘ ҮҘЕБЕҘ...

ғәҙелһеҙлек ҡылмайыҡ!

Хәрби табип булып хеҙмәт иткән дәүерҙә әленән-әле ОРВИ, грипп һымаҡ өҫкө тын алыу юлдарын зараралаусы эпидемия осраҡтары ла булғылай торғайны. Һыуыҡ миҙгелдәрҙә дивизияға, хәрби ҡаласыҡта йәшәгән халыҡҡа бына шул инфекцияларҙың береһе килеп еткән осорҙа табиптар командованиенан һәр саҡ "изоляция" режимы булдырыуҙы талап итә башлай.

Бындай саралар, әлбиттә, частарҙа хәрби әҙерлек һәм башҡа көнкүреш эштәренә ныҡ ҡына ҡамасаулай. Шуғамылыр, командирҙарҙың табиптарҙың ошо эштәрен әллә ни өнәп етмәгәне һиҙелә ине (хатта бәҙәр бер тупаҫ командирҙар табиптарҙы "зараза таратыусылар" тип атап, йәнде көйҙәрә торғайны). Әммә, һис бер нәмәгә лә ҡарамаҫтан, дивизияның медицина хеҙмәте башлығы комдивҡа ошондай карантин сараларының мотлаҡ кәрәк булыуын иҫбат итеп, уға бойороҡ проекты яҙып биргәс, генералға ҡултамғаһын ғына ҡуйырға ҡала. Проектты комдив раҫланы икән, эш кинәт кенә алға китә: шунда уҡ карантин хаҡында юғары командованиеның бойороғо сыға. Ана шул фарманға ярашлы, хәрби ҡаласыҡтағы казарма зоналарында һәр төрлө сикләүҙәр башлана (бөгөнгө бөтә донъяла барған хәлдәр бер аҙ ана шуны хәтерләтә). Һалдаттарҙы мөмкин тиклем казарманан сығармаҫҡа, подразделениелар-ара аралашыуҙарҙы тыйырға, сирлеләрҙе шунда уҡ госпиталдең инфекция бүлегенә һалырға, тигәнерәк мәғәнәлә була был бойороҡ. Госпиталдә урын етмәй башлай икән, тейешенсә йыһазландырып, табип һәм шәфҡәт туташтары ҡуйып, берәй казарманы ана шундай изоляторға әйләндерәләр. Һалдаттарға ашхананан ташып ашаталар...

Бына ошондай мәлдәрҙә һәр саҡ бер ҡыҙыҡ күренешкә иғтибар итә инем. Юғарыла әйтелгән һымаҡ, тейешенсә саралар күрелә башлау менән сирҙең инкубацион осоро (йоҡторған көндән алып, ауырый башлағанға тиклем ара) үткәс, ябай һалдаттар араһындағы әлеге инфекция таралыуы тиҙ арала туҡтала башлай! Ни өсөн, тигән һорауҙы һәр саҡ ҡуя инем үҙемә һәм тейешенсә һығымта ла яһай торғайным. Сөнки ябай һалдаттың, бойороҡто инҡар итеп, ундабында йөрөү, йәғни карантин режимын боҙоу мөмкинлеге сикләнгән. Һалдаттарға ошо режим хатта килешеп тә ҡала: төрлө эштәрҙән арынып, улар "йоҡо туйҙырып" алалар. Ә иң ҡыҙығы шунда: һалдаттарҙан айырмалы, офицер коллективында инфекция оҙағыраҡ йөрөй. Ни өсөн? Сөнки, был контингенттың өйҙә тик ятыу мөмкинлеге һис кенә лә булмай торғайны. Һәр төрлө кәрәк-кәрәкмәгәнгә командир янында уҙғарыла торған кәңәшмәләргә йөрөүҙе дауам итә офицерҙар. Ғөмүмән, офицер һәм прапорщик коллективында әлеге әйтелгән "изоляция режимы" тигән нәмәне үтәү юҡ кимәлендә була.

Бынан тыш, башҡа һәр ерҙәге һымаҡ, ана шундайраҡ эпидемик хәл миҙгелендә әрмелә лә хәрбиҙәргә төрлө профилактик прививкалар яһау кәрәк саҡтар булып тора. Был осраҡтарҙа ла поликлиникаға һалдат халҡын старшина дәррәү теҙеп алып килә. Ә инде медицина хеҙмәткәре уларҙы исемлек буйынса тикшереп, тейешенсә уколын да һалып сыға. Поста һәм башҡа наряд-фәләндәрҙә тороп ҡалған бер нисә һалдатты һуңынан санитар-инструктор медпунктҡа алып килә. Һөҙөмтәлә, теләйме-теләмәйме, бер һалдат та прививкаһыҙ ҡалмай. Ә инде әлеге лә баяғы офицер-прапорщиктарға килгәндә, кемдер әйтмешләй, әпәт шул уҡ проблема. Хатта бәҙәләр үҙҙәренсә хәйләләп, бындай сараларҙан "ҡасып" та ҡалғылай. Медиктарға уларҙы тотоп алыуы ҡатмарлыраҡ. Ҡайһы бер осраҡтарҙа, командирға тейешенсә рапорт яҙып, административ яза менән ҡурҡытып, шуның аша мәжбүри саҡыртып ҡына алырға тура килә. Әгәр профилактик прививканы часть командиры үҙе иң башта килеп яһата икән, быныһы - иң яҡшы осраҡ. Сөнки, үҙе укол яһатҡан командир башҡа бер офицерҙы ла "имен" ҡалдырмаясаҡ...

Бының менән нимә әйтмәксе булам, хөрмәтле яҡташтар. Бөтә донъяла, хатта илебеҙҙә лә COVID-19 тип аталған ҡурҡыныс вирус йөрөгәндә хөкүмәт органдары ана шундай сараларҙы мәжбүри рәүештә ойоштора икән, был - тик яҡшыға ғына! Үкенескә, талап ителгән сикләүҙәрҙе тотмағандар осрап тора. Кәрәкһә-кәрәкмәһә лә төрлө йәмәғәти урындарҙы ҡыҙырырға яратыусылар, урамдарҙа битлекһеҙ йөрөгәндәр, өйгә ингәс, ҡулдарын һабынлап йыуырға йыбанған йә иһә сирләп китеп тә был хаҡта йәшереп маташҡан кешеләр үҙҙәре генә түгел, ә балалары, туғандары өсөн дә хәүеф сығанағы булып тора. Илебеҙҙә килеп тыуған бына ошо ауыр ситуацияға айыҡ күҙ менән ҡарайыҡ. Үҙебеҙгә-үҙебеҙ ғәҙелһеҙлек ҡылмайыҡ!

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,
отставкалағы медицина подполковнигы.

ҺАБАҠТАР

АҠЫЛҒА УЛТЫРТЫРМЫ?

Бөгөн минән ғәфү үтенделәр... Юҡ, ул кешенең мине рәнйеткәне булманы. Хатта ауыр һүҙ әйткәнен дә хәтерләмәйем. Үҙе әйтмешләй, былай ғына... Мин дә унан кисереүен һораным... Һәм ҡурҡыныс булып китте. Кеше, ғәҙәттә, хушлашҡанда, бәхилләшкәндә, ниндәйҙер бер ҡурҡыныс, хәүеф, упҡын алдында торғанда ғына бер-береһенән ғәфү үтенә.

Коронавирус... Һин ҡасан тажыңды һалырһың? Ҡасан бөтә ҡитғалар халҡы менән хакимлыҡ итеүеңдән туҡтарһың? Күптәр был яңы вирусты еңгәндән һуң ерҙә бөтөнләй икенсе тормош башлана, тип фаразлай. Ысынлап та, беҙҙең һәр беребеҙҙе үҙ урынына ултыртырмы? Тәүбәгә килтерерме? Ул беҙҙең күңелебеҙҙе нәфсенән, тәкәбберлектән, яуызлыҡтан, һаранлыҡтан таҙартырмы? Берәүгә лә сер түгел: был йоғошло сир ҡыҫҡа ғына ваҡытта кешелек донъяһын аҫтын-өҫкә килтерҙе. Берәүҙәр яҡынын юғалтты, икенселәр үҙҙәре сиргә юлыҡты, өсөнсөләр вазифаһынан ҡолаҡ ҡаҡты. Һуңғы осорҙағы иң глобаль ваҡиғаға әйләнде лә, һәр беребеҙҙең тормошона үтеп инде һәм байтаҡ ҡына тормош һабағы бирҙе.

✓ *Борон боланға бик һирәк һунар иткәндәр. Был һуңғы аҙымға халыҡ бик асыҡҡан саҡта ғына барған. Һәм һунарсыға аҫыл боланға һунарға рөхсәт биргән. Әммә йылына бер тапҡыр ғына!*

ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

Маралдың икенсе исеме бигерәк матур - аҫыл болан. Урыҫтар уны, благородный олень, тип йөрөтә. Был болан ниндәйерәк була икән, тип күптәр аптырап ҡалыр. Әммә ул беҙгә бәләкәйҙән таныш. Иҫләйһегеҙҙер, элегерәк беҙ бер-беребеҙҙе Яңы йыл байрамы менән ҡотлап открыткалар ебәрә торғайныҡ. Шул открыткаларҙың күбеһендә бына ошондай һүрәт булыр ине: ябалаҡлап ҡына эре ҡар бөртөктәре яуа, матур итеп биҙәлгән санала бер ҡулы менән тоғон тотоп, ә икенсеһе менән беҙҙе сәләмләп, шат йылмайып Ҡыш бабай ултыра, ә санаға аҫыл болан егелгән, ул ҡарбурандарҙы туҙҙырып елеп китеп бара! Моғайын, был һүрәт күптәрҙең иҫенә төшкәндер һәм ғәмһеҙ бала саҡтың йылы хәтирәләренә алып киткәндер.

МАРАЛ ЙӘКИ АҪЫЛ БОЛАН

Баҡтиһәң, Ҡыш бабай Яңы йыл бүләктәрен бушҡа ғына аҫыл болан менән бергә таратып йөрөмәй икән. Был хайуан изге, сөнки унда кеше белмәгән, кеше аңлай алмаған ниндәйҙер сихри көс бар, тип иҫәпләй күп халыҡ. Әйткәндәй, Яңы йыл байрамында уны Ҡыш бабай ғына түгел, Санта Клаус та санаға егеп бүләктәр тарата. Аҫыл боланды бушҡа ғына күп милләттәр хөрмәт итмәй, был хайуанда ысынлап та ниндәйҙер бер эске рухи көс бар, ти ғалимдар. Был көс шул хәтлем ҡеүәтле, хатта уны ҡурҡыу белмәҫ зәһәр йылан да күтәрә алмай икән. Ул ситкә шыуышып ҡасыуҙы хуп күрә. Тәбиғәттә аҫыл болан үҙен бик ғорур тота. Тура муйын, ялҡынлы ҡараш, текә тояҡтар, ғорур кәүҙә. Уға һоҡланып туя алмай, ирекһеҙҙән, был хайуан бер ҡасан да бер кемгә лә баш бирмәйәсәк, тип уйлап ҡуяһың!

Заманында аҫыл болан тәбиғәттә күп булған. Урындағы халыҡ уны аулау-өйрәтеү серҙәрен белгән, уны үҙ мәнфәғәтенә тотонған, санаға егеп йөрөп файҙаһын күргән. Был хәлгә ҡағылышлы тапҡыр әйтем бар: атаһы болан өйрәтмәгәндең балаһы ҡолан өйрәтмәҫ. Иҫегеҙгә төшөрөп үтәйем, борон ҡолан тип ҡырағай атты атағандар. Был әйтем үҙе үк әйтеп тора: аҫыл боланға ҡарағанда ҡырағай атты өйрәтеүе күпкә еңелерәк булған. Шуныһы фәһемле, борон боланға бик һирәк һунар иткәндәр. Был һуңғы аҙымға халыҡ бик асыҡҡан саҡта ғына барған. Һәм һунарсыға аҫыл боланға һунарға рөхсәт биргән. Әммә йылына бер тапҡыр ғына! Йылына ике болан алған һунарсының затына ҡасан да бер булһа ҡаты яза төшәсәк, тип иҫәпләгән халыҡ.

Заманында беҙҙең төбәктә күпләп йәшәгән аҫыл болан. Уның тәбиғи ғүмере сама менән 15 йыл тәшкил итә. Аҫыл боландың кәүҙә оҙонлоғо 2,4 м самаһы, ә бейеклеге 1,5 м самаһы була. Ауырлығы уртаса 250 кг тарта. Һирәкләп 300 кг-ға еткәндәре лә була. Төҫө һорғолт. Был боланды башҡалар менән бутап булмай: уның артҡы һыныны ҡойроҡ тирәһе аҡ була. Инәләренең мөгөҙө булмай. Атаһы мөгөҙлө була, мөгөҙ 9 тармаҡҡа хәтлем барып етә. Ата боландар бына ошо мәлдә (март-апрель тирәләрендә) мөгөҙҙәрен һала. Мөгөҙһөҙ оҙаҡ йөрөмәй улар, июль айында яңылары үҫеп тә сыға. Аҫыл боландар иртән һәм кисен туҡланырға ярата. Йәй осоронда уларға аҙыҡ етәрлек. Ҡыш осоронда ағас ҡабығы, ағас-ҡыуаҡ үҫемлектәр менән туҡланырға мәжбүр була улар.

Шуныһы ҡыуаныслы, хөкүмәт тарафынан аҫыл боландарҙы тергеҙеү эше әүҙем алып барыла. Беҙҙең районға 1941-1942 йылдарҙа (Бөйөк Ватан һуғышы барған осорҙа) Алтайҙан 39 баш аҫыл болан килтерелә. Уларҙы Башҡортостан ҡурсаулығы ҡабул итеп ала һәм үҙ биләмәһенә ебәрә. Улар беҙҙең төбәккә ерегеп йәшәп алып китә. Әммә ваҡыт үткән һайын төрлө сәбәптәр арҡаһында уларҙың һаны күпкә кәмей төшә. Ошо хәлде иҫәпкә алып, Башҡортостан ҡурсаулығы 2014 йылда Алтайҙан тағы бер тапҡыр уларҙы алып ҡайтыу эшен ойоштора. Был юлы ҡурсаулыҡ тарафынан 9 баш аҫыл болан һатып алына. Былары ла ерегеп йәшәп алып китә. Әлбиттә, был йүнәлештә хәл итәһе мәсьәләләр етәрлек. Шуныһы ҡыуаныслы, был изге тип иҫәпләнгән хайуандарҙың һаны бөгөн артыу өҫтөндә. Былтырғы йылда был хайуандарға ҡарата ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәре тарафынан 157 осратыу карточкаһы (карточка встреч) теркәлгән. Был карточкаларҙа аҫыл боландарҙың эҙе, тауыш биреүе, үҙҙәре тап килеү осраҡтары кеүек мәғлүмәттәр теркәлеп бара. Ошо барлыҡ мәғлүмәттәрҙе өйрәнгәндән һуң, бөгөн Башҡортостан ҡурсаулығы биләмәһендә сама менән 30-лап аҫыл болан йәшәй, тип фаразлай белгестәр. Беҙҙең ерҙә аҫыл боландарҙың күпләп үрсеүен, уларҙың урман йәме булып йөрөүен теләйек!

Әғләм ШӘРИПОВ,
Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығының
өлкән ғилми хеҙмәткәре.

Иң беренсе, һаулығыбыҙға иғтибарлы булырға кәрәклекте, уның иң ҙур байлыҡ икәнлеген иҫкәртте. Уны бер ниндәй аҡсаға һатып алыу, алмаштырыу мөмкин түгеллеген аңғартты. Аллаһы Тәғәлә биргән сәләмәтлекте ҡәҙерле бүләк кеүек һаҡларға тейешлегебеҙҙе төшөндөрҙө. Быға тиклем иғтибар итмәгән әйберҙәрҙең, тормош мәшәҡәттәренең ҡәҙерен белергә, эргәләге кешеләребеҙҙе хөрмәтләргә, уларҙың тойғоларын ихтирам итергә өйрәтте.

Күптән күрешмәгән танышым шылтыратты:

- Эш тип, донъя артынан ҡыуам тип, ҡыҙымдың ғашиҡ булғанын белмәгәнмен. Һуңғы осорҙа уйсанланып ҡалған, күп ваҡыт өндәшмәй ҡалған баламды апайҙарына ҡарағанда тиҙерәк аҡылға ултырҙы, тип уйлап шатландым. Үҙизоляция иғлан ителгән көндөң иртәгәһенә үк йоҡларға ятҡас, ҡыҙымдың үкһеп илағанын ишеттем. Башҡа ваҡыт булһа, илар ҙа тымыр әле, тип ҡул ғына һелтәр инем. Көнө буйы ял иткәс, йоҡо килмәй, һаҡ ҡына бүлмәһенә индем. Бөркәнер ҙә ятыр инде, тип уйлағайным, юҡ, улай итмәне. Киреһенсә, ҡосаҡлап алды, алдыма ятты һәм класташ егетен ратыуын әйтте. Ә егет ҡыҙымдың әхирәтен оҡшата икән...

Иртәгә бер ҡайҙа ла барырға булмағас, төнө буйы серләшеп яттыҡ. Уға үҙемдең беренсе мөхәббәтем хаҡында һөйләнем. Өс ҡыҙ үҫтереп, был минең тәүге тапҡыр шулай дуҫтарса һөйләшеү ине. Ошо ваҡиғанан һуң ҡыҙым менән ара һиҙелерлек йылынды. Быға тиклем өҫтәлдә ашарына булһа, өҫтөндәге кейеме башҡаларҙан кәм булмаһа, уҡытыусыларынан насар хәбәр ишетелмәһә - барыһы ла яҡшы, тип уйлай инем. Был коронавирус мине, ике тапҡыр өләсәй булған кешене, әсәй булырға өйрәтте...

Был танышым оҙаҡ йылдар инде үҙ эше менән шөғөлләнә. Ире сығып киткәс, яңғыҙы өс балаһын аяҡҡа баҫтырҙы. Ике ҡыҙы ла кейәүгә ауырлы булып сыҡҡас, атайҙарына оҡшағандар, тип, уларға йылы мөнәсәбәтен бик күрһәтмәне шикелле. Бер ҡалала йәшәһәләр ҙә, аралашыуҙары бер-беренен тыуған көндәрҙә, байрамдарҙа ҡотлауҙан уҙманы.

- Кесеһе менән һөйләшкәндән һуң, өлкән ҡыҙҙарыма ҡарашым үҙгәрҙе. Уларға шул тиклем ғәҙел булмағанлығымды аңланым. Аҡса артынан ҡыуып, уларға иғтибар, наҙ бирмәгәнмен. Ә улар уны урамдан тапҡан... Беләм, коронавирус беҙҙе ғаилә булараҡ берләштерҙе тиһәм, мине күптәр тәнҡит утында көйҙөрәсәк. Әммә был ысын мәғәнәһендә шулай, - тине ул хушлашҡанда.

Эйе, коронавирус пандемияһы тиҙ үҙгәреүсән заманда аҙ ғына булһа ла беҙгә туҡталыш алырға, техник термин менән әйткәндә, "перезагрузка" эшләргә кәрәклеген белгертте. Быға тиклем тәнҡитләгән тәрбиәселәрҙең, айырыуса беренсе онлайн-дәрестән һуң уҡытыусыларҙың, медицина хеҙмәткәрҙәренең ҡәҙерен белергә, үҙебеҙ һәм яҡындарыбыҙ алдында яуаплылыҡ тойорға өйрәтте.

Лена АБДРАХМАНОВА.

УҢЫШ ҠАҘАН

ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

16-сы идея Ярамһаҡланыу һәм ихласлыҡ

Ғәҙәттә, беҙ дуҫтарыбыҙға комплименттар әйтергә яратабыҙ, ләкин комплимент менән ярамһаҡланыу араһындағы айырма ер менән күк араһы кеүек. Башҡа кешеләр тураһында ысын күңелдән маҡтап һөйләү - тормошобоҙҙо тулыландырыусы изге ғәҙәт ул.

Ләкин, һәр ваҡыттағыса, әйтәйек, хаҡ һүҙ һәм яҡшылыҡ менән бергә яһалма һүҙ һәм насарлыҡ та йәнәш килеүе, ярамһаҡланыу ҙа ысын комплиментҡа йәнәш тороуы ихтимал.

Ярамһаҡланыуға этәреүсе мотивтар күп булған кеүек, ярамһаҡланыуҙың мотивтары ла бик күп. Уҡытыусыға бер нисә комплимент әйтеп, тырышып уҡыуҙан ситләшеүгә өмөтләнгән студент кеүек, ҡайһы берҙә был да үҙ-үҙеңде осондороу ғына ул. Ҡайһы берҙә күршеләр беренен-беренә уҙҙырып маҡташалар, ысынында иһә бында бер ниндәй эскерһеҙлек тә, ысын маҡтау ҙа булмай. Кемдеңдер ҡанат аҫтына алырына, яҡшы ҡарар ҡылырына йәки хеҙмәт күрһәтеүенә өмөтләнеп ярамһаҡланыу - файҙаһыҙ эш, бушҡа көс түгеү. Күреүегеҙсә, ялағайҙар эштән дә ситләшәләр, шул уҡ ваҡытта, ярамһаҡланыу менән шөғөлләнеп, ауыр "эш" тә башҡаралар. Асылда иһә, ярамһаҡланыу наркотикты хәтерләтә: кемгәлер ялағайлана башлайһың да, ошо ғәҙәттән туҡтала алмауыңды асыҡлайһың. Ялағайлыҡтың арта барыусы дозалары торған һайын аҙыраҡ файҙа килтерә, ә дөйөм һөҙөмтә тулыһынса кире була. Ысын хеҙмәт ҡаҙаныштары менән түгел, ә ялағайланып йәшәгән кешенең йәмғиәттәге тотҡан урыны ла тотороҡһоҙ була. Бындай кешеләр һуң булмаҫ борон, шул уҡ тырышлығын лайыҡлы, изге маҡсатҡа өлгәшеүгә йүнәлтһә, теләгәненә тиҙерәк һәм ауырлыҡтарһыҙ ирешәсәген аңларға тейеш.

Асыҡтан-асыҡ кемдеңдер башын бутау, тәүәккәллеген йомшартыу, кешене үҙ принциптарынан баш тартырға мәжбүр итеү ниәте менән ярамһаҡланыу уғата хәүефле. Ялағайҙарға бер ваҡытта ла ышанырға ярамай. Ялағайҙар менән дуҫ булыу мөмкин түгел, ярамһаҡланыу менән эскерһеҙ һүҙ араһында упҡын кеүек айырма.

Тормош һуҡмағынан барғанда изгелек эҙлә. Ысын изгелекте айыра бел, маҡтарлыҡ нәмәне генә маҡта, ярамһаҡланып күңел тыныслығы табырға, социаль һәм матди хәлеңде яҡшыртырға маташма.

Роберт ЭНТОНИ.
(Дауамы бар).



13 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.10 Время покажет. [16+]
14.00 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.35, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. "У нас все дома". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Зулейха открывает глаза". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "На дальней заставе". [12+]

БСТ

7.00 Сәләм, Республика! [12+]
7.45, 13.00, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
8.00 Сәләм, Республика! [12+]
8.45, 11.15, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
10.00 Открытый урок. [6+]
10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]
12.45 "Выше всех!" [6+]
13.15 Ете егет. [12+]
14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
15.15 Әлләсе... [6+]
16.15 "Гора новостей".
17.30 Колесо времени. [12+]
18.45 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]
19.45 "Бай баҡса". [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Дорожный патруль. [16+]
20.45 Д/с "История одной провокации". [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
22.45 Теге өсәү. [12+]
23.15 Күстәнәс. [12+]
23.45, 4.00 Х/ф "Римские свидания". [16+]
1.30 Бәхетнамә. [12+]
2.15 Спектакль "Свояки". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

14 АПРЕЛЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.10 Время покажет. [16+]
14.00 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.40, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. "У нас все дома". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 "Право на справедливость". [16+]

РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Зулейха открывает глаза". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "На дальней заставе". [12+]

БСТ

7.00, 8.00 Сәләм, Республика! [12+]
7.45, 13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
8.45, 11.15, 15.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
10.00 Открытый урок. [6+]
10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]
12.45 Дорожный патруль. [16+]
13.15 Ете егет. [12+]
14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.15 "Гора новостей".
17.30 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Тайм-аут. [12+]
18.45 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]
19.45 "Бай". [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Криминальный спектр". [16+]
20.45 Д/с "История одной провокации". [16+]
22.00 По сути дела... [12+]
22.45 Земляки. [12+]
23.00 "ВасСәләм!" [16+]
23.30 Х/ф "Код апокалипсиса". [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Счастье с неба". [12+]
4.00 Х/ф "Одинокая женщина желает познакомиться". [6+]
5.30 Счастливый час. [12+]

15 АПРЕЛЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00 Время покажет. [16+]
14.00 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.25, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. "У нас все дома". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Премьера. "Вечерний Unplugged". [16+]

РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Зулейха открывает глаза". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "На дальней заставе". [12+]

БСТ

7.00 Сәләм, Республика! [12+]
7.45, 13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
8.00 Сәләм, Республика! [12+]
8.45, 11.15, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
10.00 Открытый урок. [6+]
10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]
12.45 "Криминальный спектр". [16+]
13.15 Ете егет. [12+]
14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "АйТекә!" [6+]
15.45 "Сыйырсыҡ". [0+]
16.15 "Гора новостей".
17.30, 22.45 Колесо времени. [12+]
18.45 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]
19.45 Үткән ғүмер. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 История одного села. [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.45, 3.45 Х/ф "Я хочу видеть". [12+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Любишь, не любишь?". [12+]
5.00 "Бай". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

16 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00 Время покажет. [16+]
14.00 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.25, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. "У нас все дома". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Премьера. "Вечерний Unplugged". [16+]

РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Зулейха открывает глаза". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "На дальней заставе". [12+]

БСТ

7.00, 8.00 Сәләм, Республика! [12+]
7.45, 13.00, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
8.45, 11.15, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
10.00 Открытый урок. [6+]
10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]
12.45 Дети-герои. [0+]
13.15 Ете егет. [12+]
14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 "Гора новостей".
17.30 "Честно говоря". [12+]
18.15 Замандаш. [12+]
18.45 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]
19.45, 22.45 Автограф. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Криминальный спектр". [16+]
20.45 Д/с "Ограниченный суверенитет". [16+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.15 Земляки. [12+]
23.30 Х/ф "Не оглядывайся". [16+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.30 Спектакль "Гәйфи ағай, өйләп, давай!" [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

17 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
14.00 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Подарок для Аллы". Большой праздничный концерт. [12+]
23.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
1.20 Вечерний Ургант. [16+]
2.15 Д/ф "Билл Уаймен. Самый тихий из Роллингов". [16+]
5.20 Про любовь. [16+]

РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Аншлаг и Компания. [16+]
23.50 Х/ф "С любимыми не расстаются". [12+]
03.15 Х/ф "Ой, мамочки..." [12+]

БСТ

7.00, 8.00 Сәләм, Республика! [12+]
7.45, 13.25, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
8.45, 11.15, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.00 Күстәнәс. [12+]
9.15 Теге өсәү. [12+]
10.00 Открытый урок. [6+]
10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]
12.55 "Урок для первоклассников". [6+]
14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей".
16.30, 19.30 Автограф. [12+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.30 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 "Йома". [0+]
18.45 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 История одного села. [12+]
20.45 Д/ф "Ограниченный суверенитет. Польша". [16+]
22.00 "ВасСәләм!" [16+]
22.45 Уфа. Живое. [12+]
23.30 Х/ф "Жена смотрителя зоопарка". [16+]
2.00 Спектакль "Весело живем". [12+]
3.45 Үткән ғүмер. [12+]
4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
4.30 "Млечный путь". [12+]
5.30 "Наука 102". [12+]
6.00 Историческая среда. [12+]

18 АПРЕЛЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 "Познер". [16+]
10.55, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.40 Д/ф "Алла Пугачева. И это все о ней..." [16+]
16.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.45 Д/ф "Максим Галкин. Моя жена - Алла Пугачева". [12+]
18.50 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.15 Х/ф "Человек родился". [12+]
0.45 Д/ф "Оптина пустынь". [0+]
1.30 Пасха Христова. Прямая трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя.

РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
09.30 Пятеро на одного.
10.20 Сто к одному.
11.10 Смеяться разрешается.
13.40 Х/ф "Когда солнце взойдёт". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Самая любимая". [12+]
23.20 Х/ф "Отогрей моё сердце". [12+]
01.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя.

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.15 Посмотрим... [6+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 Преград. Net. [6+]
10.30 "Книга сказок". [0+]
10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]
11.00 "Апчхи". [0+]
11.15 "Байтус". [6+]
11.30 Детей много не бывает. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Үткән ғүмер. [12+]
13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
13.15 Земляки. [12+]
13.30 Хазина о хазине. [0+]
14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
15.00 "Дарю песню". [12+]
17.00 Колесо времени. [12+]
18.00 100 имен Башкортостана. [12+]
18.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
19.30 Республика LIVE #дома. [12+]
20.00 Ради добра. [6+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Караоке по-башкирски. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз.).
23.00 "Башҡорт йыры". [12+]
23.30 Д/ф "Благословенно дерево". [12+]
23.55 Пасхальная служба из кафедрального собора Рождества Богородицы г.Уфы.
3.00 Х/ф "Одинокая женщина желает познакомиться". [6+]
4.30 Спектакль "Касатка". [12+]

19 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Ангел-хранитель". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.45 Д/ф "Крещение Руси". [12+]
17.30 Концерт Максима Галкина. [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. [16+]
23.10 Д/ф Премьера. "COVID-19. Битва при Ухане". [16+]
0.50 Мужское / Женское. [16+]
2.20 Про любовь. [16+]
3.05 Наедине со всеми. [16+]

РОССИЯ 1

04.30 Х/ф "Я счастливая". [12+]
06.15 Х/ф "Когда цветёт сирень". [12+]
08.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
09.30 Устами младенца.
10.20 Сто к одному.
11.10 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
12.10 Шоу Елены Степаненко. [12+]
13.20 Х/ф "Крёстная". [12+]
17.30 "Танцы со Звёздами". Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
00.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
01.25 Х/ф "Свой-чужой". [12+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 Күстәнәс. [12+]
9.45 Моя вершина. [12+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТекә!" [6+]
10.30 "Сулпылар". [0+]
11.00 "Гора новостей". [6+]
11.15 "Ал да гөл". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз.).
13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
14.45 Башҡорттар. [6+]
15.15 Д/ф "Благословенно дерево". [6+]
15.45 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона. [0+]
16.00 "Дорога к храму". [0+]
16.30, 6.00 Историческая среда. [12+]
17.00 XXVII Международный фестиваль балетного искусства им.Р.Нуреева. [12+]
19.15 Лидеры региона. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 Теге өсәү. [12+]
21.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30, 6.30 Итоги недели (на рус. яз.).
22.30 "Красная кнопка". [16+]
23.15 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.15, 3.45 Х/ф "Убежать, догнать, влюбиться". [12+]
1.45 Спектакль "Земляки". [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]

✓ *Кемгәлер бармаҡ менән төртөп күрһәтеп, уның хәленән көлөргә ашыҡма: гонаһһыҙ кеше юҡ һәм барыбыҙ ҙа тик бер Хоҙай алдында ғына яуап тотасаҡбыҙ. Ауыр уйҙар күңеленде ялмап алған мәлдәрҙә йылмай һәм рәхмәттәр уҡы.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

КОСМОНАВТИКА КӨНӨ

1 Беренсе космонавт
Музыка уйын ҡоралы
(...) - ҡоллоҡ, ҡоллоҡ көнө - хурлыҡ"
"Ит менән (...) араһына кермә"
Һан
Башҡорт милли ашы
Асыҡ космоста 81 сәғәт 21 минут эшләгән 3
Флагына ҡор төшөрөлгән БР районы
Оноҡ батҡан бөжәк
Йоғошло ауырыу
Дәүләттең бөтә байлығы
Тәуге ямғыр
Ямғырҙан һаҡлай
Балҡыҙ, шәкәрһеҙ бауырҡаҡ
4 Башҡорт космонавы
Ер шарының күсәре менән ер өҫтөнөң киҫешкән нөктәһе
Д. Юлтыйҙың романы
"Бармаҡ йәрет - (...) эйҙер, баҡе йәрет - ҡын кейҙер"
Тантаналы көн
"Ағастың йомшағын (...) баҫыр"
Беренсе ҡатын-ҡыҙ космонавт 2
Сабый "кейеме"
Йөн иләгәндә кәрәкле әйбер
Әҙәби әҫәргә анализ яһаусы
"Атмаған ҡуян, аҫмаған (...)"
Тиренән эшләнгән һауыт
Йылға
Көмөштән эшләнгән ҡамзулдағы әлгес
Сәй әсергә яйлы һауыт
"Күлдең йәме (...) менән, өйҙең йәме бала менән"
Әхлаҡи тыйнаҡлыҡ
Үҫәргәндәрҙең бейе
Уны һөйрәтеп ҡарапта балыҡ тоталар
"(...) бала үпкәсел"
Бөтөндөң бер киҫәге
Өс инструмент өсөн яҙылған әҫәр
Мохтажлыҡ
"(...) йөрегән иләктең төбө тиҙ төшә"

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

14-се һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Күбәләк. Ларек. Абаға. Ҡыяр. Сәпсек. Ҡашҡабаш. Ҡыяҡ. Аты. Шоңҡар. Ғәмәл. Сәүкә. Ҡурҙай. Аҡсуға. Ниагара. Бина. Скво. Алҡа. Мавр. Алма. Йолҡ.

Вертикаль буйынса: Ҡыҙғатау. Ҡашыҡморон. Лиана. Ҡарабаш. Гранат. Сәс. Балғабаш. Мә. Асамай. Ағуна. Ай. Кәкресуҡыш. Ҡылғойроҡ. Ромб. Суҡаҡ. Кәсер. Йола.

ҠЫҚҠАСА

УЛАР ЛАЙЫҠ!

✓ **Яңы коронавирусҡа ҡаршы көрәштә алғы һыҙыҡта эшләгән Рәсәй табиптары өс ай дауамында федераль түләүҙәр алырға тейеш. Был хаҡта төбәк башлыҡтары менән кәңәшмәлә Президент Владимир Путин хәбәр итте.** "Коронавирус инфекцияһы раҫланған пациенттар менән туранан-тура эшләгән табиптар өсөн ошондай түләү - айына 80 мең һум. Урта медицина персоналына - фельдшерҙарға, шәфҡәт туташтарына - 50 мең һум. Кесе медицина персоналына - 25 мең һум. Коронавирус йоҡторғандар менән эшләгән ашығыс ярҙам табиптарына килгәндә, уларға айына 50 мең һум түләнә. Фельдшерҙар, шәфҡәт туташтары һәм водителдәргә - 25 мең һум", - тине дәүләт башлығы. Бынан алда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус инфекцияһы менән сирләгәндәргә ярҙам күрһәткән табиптарға өҫтәмә түләү тураһындағы указға ҡул ҡуйғайны. Урта медперсоналына өҫтәмә - 15 мең, кесе медперсоналға - 5 мең һум. Юғары белемле хеҙмәткәрҙәргә - 25 мең.

✓ **БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы үткәргән брифинг барышында мәктәп уҡыусыларына бушлай таратыласаҡ аҙыҡ-түлек йыйылмаһына ҡағылышлы һорауҙарға БР Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе Алексей Гусев яуап бирҙе.** Ведомство етәксеһе дистанцион белем биреү осоронда аҙыҡ-түлек йыйылмалары льготалы тукланыуға хоҡуғы булған уҡыусыларға таратыласағы тураһында белдерҙе. Был күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән булған сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән, инвалид балалар. Аҙна һайын аҙыҡ-түлек йыйылмаһы составы үҙгәртелә, шулай уҡ һәр ҡала һәм районда ул төрлө буласаҡ. Әммә аҙыҡ-түлектең хаҡы бөтәһе өсөн дә бер төрлө ҡуйылған: инвалид балаларға 500 һумға, күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән булғандарға 225 һумға барып быҫырға тейеш. Нимә һалып таратыуҙы урындағы етәкселек үҙе хәл итә. Аҙыҡ-түлекте аҡсаға алыштырып булмай. Мәктәптә йыйылмаларҙы айына ике тапҡырҙан да кәм таратмайҙар. Ҡоро паек алыу өсөн мәктәпкә ғариза яҙып бирергә кәрәк. Уны биреү ҡаралған булһа, мәктәп етәкселеге ата-әсәне тәғәйен ваҡытҡа саҡыра: күп кеше йыйылып китмәһен өсөн график төҙөлә. Ҡайһы бер райондарҙа аҙыҡ-түлекте мәктәп автобусы менән уҡыусыларҙың өйөнә ташыясаҡтар.

✓ **БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин үҙизоляция мөҙҙәте оҙаҡҡа һуҙылыуы һәм дистанцион белем биреүгә күсеү сәбәпле, мәктәп мәғарифы системаһының мөһим үҙгәрештәр кисереүе тураһында һөйләне.** Бөтә Рәсәй һынау эштәре (ВПР) һәм дәүләт аттестацияларын үткәреү ваҡыты күпкә һуңға күсерелде. Уҡыусылар өсөн Бөтә Рәсәй һынау эштәре 2020 йылдың май айында дистанцион рәүештә үткәрелә. Быға тиклем билдәләнгән Берҙәм дәүләт имтиханын (8 июндә) һәм Төп дәүләт имтиханын (9 июндә) үткәреү даталары ла кисектерелер, тип көтөлә. Башҡортостандың 9-сы синыф уҡыусыларына Төп дәүләт имтиханын биреүҙе еңеләштерәләр - улар урыҫ теле һәм математика буйынса ғына һынау тотасаҡ. "Үҙе һайлаған ике предмет буйынса имтиханды 9-сы синыф уҡыусылары бирмәйәсәк", - тип хәбәр итте Айбулат Хажин.

✓ **Коронавирус эпидемияһы осоронда ла эш табырға мөмкин, тип билдәләй белгестәр.** Әйтәйек, hh.ru порталы мәғлүмәттәре буйынса, быйыл мартта Башҡортостанда вакансиялар һаны кәмемәгән һәм эш урыны өсөн конкуренция февраль кимәлендә һаҡланған. Мартта түбәндәге өлкәләр вакансиялар һаны буйынса сағыу ыңғай динамика күрһәткән: фән, мәғариф; медицина, фармацевтика; төҙөлөш, күсемһеҙ милек; эшсе персонал; сауҙа. Һәм, киреһенсә, спорт, фитнес, матурлыҡ; хәүефһеҙлек; маркетинг, реклама, PR; йорт персоналы; юғары менеджмент; бухгалтерия, финанстар; туризм, ҡунаҡханалар, ресторандар эш тураһында тәҡдимдәр һанын кәметкән. Шуға ҡарамаҫтан, хәҙер өҫтәмә эш эҙләүселәр байтаҡ. Улар өсөн hh.ru сайтында махсус бүлек асылды - бөгөн унда республикалағы 1,5 мең самаһы вакансия бар.

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1441 һиҗри йыл.

Апрель (Шәғбан)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Аҡшам намаҙы	Йәстү намаҙы
13 (20) дүшәмбе	4:50	6:20	13:30	18:44	20:14	21:44
14 (21) шишәмбе	4:47	6:17	13:30	18:46	20:16	21:46
15 (22) шаршамбы	4:45	6:15	13:30	18:48	20:18	21:48
16 (23) кесе йома	4:42	6:12	13:30	18:50	20:20	21:50
17 (24) йома	4:40	6:10	13:30	18:52	20:22	21:52
18 (25) шәмбе	4:38	6:08	13:30	18:54	20:24	21:54
19 (26) йәкшәмбе	4:35	6:05	13:30	18:56	20:26	21:56

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

ФӘҺЕМ ӨСӨН

ЙӘШӘУ - БҮЛӘК!

• Бөгөн ниндәйҙер асыулы һүҙҙәр әйтерҙән алда бөтөнләй һөйләшә алмағандар тураһында уйланығыҙ. • Аҙыҡ тәмен оҡшатмай көйһөҙләнерҙән алда тамаҡ туйҙырырлыҡ та мөмкинлеге булмаусыларҙы хәтергә төшөрөгөҙ. • Иреңә йәки ҡатыныңа зарланырҙан алда, Хоҙай мине ташламаһын, тип ялбарғандар барлығын уйла. • Тормошоңа зарланырҙан алда был донъяны бик иртә ҡалдырып китеүселәр тураһында иҫлә. • Балаларыңа зарланырҙан алда бик теләп тә бала таба алмай интегеүселәр барлығын хәтерлә. • Өйҙәге бысраҡҡа, тәртипһеҙлеккә, береһе лә йыйыштырмауға зарланғансы кемдеңдер ипләп алырлыҡ йәшәр урыны ла булмауын иҫеңдә тот. • Машинала үтергә кәрәк юлға зарланырҙан алда ошо уҡ арауыҡты көн дә йәйәүле йөрөргә тура килгәндәрҙе уйла. • Эшеңдән ялҡып, арып киткән мәлдәрҙә бик теләһәләр ҙә бер ҡайҙа ла урынлаша алмай йонсоғандар, инвалидтар тураһында уйла. • Кемгәлер бармаҡ менән төртөп күрһәтеп, уның хәленән көлөргә ашыҡма: гонаһһыҙ кеше юҡ һәм барыбыҙ ҙа тик бер Хоҙай алдында ғына яуап тотасаҡбыҙ. Ауыр уйҙар күңеленде ялмап алған мәлдәрҙә йылмай һәм ғүмер бүләк иткән өсөн Аллаһы Тәғәләгә рәхмәттәр уҡы.

✓ *Әгәр ҙә көшөлөгөңдәге аҡсаны башыңа һалһаң, уны һинән берәү ҙә тартып ала алмаясаҡ.*

(Бенджамин Франклин).

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

ҺӘР ӘШТЕҢ - ҮҘ ШИҒРИӘТЕ...

Бына XXV "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсы ла гөрләп үтеп китте. Үҙ эшенең оҫталарының иң мәртәбәле конкурсында ҡатнышыу бәхетен мин дә татыным. Ҙур конкурс булғас, ярыштар ҙа ҙур булды. Быйылғы конкурсҡа яңылыҡ индерелеүе - милли костюмды презентациялау - үҙенә күрә бер байрамға әүерелде. Һәр ҡатнашыусы үҙ төбәгенең кейемен күрһәтеп, башҡорт халҡының матди һәм рухи байлығын сағыу итеп асып бирҙе. Һәр этаптағы төрлө эштәрҙе конкурсанттар лайыҡлы үтәне, күрһәтте. Миңә бигерәк тә "Асыҡ лекция" этабы оҡшаны. Бында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың "Һәр эштең бар үҙ шиғриәте..." тигән һүҙҙәре асыҡ лекция темаһы тип тәҡдим ителде. Һәм мин ошо телмәремде, бер аҙ төҙәтеп-үҙгәртеп, һеҙгә лә еткерергә булдым.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың "Һәр эштең бар үҙ шиғриәте..." тигән һүҙҙәре менән тулыһынса килешәм. Минең аңлауымса, шиғриәт - ул матурлыҡ, тормош йәмен тапҡыр, татлы һүҙҙәр менән күрһәтеү. Һәм бөгөн мин "үҙенсәлекле" балалар менән эшләүҙең шиғриәтен күрһәтергә теләйем! Мин - юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һәм уҡытыусы-дефектологмын (олигофренопедагог). Һуңғы йылдарҙа Республика инвалид балаларға дистанцион белем биреү үҙәгендә (Дыуан бүлексәһендә) эшләйем. "Үҙенсәлекле" балалар менән эшләп, мин иң тәүҙә тормошто нисек бар, шулай ҡабул итергә, үҙенде нисек бар, шулай яратырға өйрәндем. Тыумыштан һуҡыр уҡыусым: "Мин бармын, шуның менән бәхетлемен. Әгәр ҙә мин донъяның ете төҫөн күрә алһам, мин донъяла ете тапҡыр бәхетле булыр инем!" - тине. Ә мин йәйғорҙоң ете төҫөн дә күрәм! Минең тормошомдоң шиғриәте ете төҫлө!

Башҡорт теле дәресендә уҡыусым менән "Теле барҙың, иле бар, иле барҙың, көнө бар" темаһына инша яҙҙыҡ һәм "Башҡорт телендә иң яҡшы инша" республика конкурсына ебәрҙек (БДУ-ла үткәрелде). Күпмелер ваҡыт үткәс, финалға үтеүсе тип, беҙҙе бүләкләүгә саҡырҙылар. Әле нисәнсе урын алғанды белмәһәк тә, уҡыусым менән осоп барҙыҡ Өфөгә. Бына БДУ алдына килеп еттек, көн бик һыуыҡ булмаһа ла, юл тайғаҡ ҡына ине. Күтәрмәне менгәнсе генә лә уҡыусым бер нисә тапҡыр йығылды. Мин ҡулымды биргәйнем, уҡыусым: "Үҙегеҙ йығылып ҡуймағыҙ!" - тине. Минең уҡыусымды бер нәмә лә борсоманы: әҙ генә өҫтө бысраныу ҙа, кешеләрҙең аптырап, көлөп ҡарауы ла - ул һикереп тора, өҫтөн ҡаға һәм тағы бер баҫҡысҡа күтәрелә! Уны бөгөн ҙур уңыш - Башҡортостаныбыҙҙың иң күркәм уҡыу йортоноң сәхнәһенә менеп бүләкләү көтә! Уның бар булмышы, бар ҡиәфәте "Мин булдырҙым!", "Мин башҡаларҙан кәм түгелмен!" тип әйтә ине! Һәм ошонда мин үҙемә төп ҡағиҙә булдырҙым: тормошта төрлө абыныу-йығылыуҙар була, тик һәр ваҡыт һикереп торорға, өҫтө ҡағырға һәм бер баҫҡысҡа күтәрелергә кәрәк! Ҙур уңыш көтә икән, һине бер нәмә лә туҡтатырға тейеш түгел! Әгәр ҙә уҡыусы менән тормош хәкиҡәтен асаһың икән, бына ошонда күрәм мин эшемдең шиғриәтен!

Коллегам туристик экскурсия менән Израилгә бара. Һәм унда уларҙы ҙур изге йортҡа экскурсияға алып баралар. Тик унда кем шул диндә, шуларҙы ғына индерәләр икән. Танышым аптырап ҡарап торғанда уның янына килеп, ҡайҙа эшләүен һорашалар ҙа, уны индереп ебәрәләр. Бик матур изге йорттан сыҡҡас, ойоштороусылар янына килеп һорай: "Мин бит мосолман, һеҙҙең диндә түгелмен. Мине нисек индерҙегеҙ ул?" Һәм ошонда уларҙың яуабы шаҡ ҡатыра танышымды: "Беҙҙең диндә кем "үҙенсәлекле" балалар менән эшләй, шулар изге йәнгә тиң!" Бына ошонда күрәм мин эшемдең шиғриәтен!

XXV "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында ҡатнашыуым менән шул тиклем бәхетлемен: яңы таныштар таптым, күп яңылыҡ астым, файҙалы мәғлүмәт белдем, профессиональ яҡтан ҙур үҫеш алдым. Ә иң бәхетле мәл - В. Сухомлинскийҙың "Йөрәгемде балаларға бирәм" миҙалын алыу булғандыр! Конкурсҡа әҙерләнгәндә, В. Сухомлинскийҙың "Йөрәгемде балаларға бирәм" китабын уҡып сығып, бөйөк педагогтың эше менән ғорурланғайным. Һәм конкруста тап ошо бөйөк шәхестең миҙалын алыу минең өсөн ҙур уңыш, мәртәбә булды, тормошома, эшемә тағы ла көс, ҡеүәт, ҡөҙрәт өҫтәне. Бына ошонда күрәм мин эшемдең һәм тормошомдоң шиғриәтен!

Айһылыу СИРБАЕВА,
Дыуан районындағы Республика инвалид балаларға дистанцион белем биреү үҙәге уҡытыусыһы.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

ДАУАМЫ БУЛА...

"Өфөнән һөйөү менән" популяр фильмының дауамы була. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына башҡорт кинорежиссеры Айнур Асҡаров һөйләне. "Өфөнән һөйөү менән" романтик комедияһы 2017 йылда төшөрөлдө һәм Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында күрһәтелде.

"Өфөнән һөйөү менән-2" проекты өҫтөндә эшләй башланыҡ. Был идеяны республика башлығы Радий Хәбиров тәҡдим итте. Яңы фильмда элекке сюжет дауам итмәй, ә бөтөнләй икенсе хәл-ваҡиға була. Хәҙерге ваҡытта Айҙар Аҡманов менән сценарий яҙабыҙ", - тине Айнур Асҡаров. Әлегә коронавирус инфекцияһы эпидемияһы арҡаһында фильмдың яҙмышы ниндәй булырын белмәйем, ләкин проект буйынса эш алып барыла, тип билдәләне режиссер. Команда башлыса шул уҡ ҡала. Бынан тыш, Айнур Асҡаров алдан башлаған икенсе ижади проекттарын дауам итә. "Эш күп. Мостай Кәримдең повесы буйынса "Өс таған" фильмының реклама кампанияһына әҙерләнәм. Ҡыҫҡа метражлы "Гильза" фильмын тамамлайбыҙ", - тине режиссер.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәкиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ҠАМЫШТЫ...

үҙ күленән ал

Үҙемдеке тигәндә, үгеҙҙәй ҡара көсөм бар; кешенеке тигәндә, булыр-булмаҫ эшем бар.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Бөйөк аҡыл эйәһе власть биләгәндә халыҡ уның барлығын һиҙмәй ҙә; бик үк аҡыллы булмаған кеше идара иткәндә халыҡ уны хөрмәт итә һәм маҡтай; ахмаҡ кеше власть биләгәндә халыҡ унан ҡурҡа; тағы ла ахмағыраҡ әҙәм идара иткәндә халыҡ уны күрә алмай.

(Лао-цзы).

Һин һуғып та, һиңә яуап бирмәгән кешенән һаҡлан: ул һине бер ваҡытта ла ғәфү итмәҫ һәм үҙе лә ғәфү үтенмәҫ.

(Бернард Шоу).

Изгелектәрҙән тыуған хәтерҙән үпкәләүҙәрҙән тыуған хәтер оҙағыраҡ һаҡлана.

(Пьер Буаст).

Берәүҙәр үпкәләүҙәрен йота, икенселәр - үпкәләтеүсене.

(С. Крытый).

Бөтөн донъя алданғанды ярата, шулай булғас, алдаһындар, әйҙә.

(Карло Караффа).

Белемле кеше генә өйрәнергә ынтыла, ә белемһеҙ өйрәтеүҙе өҫтөн күрә.

(Эдуар Ле Беркье).

Әгәр ҙә көшөлөгөңдәге аҡсаны башыңа һалһаң, уны һинән берәү ҙә тартып ала алмаясаҡ.

(Бенджамин Франклин).

Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Көтөүсе ағас күләгәһендә тәрән уйға сумып ултырған бер кешене күреп ҡала ла, уның эргәһенә сүгәләп, шулай уҡ уйға бата. Ул уйынан ғына үҙенең һарыҡтарын барлап, уларҙың йөнөнән алынасаҡ килемде ләззәтләнеп иҫәпләй башлай. Шулай оҙаҡ ҡына ултырғас, көтөүсе түҙмәй, "Әфәндем, һин ни тураһында уйлайһың?" - тигән һорау бирә. "Хоҙай тураһында", - тип яуаплай тегене. "Ә һин минең ни тураһында уйлауымды беләһеңме?" - тип һорай көтөүсе. "Шулай уҡ Хоҙай тураһында". "Юҡ, яңылышаһың, мин һарыҡтарымдың йөнөн һатһам, күпме килем алырмын икән, тип уйланым", - ти көтөүсе. "Барыбер Хоҙай тураһында уйлағанһың. Тик минең Алламдың һатыр нәмәһе юҡ, ә һинең Алландың иң тәүҙә баҙарға бараһы, шунан юлында юлбаҫар осратып, таланаһы бар, шунан ғына ул ошо ағас төбөнә килеп ултырып, йәшәү мәғәнәһе аҡсала түгел, ә уйлана белеүҙә, тигән һығымтаға киләсәк..." - тигән уйлы кеше".

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүүр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
10 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 295/04